✓ *Матур хыялдарға, ниндәйҙер өмөт сатҡыларына сорналып, Яңы йыл байрамын көтәбеҙ. Ул байрам үтер ҙә китер ул, йәшәүҙе дауам итербеҙ, яңы хыялдарға сорналырбыҙ. Шундай күңелдең бер мөйөшө бушаған мәлдә эргәгеҙҙә һеҙҙе рухландырған, сәмләндергән "Киске Өфө" кеүек тоғро дуҫығыҙ булыуын теләйһегеҙҙер бит? Тимәк, алдан хәстәрләргә онотмағыҙ: гәзит-журналдарға яҙылыу тамамлана.*

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

12 - 18 ДЕКАБРЬ (АҠЪЮЛАЙ) 2009 ЙЫЛ

www.kiskeufa.ru

№50 (364)

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Йөҙ йәшендә -**

университетыбыҙ...



4

**Олуғ ауыл...**

Сәйетбаба



5

**Халыҡ йырын йырламаған йырсы...**

үҙ талантын үҙе урлаған





8-9

**Иманға килгәс,**

күнелендә изгелек менән тултыр



12

**ТВ программа**

14


## *ШАҒИР ҺҮҘЕ - ЗАМАНДАШҠА*

**Рауил Бикбаевтың "Хазина"поэмаһында үҙәк урынға милләтебеҙҙең тарихын унын киләсәгенә бәйләр хазиналары - шәжәрәбеҙ һәм тыуған еребеҙ яҙмышы ҡуйыла. Әлбиттә, шағир был әҫәрендә лә быға тиклемге "Баҙар балтаһы", "Һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ", "Халҡыма хат" кеүек поэмаларында яҙылған милләтебеҙ тормошонда көнүҙәк булған барлыҡ проблемаларҙы ла урап үтә алмай. Әммә "Хазина"ла был проблемалар тәүгеләренә ҡарағанда ла киҫкенерәк ҡуйыла һәм әҫәрҙең аҙағында шағирҙың Аллаһы Тәғәләне иҫкә алыуы, үҙебеҙҙе Унын менән бергә, тип әйтеүен, милләтебеҙ яҙмышының аңлауҙарҙың иң юғары кимәлендә киҫкен икәнлеген иҫкәртеү, тип ҡабул итергә кәрәктер. Милләтебеҙ яҙмышы, бигерәк тә унын шәжәрәһе һәм тыуған ере өсөн шағирҙың был һыҙланыулы, мең хафалы уйҙары "Киске Өфө"нөң һәр бер уҡыусыһының йөрәгенә барып етһә, беҙ ундайҙарҙы халыҡ шағирының позицияһында торған милләт ҡаһарманы тип атар инек. Шулай булһын. Иншалла! Шағир әйтмешләй, "Беҙҙең менән Аллаһ!"**






Илдең аҫыл ире ине
Ҡаһарман Ғәҙел Аҡъюлов.
Ҡырҙы күпме ҡаһарманды
Тарихтың ҡара йот йылы.

Утыҙ ете, утыҙ ете,
Иңрәй ирҙәр, төрмә тулып.
Аталарын атҡан таңда -
Утыҙ һигеҙҙең йәйендә
Малай тыуҙы вариҫ булып.

Атай ҡаҡҡан дүңгәләккә
Эленмәне сәңгелдәге -
Өйөн сабый күрмәне лә.

Әсә ҡулына әсе яҙмыш
Һалды үкһеҙ был баланы,
Биләп хәсрәт йүргәгенә.

Исемен Юлдаш тип ҡушты -
Әй, әсәнең ышаныуы.
Ҡара мөһөр төп исеме:
"Улы халыҡ дошманының".

Өнһөҙ ҡалған әсә вә ул
Нужаларҙың үтте сиген.
Мираҫ булып атаһынан
Улына күсте аҡыл-зиһен.

Уҡыйым тиһә, биктәр ҡуйҙы
Ҡара мөһөр аҡ юлына.
Ярамай тарихсы булыу
Халыҡ дошманы улына.

Ҙур белемдәр бикле икән -
Өфөлә эш тулып ята.
Заводында абруйы ҙур,
Тик күңелен тарих тарта.

Исемен аҡлап Ғәҙелдәрҙең
Килде яҙыу-ҡатырғалар.
Тибеп сығарылған йортҡа
Яҙған икән ҡайтырға ла.
Егет булғас, асылды бит
Сабый саҡта асылыр ишек.
Өйгә алдан әсә инде
Берсә янып, берсә өшөп.

Йөрөтмәҫтер инде яҙмыш
Ҡабат типкеләп, түбәләп.
Эленеп тора түбәлә
Атаһы ҡаҡҡан дүңгәләк.

Юллап-даулап алды Юлдаш
Атай йортона ҡайтыуҙы.
Өйгә тағы ҡот өҫтәлде -
Килен төштө. Малай тыуҙы.

Эленде ейән бишеге
Ҡарттай ҡаҡҡан дүңгәләккә.
Улы үҫә. Донъя имен.
Бәхет өсөн күп кәрәкмәй!

Ошо йортҡа ҡайтҡанға ла
Ярты быуат үтеп киткән!
Көн башлана. Юлдашҡа ла
Юлланырға ваҡыт икән.

* * *

Ҡуҙғалырға ваҡыт.
Был эш менән,
Ҡайҙа ғына Юлдаш барманы.
Ул төҙөгән шәжәрәнең бөгөн
Ялғанмаҡсы яңы тармағы.

Ялғанырға торған был тармаҡты
Һуңға ҡалмай тиҙерәк табырға!
Был тирәлә күптән булғаны юҡ -
Танымаҫлыҡ булып яңырған.
Һәр тыҡрыҡты белгән
Юлдаштың да
Аптырашта тағы ҡалыуы.
Оҙағыраҡ күрмәй килеп сыҡһаң,
Таныш ерҙе ҡыйын таныуы.

Матурая Өфө. Балҡып тора
Яңы театрҙар, банктар.
Ни арала ҡалҡа тауҙай йорттар -
Һаман торлаҡ етмәй халыҡҡа.

Үҫмер саҡтан ил тип билен бөккән
Ҡартлығында асҡа ҡаҡлана.
Кемдәр йәшәй икән был йорттарҙа,
Ала икән ниндәй аҡсаға.

Шаҡ ҡатырлыҡ торлаҡ хаҡтарына!..
Ниндәй хаҡтар!..
Башбаштаҡлыҡ шаша,
Кем һуң тыйыр?
Хөкөм юҡ микән?

Ғүмерендә бында фатир алмаҫ
Хәләл эш хаҡына тир түккән.
Олатайҙарҙың түккән тирҙәре,
Оләсәйҙәрҙең бөккән билдәре,
Атайҙарҙың яуҙа янғаны,
СССР тип, түккән ҡандары,
Әсәйҙәрҙең ас-туң таңдары,
Яуҙан ҡара ҡағыҙ алғаны,
Күпме бала менән ҡалғаны,
Ағайҙарҙың сиҙәм ярғаны,
Апайҙарҙың һыйыр һауғаны,
Тырышлығы минең тиҫтерҙең,
Өмөттәре етем-еҫерҙең,
Күпме быуын күпме көс һалған -
Бөйөк дәүләт шунан тупланған.

Миллиондарҙың хәләл хеҙмәтенән
Тупланғанмы илдең көс-ҡеүәте...
Нисә йылдар ҡотора маскарад!
Шул байлыҡты урлап,
Рәсәй буйлап
Миллиардерҙар үрсей!
Мәсхәрә!
Бармы беҙҙең һымаҡ таланған ил,
Ботарлайҙар бөйөк Ватанды.
Был тиклем дә урлап була икән
Ҡаҙна малын, халыҡ тапҡанды!
Үҫә бара һаман өйөрҙәре
Ҡандар эсеп туймаҫ талпандың.

Егеттәр бар -
Күкрәк көсө менән,
Уңғанлығы менән юл ярған.
Намыҫтары дәрттәр өҫтәп торһон,
Табыш юлдаш булһын уларға.

Яҙмыштары, ай-һай, еңел түгел,
Тик иғтибар артһын Баш йорттан.
Башҡортостан өсөн терәк булып,
Байыһындар яңы башҡорттар!

Илде ҡотайтырлыҡ байҙар артһын,
Илде байыҡтырып байыҡһын.
Үрнәк алһын унан йәш уңғандар,
Иҫерек ауыл тиҙерәк айыҡһын.

Ер сигенән килеп, байып ята
Еребеҙҙә күпме килмешәк.
Ҡул ҡаушырып,
Ғәмһеҙ ҡарап торһаҡ,
Ошо хәлдәр менән килешһәк.

Тура килмәгәйе тыуған өйҙә
Өйҙәш кенә булып йәшәргә.
Тупланығыҙ, башҡорт уңғандары!
Милләтебеҙ ҡарай йәштәргә.

**(Дауамы 10-11-се биттәрҙә).**

ИШАРА

# ҠУРҠЫП УЛТЫРАМ...
## телевизорымды туҡандырырға

**Йәнһүрәттәр ҡарарға яратам мин. Тәүҙә ҡыҙым менән, һуңыраҡ ейәнем менән ҡарай башланым. Быны әле лә эштәремде тамамлап, телевизорымды туҡандырайым, тиһәм, бер йәнһүрәт иҫкә килеп төштө.**

"Гав исемле бесәй" тип атала һәм бесәй малайы тураһында ул. Күп өлөштәрҙән тора йәнһүрәт. Бер саҡ көсөк бесәй малайын эҙләп йөрөй һәм уны өй ҡыйығы аҫтында ултырған килеш тап итә лә: "Ни эшләп ултыраһың бында?" - тип һорай. Ә Гав исемле бесәй балаһы: "Йәшендән ҡурҡып ултырам", - тип яуаплай. Көсөккә ҡыҙыҡ тойола һәм: "Әйҙә, бергәләшеп ҡурҡайыҡ!" - ти. Шулай итеп улар бер-береһенә һыйынып, ҡойондан, йәшендән ҡурҡып ҡалтыранадар. Көсөк: "Әйҙә, өйгә инеп ҡурҡайыҡ. Юҡһа, бында ныҡ ҡурҡыныс" - тигән тәҡдим яһай. Өйҙә, ысынлап та, ул тиклем ныҡ ҡурҡыныс булмай. Былай ҡыҙыҡ түгел, тип, улар тағы ла өй ҡыйығы аҫтына инеп, ҡурҡып ҡалтыраныуҙы дауам итәләр...

Бына мин дә үҙемде шул бесәй балаһы һымаҡ тоям телевизор төймәһенә баҫыр алдынан. Ул телевизорҙы туҡандырып ҡына ла түйғансы ҡурҡырға мөмкин бит. Был хәлдәргә өйрәнә, күнегә лә башланым шикелле инде. Элек атыштарға, шартлауҙарға тертләй инем, әле "кино бит" тип ҡабул итәм. Шулай ҙа бөтәбеҙ ҙә биҙҙек ул "боевиктар"ҙан. Хатта ейәнем дә: "После одиннадцати показывают гадости", - тип әйтеп һалды. Әлдә китапхананан бер ҡосаҡ китап-журналдар алып ҡайтабыҙ, ул "тиле йәшник"те һүндереп ҡуйып, китаптарыбыҙҙы асабыҙ.

Гәзитебеҙҙең "Аҡыл - ҡаҙна" рубрикаһында баҫылған бер риүәйәт оҡшай миңә. Уҡыусыдар иҫләйҙер. Бер йоҡоһоҙлоҡ менән йонсоған кеше аҡыл эйәһенә килеп, кәңәш һораған, ти. Аҡыл эйәһе китап уҡырға кәңәш биргән быға. Кәңәш һораусы: "Китап уҡығандан һуң күпме ваҡыт үткәс йоҡлап китәһең?"- тип ҡыҙыҡһынған. "Күпме генә ваҡыт үтһә лә, ул файҙаға буласаҡ" - тигән аҡыл эйәһе. Ысынлап та, теләһә ниндәй, бер-береһенә ике тамсы кеүек оҡшаш сценарийҙарға төшөрөлгән кино (тәүҙә кемделер үлтерәләр, аҙаҡ ике сәғәт буйы үлтереүсене эҙләйҙәр) ҡарап, күпме ваҡытты бушҡа, файҙаһыҙға үткәрәбеҙ бит! Бер әсә ҡыҙына ҡунаҡҡа килә лә: "Бик йонсоу күренәһең, әллә "Яңылыҡтар" тапшырыуын ҡарайһыңмы?" - тип һорай. "Эйе, "Яңылыҡтар"ҙы ҡарайым", - ти ҡыҙы.

Минеңсә, беҙҙең илдә бик күптәр "тиле йәшник"тәрен туҡандырырға ла ҡурҡып ултыралар, ҙыр. Гав исемле бесәй малайы һәм уның дуҫы көсөк кеүек. Бәлки, ундай ҡурҡыныс фильмдарҙы юрый күрһәтәләрҙер? Ҡурҡып, шаңҡып бөткән кешеләр менән идара итеүе еңелерәк бит.

**Фәүзиә ЯХИНА.**

ПАРАДОКС



# ЯҠТЫ КИЛӘСӘККӘ ЫШАНЫҒЫҘ,
## булмаһа ла запас ыштанығыҙ...

**Шағир Буранбай Иҫҡужиндың шиғыр юлдары был. Ғөмүмән, бар ижады, асылда, парадокс фекерле әҫәрҙәрҙән генә торған яҙыусының ниндәй генә шиғыр, хикәйәһен, башҡа жанрҙағы яҙмаларын алып ҡарама, уларҙың барыһында ла ошоға оҡшаш ғәҙәттән тыш мәғәнә-мөнәсәбәтте аңлатҡан юлдарҙы осратырға була. Уларҙың күбеһе хәҙерге бөгөнгөбөҙҙәге күп кенә хәл-күренештәрҙең асылын асып биреү өсөн нигеҙ-асҡыс булырлыҡ.**

Ысынлап та, совет осоро тип аталған дәүерҙә кейергә запас ыштаныбыҙ булмаһа ла, яҡты киләсәккә ышанып йәшәнек. Алдаһаҡ та, коммунизм тигән ҡоролош - ул офоҡ артындағы һағым ғына икәнен белһәк тә, күңелебеҙҙә ҡапыл ғына аңлашылып та бөтмәгән яҡты киләсәккә ышаныс тойғоһо бар ине. Ул тойғо шул тиклем көслө булды, хатта киләсәгебеҙҙе яҡтыртып торҙо.

Өҫтәүенә ике автомобиль,
Йорт кәмендә утыҙ бүлмәле.
Коммунизм - карап, диңгеҙ - шарап, -

тигән шиғыр ҙа яҙҙы атаҡлы шағирыбыҙ Рәшит Назаров. Яҙырлыҡ та ине шул замана. Шиғыр ғына яҙырлыҡ түгел, аҡылыңдан да яҙырлыҡ ине ул заманалар.

Коммунизмды беҙ шулайыраҡ итеп күҙ алдына килтерҙек: бар кешеләр ҙә намыҫ менән арыу-талыу белмәй хеҙмәт итә, урлашмай, прогул яһамай, эсмәй-тартмай. Магазиндарға барып, үҙенә етерлек кенә кимәлдә бушлай әйбер һайлап ала. Коммунизмда милләттәр булмай, барлыҡ милләттәр ҙә тигеҙ һәм гармониялы үҫеш һөҙөмтәһендә бер-береһе менән ҡушылып, "совет милләтен" барлыҡҡа килтерә, улар эсперанто телендә һөйләшәсәк. Ошо маҡсатта хатта юғары уҡыу йорттарына махсус рәүештә эсперанто телен дә өйрәтә башланылар. Тағы ла нимәләр генә эшләмәнек коммунизмға әҙерлек эше алып барған ул саҡтарҙа. Күңелебеҙҙә йыр яңғырап торҙо.

Әле килеп, ил башлығының Федераль Йыйылышҡа Мөрәжәтенең Рәсәйҙең киләсәген тасуирлау өлөшөндә ана шул совет осорондағы киләсәк хаҡында хыял йөрөтөү ноталары сағылып китте барыбер. Әгәр ҙә ысулдарын иҫәпкә алмағанда, Рәсәйҙең шундай яҡты киләсәген күҙаллау теге саҡтағы Советтар Союзыныҡынан бер яғы менән дә айырылманы шикелле. Мөрәжәғәттә Рәсәй Федерализмы, Рәсәй составындағы йәшәгән милләттәрҙең ирекле үҫеше хаҡында айырым фекер әйтелмәне. Айырым осраҡта былай фекерҙәр дөйөм контекстағы айырым һүҙҙәр генә булып яңғыраны. Әйтергә кәрәк, ниндәйҙер абстракт милләт хаҡында ғына һүҙ барҙы кеүек сығышта. Рәсәй граждандар милләте йәки рәсәйлеләр милләте хаҡында. Граждандыҡ менән милләтте бутау - ул ағасты таш тип иҫбат итеп маташыуға тиң ахмаҡлыҡ.

Теге саҡта совет милләте ине. Хәҙер Рәсәй граждандар милләте, йәки рәсәйлеләр милләте. Хатта рус милләте лә түгел. Оҡшашмы? Бер яғы менән дә айырылмай һәм был кампанияның аҙағы ла, тәүгеһе кеүек, ниндәйҙер ҡоролоштоң емерелеүе менән тамамланыры көн кеүек асыҡ. Бының нигеҙендә Рәсәй составындағы милләттәрҙең хоҡуғын ғына түгел, рус милләтенең дә хоҡуғын танымау ята. Тәүгеһендә Советтар Союзы тарҡалғайны, тотош держава тарҡалғайны, юҡҡа сыҡҡайны, был юлы инде...

Рәсәй Федерацияһы уның составындағы йәшәгән халыҡтарҙың берләшеүе нигеҙендә барлыҡҡа килгән. Аҡыллы баштар ағас башына ултырып алған да, "модернизация" тигән бысҡы менән шул уҡ үҙҙәре ултырған ботаҡты бысып маташа. Парадоксмы? Парадокс!

**Әмир ҒҮМӘРОВ.**

ИҒТИБАР

# ХӨРМӘТЛЕ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

• 2010 йылдың беренсе яртыйыллығына гәзит-журналдарға яҙылыу кампанияһы тамамланып килә. Башҡорт телендә сыҡҡан баҫмалар араһында иң арзан хаҡ - "Киске Өфө"нөкө: 50665 индекслыһы - 306 һум 84 тин, 50673 индекслыһы (льготалыһы) - 294 һум 78 тин.

• Бүләк алыу барыбер ҙә күңелле икәнен уйлап, гәзиткә яҙылыу тураһындағы квитанцияларын редакцияға ебәреүселәргә бүләктәр отошо ла тәҡдим итәбеҙ. Ул бүләктәр араһында төҫлө телевизор ҙа, микротулҡынлы мейес тә, үтек-сәйнүктәр ҙә, кеҫә телефоны ла булыр. Шулай уҡ квитанцияларын тәүгеләрҙән булып ебәргән 200 уҡыусыбыҙ 2010 йылға Дини календарь алып та шатланыр.

• "Киске Өфө" - бүләгем" акцияһы ла дауам итә. Ауылдарҙа йәшәүсе атаәсәйҙәребеҙгә, туғандарыбыҙға, яҡындарыбыҙға, дуҫтарыбыҙға, туған мәктәбебеҙгә, мәсеттәргә "Киске Өфө" гәзитен бүләк итәйек.

• Кем тыуған көнө уңайы менән "Киске Өфө" гәзите биттәрендә ҡотланырға теләй? Шулар гәзиткә яҙылып, квитанцияһын редакцияға ебәрә, тыуған көнө датаһын хәбәр итә һәм ваҡыты еткәс, гәзит биттәрендә беҙҙең ҡотлауҙы уҡып, бәләкәй генә булһа ла шатлыҡ кисерә.

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Республикаһы Президенты Мортаза Рәхимов етәкселегендәге рәсми делегация Австрияға һәм Германияға барып ҡайтты.

✓Сибайҙа БР Хөкүмәте Премьер-министры Раил Сарбаев рәйеслегендә кәңәшмә булып үтте. Унда Башҡортостандың Урал аръяғы төбәгенең социаль-иҡтисади үҫеше мәсьәләләре тикшерелде. Кәңәшмәлә ҡатнашыусылар Урал аръяғы иҡтисад секторының эше, ауыр хәлдә ҡалған ғаиләләргә ярҙам итеү, яңғын хәүефһеҙлеген тәьмин итеү тураһында һөйләнеләр.

✓Урындағы үҙидараның Бөтә Рәсәй советының III съезында муниципаль берәмектәрҙең йыл һайын уҙғарыла торған конкурсына йомғаҡ яһалды. "Урындағы үҙидараның иң яҡшы башлығы" номинацияһында беренсе урынға Дәүләкән районы муниципаль район хакимиәте башлығы Закир Бикбулатов лайыҡ булды.

✓Башҡортостан Республикаһында Халыҡ-ара Мифтахетдин Аҡмулла көндәре булып үтте. Төп саралар - тематик күргәҙмәләр, асыҡ дәрестәр, профессор Әхмәт Сөләймәновтың "М. Аҡмулланың ырыуҙаштары - меңдәрҙең фольклоры" китабы менән таныштырыу, Башҡортостанда туған телдәрҙе уҡытыуға арналған "Түңәрәк ҡор" - барыһы ла күренекле башҡорт мәғрифәтсеһенең исемен йөрөткән Башҡорт дәүләт педагогия университетында ойошторолдо. Артабан саралар Аҡмулланың тыуған яҡтарында - Миәкә районында дауам итте. БР Президенты был сарала ҡатнашыусыларға ҡотлау хаты ебәрҙе.

✓Ошо көндәрҙә Пермь ҡалаһындағы төнгө клубтарҙың береһендә янғын сығыу сәбәпле йөҙҙән ашыу кеше һәләк булыуы, тағы шул ҡәҙәреһенең ауыр хәлдә дауаханаларға эләгеүе тураһындағы хәбәр тетрәтте. БР Президенты ошо айҡанлы Пермь крайы губернаторы О. Чиркуновҡа ҡайғы уртаҡлашыу телеграммаһы ебәрҙе.

✓Республика балалар клиник дауаханаһының һәм 21-се ҡала дауаханаһының лор-бүлексәләре базаһында "Оториноларингология буйынса фәнни-клиник үҙәк" эшләй башланы. Быға тиклем Мәскәү һәм Санкт-Петербург клиникаларында ғына дауалана алған ауырыуҙарҙы хеҙмәтләндерәсәк был үҙәктә республика халҡы ғына түгел, ә яҡын төбәктәрҙән дә дауалана аласаҡтар.

*✓ Янғынға әҙер булмай сыҡты "Аҡһаҡ алаша". Ә илебеҙ әҙерме һуң? Янғынға ғына түгел. Мәҫәлән, көрсөккә. Бөтә донъяны ут кеүек солғап алған иҡтисади кризисҡа.*



*АҘНА ШАҢДАУЫ*

# БӘЛӘ ҺОРАП ТОРМАЙ КИЛӘ ЛӘ...

## эш үткәс, уны ҡаршыларға әҙерләнәбеҙ

**Николай Васильевич Гоголдең "Үле йәндәр" поэмаһын асып ҡарағыҙ әле. Беренсе өлөштөң иң аҙағында классик Рәсәйҙе нимә менән сағыштыра әле? Дөрөҫ, етеҙ, ҡыуып үтеп булмаҫлыҡ "тройка" менән. Русь, ҡайҙа еләһең һин, яуап бир, тип оран һала Николай Васильевич. Яуап бирмәй Рәсәй. Ҡайҙалыр елә лә елә. Әллә үргә, ҡояшта ялтырап балҡып торған бейек тауҙар башына саба, әллә аҫҡа - төпһөҙ, ҡараңғы упҡынға. Берәү ҙә белмәй. Берәү ҙә яуап таба алмай. Хатта Рәсәй үҙе лә. (Һуңғылары - упҡын менән үр тураһындағылары Гоголдеке түгел. Минеке).**

Кемгә нисектер, әммә Пермдәге "Аҡһаҡ алаша" клубында сыҡҡан ұрттән һуң (шулайтып тәржемә итергә булдым әле был аҙаплы ял итеү урынын) миңә Гоголдең тап ошо һүҙҙәре иҫкә төштө. Быуат ярым элек яҙған ул ҡайҙалыр елеп барған Русь тураһындағы һүҙҙәрҙе. Бер нәмә лә үҙгәрмәгән төҫлө. Һаман ҡайҙалыр еләбеҙ, осабыҙ. Кемделер ҡыуып етергә, үтеп китергә тырышабыҙ. Тик... Еләбеҙме? Осабыҙмы? Әллә илебеҙ бөгөн "тройка"ны түгел, ә аҡһаҡ алашаны егеп алғанмы? Бәлки, үҙебеҙгә елгән кеүек тойолалыр ҙа, башҡалар өсөн беҙ күптән арттан ҡалғанбыҙҙыр?

"Аҡһаҡ алаша"лағы хәл (һүҙ Пермдәге төнгө клуб хаҡында бара) дәүләтебеҙҙең бөгөнгө торошона шул тиклем оҡшаш, хатта ҡурҡыныс булып китә. Аңлашылмаймы? Төшөндөрөргә маташайым. Янғынға тиклем был клубта бөтәһе лә матур һәм күркәм булған. Кейенешеп-яһанышҡан йәш ҡыҙҙар һәм олпат, бай, дәрәжәле ир-аттар (янғын ҡорбандарының исемлегенә ҡарап фараз йөрөтәм, ә бит уртаса чегы 2 мең һумдан да кәм булмаған ресторанға ярлы-ябаға йөрөй алмай), ҡыйбатлы эсемлектәр, өҫтәлдәрҙә зиннәтле һый-хөрмәт, сәхнәлә ярымяланғас бейеүсе ҡыҙҙар, дәртле музыка һәм... уттарын өҫкә бөрккән фейерверк. Гүзәл күренеш бит! Берәү ҙә янғын тураһында уйламай, сигенеү юлдарын хәстәрләмәй. Берәү ҙә һалам менән көпләнгән түшәмгә башын күтәреп ҡарамай. Ә нимәгә? Улар бит бында янып үлер өсөн килмәгән. Улар бит бында күңел асырға йыйылған, клубтың тыуған көнөн билдәләргә ашыҡҡан. Ә клуб тигәндәре нимә һуң? Элекке магазинмы шунда. Тәҙрәләре юҡ. Ҡасандыр ҙур иркен витриналары булған, имеш. Һуңынан кәрәге сыҡҡан. Кирбес менән көпләп ҡуйғандар. Ҡунаҡтар янғында тонсоғоп үлһендәр, тип түгел, әлбиттә. Ҡояш яҡтыһы төшөп, клубтағыларҙы борсомаһын өсөн дә түгел. Урамдағылар эстә күңел асҡандарҙы күрмәһен өсөн. Һәм - кирәһенсә. Клубҡа (аҡсалары булмау сәбәпле) инә алмағандарҙың күренеше эстә байрам итеүселәрҙең күңелдәрен ҡырмаһын өсөн һәм бер төн эсендә генә ҡайһы берәүҙәрҙең айлыҡ эш хаҡын туҙҙырыусыларҙы күреп, урамдағылар тауыш күтәрмәһен өсөн эшләнгәндер ул? Һөҙөмтәлә нимә килеп сыҡты инде? Кәрәк саҡта тәҙрәһен онтай һалып урамға, саф һауаға сығырҙар ине, булмай шул. Быяла урынына - кирбес стена. Ишектәре лә тар ғына. Сит-яттарҙы индермәҫ өсөн тар ишектәр, бәлки, ҡулайлылыр ҙа, ә аяуһыҙ уттан ҡотолорға маташҡанда улар кәртә булып ҡына тора.

Янғынға әҙер булмай сыҡты "Аҡһаҡ алаша". Ә илебеҙ әҙерме һуң? Янғынға ғына түгел. Мәҫәлән, көрсөккә. Бөтә донъяны ут кеүек солғап алған иҡтисади кризисҡа. Тәүҙә бит дәүләтебеҙ башлыҡтары уны күрмәй маташты. Беҙҙә кризис юҡ, тинеләр. Ул барыбер илебеҙҙе урап үтә, тинеләр. Ахыры сиктә, алдар әмәл ҡалмағас, был кризис түгел, ә уның эҙемтәләре генә, тип ҡотолдолар.

Пермгә әйләнеп ҡайтайыҡ. Янғындың иртәгәһенә үк унда ашығыс рәүештә ғәйепләләрҙе эҙләргә тотондолар. Кемдәр улар? Иң тәүҙә, әлбиттә, клубтың хужалары! Янғын хәүефһеҙлеге саралары тураһында һүҙ ҙә юҡ! Янғын һүндереүселәр, тикшереүсе органдар ваҡытында етешһеҙлектәрҙе асыҡлап, хужаларға еткереп барғандар, имеш. Ә улар табыш артынан ҡыуып, быға иғтибар итмәгәндәр. Уйлап ҡараһаң, янғынға ҡаршы тороу ҡағиҙәләрен үтәмәгән өсөн штраф - 2 мең һум(!?). Ә былдай сумманы клубтың бер генә ҡунағы бер сәғәт эсендә генә ҡалдырып китә торған булған. Хужалар ҡулға алынды ла ул. Әммә эш быының менән генә бөттө микән? РФ Президенты һәм уға ҡушылып РФ Хөкүмәте Премьер-министры ла тиҙ арала ғәйепләләрҙе табырға бойорҙо. Янғын һүндереүселәрҙең етәкселәре - вазифаһыҙ, Пермь крайы - хөкүмәтһеҙ, ҡала - башлыҡһыҙ ҡалды. Тағы ла кем ғәйепле, кемде яуаплылыҡҡа тарттырырға, кемде эшенән алырға, кемде ҡыуырға, кемде төрмәгә ултыртырға? Пермь крайы губернаторы үҙе бөгөндән баш һалырға әҙер.

Ә ни эшләп ябай ғына бер янғынға иғтибар шундай ҙур әле, тигән һорау тыуманымы башығыҙҙа, ә? Бар бәлә-ҡазаларҙы үҙ күҙҙәре менән күреп өйрәнгән Сергей Шойгу тураһында түгел һүҙем. Был юлы бит фажиғә урынына башҡа министрҙар ҙа килеп етте - һаулыҡ һаҡлау өлкәһе башлығы Татьяна Голикова, эске эштәр министры Рәшит Нурғәлиев. Әллә юғары етәкселек Пермдәге янғынды террористик акт тип ҡабул иттеме? Ошо урында шундай һорау тыуа: бынан ике аҙна элек кенә Мәскәү - Петербург тимер юлында "Нева экспресы" составы шартлау һөҙөмтәһендә откос аҫтына осҡайны. Путин бит унда ни эшләптер барманы. Фажиғә урынына сәскәләр шәлкеме һалманы. Матәм көнө лә иғлан ителмәне. Берәү ҙә ғәйепләләрҙе чиновниктар, юғары вазифалы түрәләр араһында эҙләмәне. Уларҙы эҙләп табып, яуаплылыҡҡа тарттырырға бурыс та ҡуйылманы хатта.

Ә бит Пермдә, асылда, иҫерек кешеләр утта янып үлде. Күңел асыу өсөн йыйылған кешеләр. Үҙ ғүмерҙәрен Рәсәй тимер юлдарына ышанып тапшырғандар түгел. Яп-ябай көнкүреш фажиғәһе, йәғни. Ундайҙар аҙым һайын тиерлек осрап тора. Масштабтары икенсерәк. Иҫеректәрҙең тәмәке тартҡан килеш йоҡлап китеп, үҙҙәре лә һәләк булыуҙары, яҡын-тирәләге кешеләрҙе лә, йорт-ҡаралтыны ла йыш ҡына үртәүҙәре тураһында хәбәрҙәр ишетелеп кенә тора бит.

Шулай булғас, "Аҡһаҡ алаша"лағы хәл "Нева экспресы" менән булған хәлдән нимәһе менән айырыла һуң? Һәләк булыусы кешеләрҙең һаны менән, тиерһегеҙ. Тимәк, беҙҙең дәүләткә бер ыңғайы күпләп һәләк булғандар ғына ҡәҙерлеме? Ә бит бер йыл эсендә генә Рәсәй юлдарында меңәрләгән кеше ғүмерен йәки һаулығын юғалта. Бер йыл эсендә янғындарҙа ла ил буйынса йөҙәрләгән, ә бәлки, меңәрләгән кеше һәләк була. Уларҙың ҡәҙере юҡмы ни хәҙер?

"Нева эксперсы" менән булған фажиғәне шунда уҡ террорсылар эше тип баһаланылар. Һәм был дөрөҫ. Айыҡ аҡыллы кеше үҙ теләге менән ҡайҙалыр, йәһәннәм төпкөлөнә (хәтерләһәгеҙ, шартлаған ергә хатта "Ашығыс ярҙам" машиналары ла бер нисә сәғәт эсендә саҡ барып еткәйне), поезды шартлатырға китеп бармай ҙа баһа. Улар йә фанатиктар, йә фанатизм нигеҙендә аҡылдан яҙғандар. Иҫегеҙҙәлер, беҙ терроризмды еңдек. Йәки, еңеп барабыҙ. Ни булһа ла, террорсылар илебеҙҙә ҡалманы, тиерлек. Был шарттарҙа поездың шартлауы (теләһә ниндәй состав түгел бит әле - беренсе баш ҡаланан икенсеһенә - бөгөнгө ил етәкселәренең тыуған ҡалаһына - китеп барғаны) дәүләттең терроризм менән алып барған аяуһыҙ көрәшен һәм, айырыуса, еңеүҙәрен юҡҡа сығара ла баһа. Террорсылар кисә генә юҡ ине, бөгөн бар булып сығамы? Ошо фактҡа йәмәғәтселектең иғтибарын мөмкин тиклем әҙерәк йәлеп итеү мөһим. Ниндәй матәм көнө булыуы мөмкин был шарттарҙа?

"Аҡһаҡ алаша" менән иһә хәл башҡасараҡ. Халыҡты янғындан һаҡлауҙы ойоштороу Үҙәктең эше түгел. Быға төбәктәр яуап бирә. Халыҡ алдында уның мәнфәғәттәрен яҡлаусы булараҡ сығыш яһау өсөн Мәскәүгә ошонан да уңайлыраҡ мәл юҡ, күрәһең. Үҙенде ҡәтғи, талапсан, хатта ҡаты ҡуллы етәксе итеп күрһәтеү, халыҡ араһында юғалып барған абруйҙы арттырыу өсөн самай ҡулай ваҡыт был. Яңылышам микән? Яңылышһам, әй ҡыуаныр инем.

**Таһир ИШКИНИН.**

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*

## "ЛИНЧ ХӨКӨМӨ"МӨ?

Рәсәй Федерацияһы Эске Эштәр министры Рәшит Нурғәлиев, әгәр ҙә тәртип һаҡсылары намыҫлы граждандарға бәйләнһә, һөжүм итә ҡалһа, улар милиция хеҙмәткәрҙәренә шундай уҡ формала яуап бирә ала, тигән һүҙ әйтеп ысҡындырҙы. Әйткән һүҙ - атҡан уҡ, тиҙәр. Рәсәйлеләрҙең миллионлаған ҡолаҡтары "ҡарп" итеп ҡалды. Был хәл ысын була ҡалһа, тәртип һаҡсыларына "һунар" сезоны асыла бит, йәмәғәт. Һәр хәлдә, теге йәки был урында тәртип һаҡсыларына һөжүм яһала ҡалһа, иң беренсе булып министрҙың ошо һүҙҙәрен иҫкә аласаҡтар. Ирекһеҙҙән, Америка Ҡушма Штаттарында XIX быуат аҙағында, XX быуат башында күҙәтелгән "Линч хөкөмө" заманы иҫкә килеп төштө. Чарльз һәм Уильям Линч фамилияһынан алынған был күренештең нигеҙендә дәүләттең үҙ илендә тәртип урынлаштыра алмауы сәбәбе ята. Тап шул арҡала бигерәк тә Көньяҡ Штаттарҙа 85 процент үлем яҙаһы судһыҙ-ниһеҙ тормошҡа ашырыла. Рәсәйҙә "Линч хөкөмө" күренеше күҙәтелмәҫ тә ул, әммә министр һынлы министрҙың ауыҙынан ошо һүҙҙәр сыҡҡан икән, юҡҡа ғына әйтелмәгән улар.

**Әмир ҒҮМӘРОВ.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостанда һыйыр ите етештереү буйынса донъя лидерҙарының береһе булған илдең -Австралияның эксперттары булды һәм республика хужалыҡтары өсөн һатып алынған тоҡомло малдың хәл-торошо менән таныштылар, Рәсәй белгестәре менән берлектә тоҡомло малсылыҡ мәсьәләләре буйынса кәңәшмә үткәрҙе. Быйыл Башҡортостан был илдән алты мең баш тоҡомло мал һатып алған.

✓Нимәнелер ситтән һатып алабыҙ, ниҙелер үҙебеҙ ҙә һатабыҙ. Мәҫәлән, "Башҡортостан троллейбус заводы" асыҡ акционерҙар йәмғиәте етештергән электр транспорты бар яҡтан да заман талаптарына яуап бирә. Шуға ла уға ситтән дә һорау арта. Ошо көндәрҙә генә һигеҙ троллейбусты Ставрополь ҡалаһы һатып алды. Йыл аҙағына тиклем был ҡалаға тағы ҡырҡ алты троллейбус оҙатыласаҡ.

✓Мәскәүҙә Рәсәй агросәнәғәт комплексын һәм ауыл тормошон яҡтыртыусы журналистар һәм матбуғат баҫмалары араһында ойошторолған "АГРО-СМИ-2009" Бөтә Рәсәй фестивале лауреаттарын тәбрикләү тантанаһы булып үтте. Призлы урындарҙың береһен Мәләүез районының "Путь Октября" гәзите яуланы һәм автомобиль менән бүләкләнде.

✓Мәләүез районының Мәжит Ғафури исемендәге ҡошсолоҡ комплексы күркә ите етештереү менән шөғөлләнә. Уларҙың продукцияһы бар Рәсәйҙә ҙур һорау менән файҙалана. Көн һайын Мәскәүгә генә 12-15 тонна күркә ите оҙатыла. Шулай уҡ продукция Татарстанға, Һамар, Тула, Ырымбур, Свердловск өлкәләренә лә ебәрелә. Был Рәсәй кимәлендәге уникаль предприятиела күптән түгел БР Президенты булып китте һәм предприятие эшенән ҡәнәғәт ҡалды.

✓Йыл башынан республикабыҙҙа 2005 йылдың 1 мартына тиклем иҫәпкә торған 308 Бөйөк Ватан һуғышы ветераны һәм инвалиды торлаҡ менән тәьмин ителгән. Тағы ла 122 ветеранға торлаҡ алыуға субсидия биреү тураһындағы таныҡлыҡ тапшырылған. Сират 2005 йылдың 1 мартынан һуң иҫәпкә ҡуйылғандарға етә һәм улар ҙа оҙаҡламай торлаҡлы буласаҡ.

✓ *Ата-әсәһе тарафынан яҡшы башланғыстары һәм пландары хупланған саҡта, уларҙың һәр эшендә ярҙам ҡулы һуҙырға әҙер тороуын тойғанда бала тирә-яҡ мөхиткә лә тиҙ яраҡлаша.*



*ТӨРЛӨҺӨНӘН*

## ШЫРШЫ САҠЫРА

**22 декабрҙә Конгресс-холда үтәсәк Президент шыршыһына әҙерлек тулы ҡеүәтендә бара.**

Йола буйынса, был тамашаға республика ҡала һәм районды мәктәптәренән яҡшы билдәләргә өлгәшкән уҡыусылар, олимпиадалар һәм спорт ярыштары еңеүселәре, хеҙмәт бурысын үтәгәндә һәләк булған эске эштәр органдары хеҙмәткәрҙәре һәм хәрбиҙәрҙең балалары саҡырыла. Президент шыршыһында быйыл 680 бала ҡатнашасаҡ. Уларҙың барыһына ла бүләктәр әҙерләнгән. Йәш тамашасыларҙы "Бер ваҡыт Яңы йыл алдынан, йәки 32 декабрь" тип аталған спектакль көтә.

Яңы йыл тамашалары баш ҡаланың башҡа театрҙарында ла ойошторолаcаҡ. Әлеге мәлдә театрҙарҙың ижади коллективтары балалар өсөн ҡыҙыҡлы һәм сағыу саралар әҙерләү менән мәшғүл.

## ПИРОТЕХНИКАҺЫҘ...

**Яңы йыл алдынан Башҡортостанда "Сфера-хәүефһеҙлек" тип аталған оператив-профилактик операция старт алды. Уның сиктәрендә милиция хеҙмәткәрҙәре пиротехника һатыу менән шөғөлләнгән сауҙа нөктәләрен тикшерәсәк.**

Байрам алдынан бындай саралар бар төбәктәрҙә лә йыл һайын үткәрелә. Былтыр республика милиционерҙары дөйөм суммаһы 3 миллион һумлыҡ 200 мең петарданы һатыуҙан алғайны. Быйыл Пермдә булып үткән фажиғәле хәлдән һуң, был профилактик сараға айырыуса иғтибар бүленәсәк. Рейд барышында Дим биҫтәһендә 11 мең пиротехник продукция ҡулға алынған да инде, Вьетнам эшҡыуарының бындай тауарға тейешле документтары булмаған, етмәһә, улар һаҡланған урын хәүефһеҙлек талаптарына яуап бирмәй. Эшҡыуарға ҡарата административ хоҡуҡ боҙоу тураһында протокол төҙөлгән, продукция Эске эштәр министрлығының махсус складына оҙатылған.

## КИҘЕҮ КӘМЕЙ

**8 декабрҙән республика халҡына A/H1N1 киҙеүенә ҡаршы прививка эшләнә башланы. Прививка, тәү сиратта, медицина һәм социаль өлкә хеҙмәткәрҙәренә, 18 йәше тулған студенттарға яһаласаҡ. Ә башҡалар йәшәү урыны буйынса дауаханаға мөрәжәғәт итә ала.**

Бөгөнгө көнгә республикала сусҡа киҙеүе менән сирләүселәр һаны кәмей башланы, һуңғы ике аҙнала бер үлем осрағы ла теркәлмәгән. БР Хөкүмәте август айында уҡ 10 миллион һумға киҙеүгә ҡаршы препараттар һатып алыу тураһында ҡарар ҡабул иткәйне, октябрь аҙағында хәл киҫкенләшкәс, өҫтәмә рәүештә 32 миллион һум аҡса бүленде. Белгестәр әйтеүенсә, республикала башланған прививкалар РФ Һаулыҡ һаҡлау министрлығы тарафынан тәҡдим ителгән.

*АФАРИН!*

# ЙӨҘ ЙӘШЕНДӘ - университетыбыҙ...

**Үткән аҙнала республикабыҙҙың иң абруйлы юғары белем биреү йорттарының береһе - Башҡорт дәүләт университетының 100 йыллыҡ юбилейына арналған саралар үтте. Өфө һәр йәш кешене үҙенең мәҙәни усаҡтары, меңәрләгән төҫтә балҡыған төнгө уттары менән генә түгел, ә абруйлы уҡыу йорттары менән дә үҙенә тартып тора һәм республикабыҙ мәктәптәрен тамамлаған сығарылыш уҡыусыларының күбеһе, моғайын да, БДУ-ла белем алырға хыялланалыр. Әйҙәгеҙ, бөгөн төрлө йылдарҙа тап ошо уҡыу йортонда уҡыу бәхете тейгән кешеләрҙең үҙҙәренә һүҙ бирәйек.**

**Әнүзә ФӘИЗОВА, БДУ-ның Учалы филиалы уҡытыусыһы:** Мин үҙем ошо уҡыу йортоноң башҡорт филологияһы факультетын тамамлағайным һәм күңелле студент сағымдың ошо стеналарҙа үтеүенә сикһеҙ шатмын. Фольклор йыйырға йөрөүҙәр, Марат Минһажетдинов кеүек бөйөк остаздар биргән дәрестәр һаман да иҫтә. Бөгөн курсташтарымдың барыһы ла төрлө белем усаҡтарында балалар уҡыта, беҙҙең менән бергә уҡыған Айһылыу Йәғәфәрова яҙыусы булараҡ танылды. Шуны ла билдәләп китергә кәрәк: БДУ-ның республикабыҙҙың төрлө төбәктәрендә уңышлы эшләп килгән филиалдары ла белгестәр әҙерләүҙә мөһим роль уйнай. Сөнки баш ҡаланан йыраҡ урынлашҡан райондарҙан барыһы ла Өфөгә уҡырға килә алмай. Хәҙер бөтә урында ла төрлө йүнәлештәр буйынса Европа класлы белгестәр талап ителә. Шуға ла БДУ-ны үҙ артынан бөтә мәғариф системаһын әйҙәп алып барырлыҡ ҡеүәтле фәнни-мәғариф үҙәге булып тора, тип уйлайым.

**Флүрә ЗӘҒӘФҮРӘНОВА, тирә-яҡ мөхитте һаҡлау һәм тормош хәүефһеҙлеге кафедраһы доценты:** Университеттың 100 йыллыҡ юбилейын оло тулҡынланыу менән ҡаршылайым, сөнки БАССР-ҙың Юғары совет президиумы рәйесе булып эшләгән сағында БДУ-ның киләсәген булдырыуҙа атайым Фәйзрахман Зәғәфүрәнов та үҙ өлөшөн индерә, шуға ла минең өсөн был уҡыу йорто бигерәк яҡын. Мин эшләй башлағанда, БДУ урынлашҡан бина бәләкәй генә ине, һуңғараҡ уҡыу йортоноң тышҡы йөҙө лә, белем биреү сифаты ла ыңғай яҡҡа ғына үҙгәрә барҙы. Хәҙерге студенттар ҙа, беҙҙең замандағы кеүек, уҡыйҙар ҙа, эшләйҙәр ҙә, бигерәк белемлеләр, аҡыллылар, ҡыйыуҙар, хатта ҡайһы саҡта беҙҙе өйрәтеп ебәреүҙән дә тартынмайҙар.

**Алмас ШАММАСОВ, БР Журналистар союзының яуаплы сәркәтибе, БДУ ассистенты:** Мәктәптә уҡыған саҡта уҡ журналист булырымды беләм инем, шуға ла Өфөлә генә түгел, Башҡортостанда ла был һөнәргә уҡытҡан берҙән-бер классик университет булараҡ, БДУ-ны һайланым. Университетта уҡыу йылдары минең шәхес булараҡ формалашыуымда мөһим осор булып торҙо, абруйлы уҡытыусыларыбыҙ һайлаған һөнәремә төшөнөргә, ижадыма дөрөҫ йүнәлеш бирергә, тормошта үҙ урынымды табырға ярҙам итте. Улай ғына ла түгел, университет миңә күп үрҙәргә артылырға, маҡсаттарға ирешергә ярҙам итте, төплө белем генә бирмәне, кешене биҙәй торған матур сифаттарға ла эйә булдым. Уҡытыусыларым кәңәше буйынса, кандидатлыҡ диссертацияһы өҫтөндә эш башланым, фән менән бергә уҡытыусылыҡ эшен дә алып барам. Бер быуатлыҡ тарихы булған университет донъяла абруй ҡаҙанған, юғары сифатлы белем биргән уҡыу йорто булып тора. Артабан да университеттың, студенттарыбыҙҙың уңыштарына ҡыуанып, оло еңеүҙәргә өлгәшеп йәшәргә яҙһын, тип теләйем.

**Ләйсән НАФИҠОВА яҙып алды.**

**М. Ломоносов исемендәге Мәскәү дәүләт университеты ректоры, академик Виктор САДОВНИЧИЙ: "Минең тәүге алты аспирантым Башҡорт дәүләт университетын тамамлаусылар ине. Хәҙер улар барыһы ла көслө математиктар, кандидатлыҡ һәм докторлыҡ диссертациялары яҡлаған кешеләр һәм ошо университетта эшләйҙәр. Минең ғилми йәшлегем улар менән үтеүенә бик шатмын..."**




*ҮӘТ БИТ ӘЙ!*

## ҮҘЕҢ БИТАРАФ БУЛМАҺАҢ... балаңа ла яҡшы булыр

Баш ҡала округы хакимиәтенең йәштәр сәйәсәте буйынса комитеты бөгөнгө йәштәрҙең социометрик портретын асыҡлау буйынса күҙәтеүҙәр үткәргән. Был тикшеренеүҙәрҙең төп маҡсаты - үҫмерҙәр, балалар араһында таралған агрессивлыҡ, иртә башланған енси тормош, уҡыуҙа насар өлгәшеүсәнлек, наркоманлыҡ кеүек йәмһеҙ күренештәрҙең сәбәптәрен асыҡлау.

Шундай тикшеренеүҙәрҙең береһен комитет БР Мәғариф министрлығы менән берлектә урта мәктәптәр нигеҙендә уҙғарған. Үҫмерҙәрҙең йәшәү рәүешен һәм тормош ҡиммәттәрен өйрәнеү һығымталары түбәндәгесә: абруйҙы күтәрә һәм симпатия тыуҙыра торған юғары социаль статус ата-әсәһе битараф булмаған балаларға хас. Ата-әсәһе тарафынан яҡшы башланғыстары һәм пландары хупланған саҡта, уларҙың һәр эшендә ярҙам ҡулы һуҙырға әҙер тороуын тойғанда бала тирә-яҡ мөхиткә лә тиҙ яраҡлаша. Ата-әсә уның белем алыуын, өлгәшен даими күҙәткәндә уҡыуы ла тотороҡло бара. Түбән социаль статус, тиҫтерҙәре менән аралашыуҙа тыуған ҡыйынлыҡтар көсөргәнешле эмоциональ бәйләнештәр булған ғаиләләрҙә үҫкән балаларға хас. Ҡағиҙә булараҡ, бындай ғаиләләрҙә ата-әсә баланың бар эшенә ҡыҫыла, барыһы ла уларса булыуын теләй, балаға ирек бирмәй. Һөҙөмтәлә бала үҙ-үҙенә ябыла һәм киләсәктә йәмғиәттә үҙ урынын тапмай ыҙалай. Ата-әсәһен һанға һуҡмаған балалар уҡыуҙа ла насар өлгәшә.

Йәштәр комитеты ғаилә мөнәсәбәттәренең мәктәп йәшендәге балаларҙың өлгәшенә йоғонтоһон да өйрәнгән. Ғаилә йәмғиәт менән бала араһын ялғап тороусы сылбыр. Баланың йәмғиәткә яраҡлашыуында, унда үҙен нисек тотоуында тап ғаилә мөһим роль уйнай. Ғаилә баланың уҡыу процесында ла ҡатнашырға тейеш. Бала шәхси мәнфәғәттәренән сығып, дөйөм кешелек ҡиммәттәренә лә иғтибар итә башлаясаҡ. Тикшеренеүҙәрҙән шундай һығымта яһалған.

**Азамат ӘБҮТАЛИПОВ.**

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓ Бөгөндән башлап баш ҡаланың 15 майҙанында Яңы йыл байрамдары алдынан була торған ауыл хужалығы йәрминкәләре башлана. Унда башлыса ит менән һатыу итәсәктәр.

✓ РФ Социаль страховка фондының БР бүлексәһендә эш урынында бәхетһеҙлеккә тарып, инвалидлыҡ алған илле кешегә бишенсе модель "Жигули" автомобилдәре тапшырылды. Фонд идарасыһы Марат Латипов әйтеүенсә, 1991 йылдан алып республикала бәхетһеҙлеккә тарыған 720 кешегә бушлай автомобилдәр бирелгән. Быйыл 145 автомобилгә заказ бирелгән булған, уның 20-һен аҡсалата компенсация рәүешендә алғандар, әле бына 50 автомобиль хужаларына тапшырылды, йыл аҙағына тиклем тағы 65 кеше машиналы буласаҡ.

✓ Рәсәйҙең иң көслө мотоуҙыш буйынса спортсылары рейтингы төҙөлгән. Ул исемлекте яҡташыбыҙ - әлеге донъя чемпионы Николай Красников башлап ебәрә. Етмеш алты иң яҡшы мотоуҙышсы ингән был исемлеккә шулай уҡ Башҡортостан спортсылары Дмитрий Буланкин, Станислав Архипов, Николай Рябоконь - барлығы егерме бер мотоуҙышсы ингән.

✓ Башҡортостан "Китап" нәшриәте Пермдә үткән "Мосолман донъяһы - 2009" төбәк-ара форумында ҡатнашты һәм үҙ күргәҙмәһен ойошторҙо. Форумда ҡатнашыусылар нәшриәт сығарған мосолман календары, башҡортса изге Ҡөрьән китабы, башҡа дини йөкмәткеле китаптар, шулай уҡ этнографик-тарихи китаптар, фотоальбомдар һатып алды.

✓ Өфө ҡала округы хакимиәте бинаһында 23 декабрҙә 10-дан 16 сәғәткә тиклем БР Юстиция министрлығы хеҙмәткәрҙәре аҙ тәьмин ителеүсе граждандарға түләүһеҙ юридик ярҙам күрһәтәсәк.

✓ Башҡортостанда инвалид балаларҙы дистанцион уҡытыу алымы индерелә башланы. Был социаль проект Өфөнөң 13-сө махсус (коррекцион) дөйөм белем биреү мәктәп-интернаты базаһында тормошҡа ашырыласаҡ. Ул бынан һуң инвалид балаларҙы дистанцион уҡытыу буйынса 1-се республика мәктәбе тип аталасаҡ. Әле унда ремонт эштәре атҡарыла. Быйыл яҙ башынан уҡ Өфөнән һәм Өфөгә яҡын райондарҙан 60 бала компьютер ярҙамында өйҙә уҡый башлаясаҡ. Артабан был программа буйынса уҡыусы балалар һаны күбәйәсәк

ИЛ-ЙОРТ ХӘБӘРЕ



# ОЛУҒ АУЫЛ...

## Сәйетбаба

**Ғафури районының Сәйетбаба ауылы республикабыҙға бик күп арҙаҡлы шәхестәр биргән. Улар араһында дин әһелдәре, яҙыусылар, ғалимдар, фән эшмәкәрҙәре, табиптар һәм башҡалар бар. Ижтимағи аң, мәҙәниәт үҫеше кимәле буйынса сәйетбабалар бөгөн дә һынатмай. Ауылда ай һайын тиерлек үтеп торған әҙәби-мәҙәни-ижтимағи саралар тап шул хаҡта һөйләй. Үткән аҙнала, мәҫәлән, ошо ауылда тыуып үҫкән һәм ғүмер иткән билдәле мулла-мәғрифәтсе Мөхәмәтша Ҡаһарман улы Латиповтың тыуыуына 120 йыл тулыу айҡанлы үткән хәтер кисәһен унда ҡатнашыусыларҙың контингенты һәм кисәлә күтәрелгән мәсьәләләр йәһәтенән республика кимәлендә үткәрелгән сара тип атарға мөмкин булыр ине.**

Мин үҙем, мәҫәлән, ошо ауыл хаҡында күптән эҙләгән бер һорауыма яуап таптым кисәлә. Ул да булһа: донъялағы иң ҙур башҡорт ауылының берҙәм, бер идея менән йәшәй белеүенең сәбәбе, нигеҙе. Сәйетбабала тыуған табип та шағир, эшҡыуар ҙа милләт патриоты, рәссамы ла сәйәсмән, муллаһы ла журналист, ветераны ла активист һәм барыһы ла ауылдарының һәм милләтебеҙҙең яҙмышы өсөн янып йәшәй. Ғөмүмән, был ауылда бер нисә нәҫел-араның, зат-зәүерҙең берҙәм һыйышып йәшәй алыуының нигеҙендә иман ята. Ошо ауылда 1889-1972 йылдарҙа йәшәгән дини рухани инсан Мөхәмәтша Латипов һәм төрлө йылдарҙа ғүмер иткән Әбйәлил ишан, Сирай хәҙрәт, Сабир хәҙрәт, Хәлил, Хәлим, Сәйфулла, Хатип муллалар ана шул имандың тотҡаһы булғандар һәм ҙур ауылдың тарҡалмайса, бер идея менән йәшәүен тәьмин иткәндәр.

Ҙур төшөнсә бәләкәйҙә күренә, тиҙәр. Башҡортостаныбыҙҙы ғына алайыҡ. Сәйетбаба ла, Путин әйтмешләй, "тамсыла сағылған" Башҡортостан кеүек һәм уның берҙәмлегенең, унда йәшәгән халыҡ вәкилдәренең татыулығының нигеҙендә Зәйнулла, Ғабдулла, Ғатаулла ишандар, хәлфәләр һәм хәҙрәттәр һалып ҡалдырған иман ята.

Шуныһы ҡыуаныслы, Сәйетбабала (һүрәттә күрәһегеҙ) бәләкәй балалар намаҙға баҫа, Ислам нигеҙҙәрен өйрәнә. Иншалла, тип әйтергә генә ҡала.

ӘЙТКӘНДӘЙ...

**Кисәлә Сәйетбабаны донъялағы иң ҙур башҡорт ауылы тип атау урынына, "олуғ ауыл Сәйетбаба", тип атарға кәрәк, тигән тәҡдим индерелде. Шулай тип аталырға хаҡы бар был ауылдың.**

**Әхмәр ҮТӘБАЙ.**

ҺОРАУ - ЯУАП

## БЕЛЕШМӘ - ҮҘЕҢ ӨСӨН

**Фатирҙы һатыусынан уның коммуналь хеҙмәттәр һәм милеккә һалым буйынса бурысы булмауы хаҡында белешмә талап ителәме?**

- Бындай документтарҙың булмауы дәүләт теркәүе өсөн тотҡарлыҡ итмәй, сөнки ул милек хоҡуғын алыуға йоғонто яһамай. Ундай документтарҙы Теркәү хеҙмәтенә килтереүҙең кәрәге юҡ. Улар фәҡәт һатыусы менән һатып алыусы араһында артабан бәхәстәр килеп тыумаһын өсөн кәрәк булыуы бар.

## ҮҘ-АРА КИЛЕШЕГЕҘ

**Һатыусы менән һатып алыусы өсөн үҙ-ара иҫәпләшеү ваҡыты нисек тәғәйенләнә?**

- Һатыусы менән һатып алыусы фатир өсөн иҫәпләшеү мәсьәләһен үҙ-ара хәл итә, дәүләт теркәүсеһенең уларға бындай күрһәтмә бирергә хаҡы юҡ. Шуны иҫтә тотоу ҙа кәрәк: дәүләт теркәүенә тапшырылған документтар араһында килешеү хаҡының тулыһынса түләнеүе хаҡында мәғлүмәт булмаған хәлдә, закон буйынса фатир һатыусы залогында иҫәпләнә. Был, тимәк, дәүләт теркәүе башҡарылған хәлдә лә һатып алыусының милекселек хоҡуғы ипотека шарттары менән тотҡарлана, тигән һүҙ. Тейешле документтарҙы килтереп, теркәү хеҙмәтенә ҡайтанан мөрәжәғәт итеү милекселек хоҡуғын алырға ярҙам итер.

## БАЛА МӘНФӘҒӘТЕНДӘ

**Һатыла торған фатирҙа уның хужаһының бәлиғ булмаған балалары теркәлгән осраҡта фатирҙы һатыуҙа мәғариф органдары ризалығы кәрәкме?**

- Рәсәй Федерацияһы Граждандар кодексының 292-се статьяһына ярашлы, бәлиғ булмаған балалар йәшәгән торлаҡты һатыу өсөн опека һәм попечителлек органы ризалығы балалар ата-әсә ҡарауынан мәхрүм ҡалған осраҡта ғына кәрәк. Балалар ата-әсә ҡарауынан тороп ҡалмағанмы, ғаилә башлыҡтары ата-әсә хоҡуғынан мәхрүм ителмәгәнме - ошо мәғлүмәттәр опека һәм попечителлек органы тарафынан теркәү хеҙмәтенә өс көн эсендә ебәрелергә тейеш.

## ИКЕ ТАПҠЫР ХОҠУҠЛЫ

**Фатирымды хосусилаштырырға теләйем. Ҡыҙым һәм ейәнем менән йәшәйем. Ҡыҙым ризалығын бирҙе, ә ейәнем мәсьәләһе нисек хәл ителә?**

- Бәлиғ булмаған балалар фатирҙы хосусилаштырыусы граждандар исемлегенә һис бер тотҡарлыҡһыҙ индерелә. Уларға бындай хоҡуҡ ике тапҡыр бирелә: бәлиғ булмаған сағында, әйтеүебеҙсә, һис һүҙһеҙ фатирҙы хосусилаштырыусы иҫәбенә индереләһә, бәлиғ булғандан һуң тағы бер тапҡыр бындай хоҡуҡҡа эйә була ала.

УҠЫУСЫ ҺҮҘЕ

## БАШҠАЛАРҘЫ ЛА ЙӘЛЕП ИТ

Шәмбе аҙнаның иң көтөп алған көнөнә әйләнде. Ял көнө булған өсөн түгел, ә был көндө өйөбөҙгә "Киске Өфө" гәзите килгән өсөн. Сыға башлаған мәленән алып, ғәиләбеҙҙең көтөп алынған, иң ҡәҙерле ҡунағы ул был баҫма. Гәзиткә август айында уҡ яҙылып ҡуйҙыҡ. Бөтә мәҡәләләрҙе башынан алып аҙағына тиклем иғтибар менән, ҡайһы бер яҙмаларҙы бер нисә тапҡыр уҡып сығам. Таң атҡанда яҡтылыҡ артҡан кеүек, гәзитте уҡыған һайын донъяға ҡарашым киңәйә бара. Үҙемде тағы ла бер юғары уҡыу йортон тамамлаған кеше кеүек тоям.

Үкенескә ҡаршы, тормошобоҙҙоң бөтә йүнәлештәре буйынса ҡыҙыҡһындырған һорауҙарға яуап бирерҙәй баҫмабыҙ тураһында халҡыбыҙ бик аҙ белә. Үҙебеҙ уҡып ҡына ҡалмайыҡ, "Киске Өфө"нө арттырыу эшенә тотонайыҡ, дуҫтар! Үҙебеҙгә килеп йөрөгән ике кешегә гәзит тураһында һөйләп, бер нисә һанын биргәйнем, үҙҙәре лә яҙылдылар. Гәзиттең тиражын арттырыуҙы үҙебеҙҙең бурысыбыҙ итеп һанайыҡ.

**Ғәлимйән ТӨХВӘТУЛЛИН,**
**Шишмә районы Түбәнге Хәжәт ауылы.**

## ЕЙӘНДӘРЕМӘ...
### инша яҙғанда ярҙам итә баҫма

Етмеш ике йәшкә етһәм дә, гәзит-журналдарға яҙылмай ҡалғаным юҡ. Бигерәк тә "Киске Өфө" гәзитен яратып уҡыйбыҙ. Уның килеүен түҙемһеҙләнеп көтөп алабыҙ, сөнки ул милләтте ойоштороған, бергә туплаған, халҡыбыҙҙы уйланырға, бәхәсләшергә, фекер алышырға мәжбүр иткән төп баҫма булып тора, тип икеләнмәйенсә әйтә алам.

Гәзитте сыға башлағандан бирле алдырам һәм бөтә һандарын да йыйып, һаҡлап барам. Уны ейәндәрем инша яҙғанда ла, дәрестәрҙә дәреслек китабы итеп тә файҙалана. Баҫманың тоғро дуҫтары, һәр һанын көтөп алған уҡыусылары, төрлө темаларға фәһемле, мауыҡтырғыс мәҡәләләре менән ҡыуандырып торған авторҙары әҙ түгел. Ә шулай ҙа уны уҡымағандар күп нәмәнән мәхрүм ҡала, тип уйлайым. Ғөмүмән, башҡорт телендә сыҡҡан гәзит-журналдарға яҙылмайынса, күберәк урыҫ телендәге баҫмаларға өҫтөнлөк биргән милләттәштәребеҙгә аптырайым. Үҙ телебеҙҙе хөрмәт итеү йөҙөнән Башҡортостанда сыҡҡан бар башҡорт телендәге гәзит-журналдарға ла яҙылһаҡ, һәйбәт булыр ине.

**Марат МӘМБӘТОВ.**
**Хәйбулла районы Әбүбәкер ауылы.**

Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы

## Өйҙәге һауа

Берәр ҡалаҡ аҡ сәскә, әрем, ҡарағай энәләре, ҡайын япрағы һәм меңъяпраҡҡа бер литр ҡайнар һыу ҡойоп, термоста 20 минут тотҡас, сепрәкте ошо төнәтмәгә мансып, өйҙәге санды һөртөп алырға. Был һыу менән иҙән йыуһаң да, яҡшы була.

Йышыраҡ елләтеп торһағыҙ, өйҙә вирустар булмаҫ. Дарыу үләндәре тултырылған сепрәк тоҡсайҙарҙы өйҙөң төрлө урындарына элһәң дә, һауа таҙарыр.

Һәр бүлмәлә туралған һуған, һарымһаҡ тотоу вирустарҙан һаҡлар. Аш бүлмәһендә үрелгән һуған эленгән булһа, кәрзиндәрҙә һарымһаҡ, сөгөлдөр, һауыттарҙа алма, әфлисун һәм башҡа емеш-йәшелсәләр йәйҙе хәтерләтеп торһа, күңелегеҙ күтәренке булыр.

## Ҡан тамырҙарын таҙартыу

100-әр грамм аҡ сәскә, һары мәртүшкә, ҡайын бөрөһө, шиңмәҫгөлде (бессмертник) бергә ҡушып болғатып, банкаға һалып, ябып ҡуйырға. Кисен 1 ҡалаҡ ошо ҡушымтаға ярты литр ҡайнар һыу ҡойоп, 20 минут төнәтергә лә, һөҙөп алырға. 1 стакан төнәтмәгә 1 балғалаҡ бал иретеп, йоҡлар алдынан эсергә. Бынан һуң бер нәмә лә ашамағыҙ һәм эсмәгеҙ. Иртән ҡалған төнәтмәне йылытып, тағы 1 балғалаҡ бал иретеп эскәс, 15-20 минут ашамай торорға. Банкалағы үләндәр бөткәнсе ошо рәүешле көн һайын эсергә. Бындай таҙартыу 5 йылға бер эшләнә.

70-80 грамм һарымһаҡты иҙеп, 5 лимондың һутын һығып болғатырға. Ошо төнәтмәнең 1 балғалағын ярты стакан һыуҙа болғатып, йоҡлар алдынан эсергә. Ике аҙнанан ҡан тамырҙары таҙарып, үҙегеҙҙең йәшәреп киткәнегеҙҙе һиҙерһегеҙ, йоҡоғоҙ һәйбәтләнер.

Баш йыш ауыртһа, мейеләге ҡан йөрөшө насарланған булыуы ихтимал. Бындай саҡта һәр өс айҙың бер айында көн һайын 15-20 минут буйы үҙенә-үҙең массаж яһарға кәрәк, бигерәк тә 40 йәште үткәндәргә был мөһим. Массажды баш тиреһенә, елкәгә, яурынға, беләктәргә эшләргә. Ҡан баҫымы күтәрелгән ваҡытта хәрәкәттәр ҡолаҡ япраҡтарынан башланып, баш һөйәге ситтәренән муйын умыртҡаһының уртаһына, унан умыртҡа бағанаһы буйлап 15 см тирәһе аҫҡа төшөргә тейеш. Ҡан баҫымы түбән саҡта, киреһенсә, умыртҡа бағанаһынан башлап ҡолаҡ япраҡтарына табан массаж яһала, иң һуңынан сикәләрҙе ышҡырға. Йыуынғас, таҫтамал менән еңелсә ышҡынып алыу ҙа ҡан йөрөшөн яйға һала.

**Флора БИКЕМБӘТОВА.**




## ИР БАЛАЛАР ӨСӨН НӘСИХӘТ

### Дуҫтарың

● Боҙоҡ кешеләр менән ҡатнашмағыҙ, уларҙың юлына кермәгеҙ, уларға ышанмағыҙ. Сөнки улар өсөн иң ләззәтле эш боҙоҡлоҡ эшләү һәм әҙәм балаларын һәләкәткә төшөрөү була. Әҙәм балалары ашамай һәм эсмәй тора алмаған кеүек, күңеле боҙоҡ булғандар ҙа уҫаллыҡ эшләмәй тора алмайҙар һәм, зарар итмәһәләр, тыныс йоҡламайҙар. Яҡшы бәндәләр тулыһынса уларҙың ҡапма-ҡаршыһы була. Шуның өсөн яҡшы кешеләр юлына керегеҙ һәм уларға дуҫ булығыҙ.

● Боҙоҡ кешеләр менән ҡатнашыу бик зарарлы булһа ла, улар менән дошман да булмағыҙ. Тура килһә, улар менән йомшаҡ мөнәсәбәттә булығыҙ. Шуның арҡаһында имен булырһығыҙ.

### Йөҙ өсөн ҡағиҙәләр

● Йөҙ - күңелдең йомшаҡ йәки ҡаты булыуын күрһәтеүсе көҙгө. Шуның өсөн йөҙөгөҙгә иғтибарлы булығыҙ һәм ошо ҡағиҙәләрҙе үтәгеҙ!

● Һөйләшкәндә ситкә ҡарап һөйләмәгеҙ һәм күҙегеҙҙең сите менән ҡарамағыҙ.

● Һытыҡ һәм ҡараңғы йөҙлө булыуҙан, еңел йәки мәсхәрәле ҡараш ташлауҙан һаҡланығыҙ. Дуҫ-иштәрегеҙ тартынмай, иркенләп һөйләшһен өсөн һәр ваҡыт асыҡ йөҙлө булығыҙ.

### Күҙ өсөн ҡағиҙәләр

● Һәр нәмәгә ҡәнәғәт күҙ менән ҡарағыҙ. Берәй кешелә Аллаһы Тәғәлә ҡөҙрәтенең олуғ ниғмәтен күрһәгеҙ, көнләшмәгеҙ. Киреһенсә, тағы ла артыуын теләгеҙ, үҙегеҙҙә лә шундай ниғмәттәрҙең булыуы өсөн доға ҡылығыҙ.

● Фәҡир һәм ауырыу кешеләргә мәсхәрә күҙе менән ҡарамағыҙ, гонаһлы һәм ғәйепле эштәргә тамаша итеп тормағыҙ.

● Ҡойма ярыҡтарынан, пәрҙә араларынан, тәҙрә һәм башҡа урындарҙан сит кешеләрҙең өйҙәренә, ярамаған нәмәләргә, кешеләрҙең яҙыуҙарына, хаттарына рөхсәтһеҙ ҡарамағыҙ.

● Китап яҙған һәм уҡығанда күҙегеҙҙе бер ҡарыштан кәм тотмағыҙ, шәм һәм лампаларҙы һул яҡтан ҡуйығыҙ, насар яҡтыла, икенде менән аҡшам араһында уҡымағыҙ.

● Күҙҙәрегеҙҙе мөмкин булғанда һәр көн иртән һабын менән йыуығыҙ, һәр ваҡыт саф тотоғоҙ, йыраҡ йәки бик нескә, ҡояш йәки ай, лампа кеүек артыҡ нурлы нәмәләргә ҡарап тормағыҙ, йәшел һәм күк төҫтәргә оҙаҡ ҡарамағыҙ, йәшел һәм күк төҫтәр күҙ өсөн зарарһыҙ.

### Ауыҙ өсөн ҡағиҙәләр

● Мәжлестәрҙә, бигерәк тә туй һәм тантана мәжлестәрендә булғанда көлөү һәм ғәҙәттән тыш уйын-көлкөлә әйберҙәр һөйләүҙән тыйылығыҙ. Дәрәжәле, сабырлы һәм асыҡ йөҙлө булығыҙ.

● Хәсрәтле һәм асыулы кешенең йөҙөнә ҡарап көлмәгеҙ. Хәсрәтле кешеләргә күңелдәрен баҫтырырлыҡ нәмәләрҙән башҡа һүҙ һөйләмәгеҙ.

*АТА-ӘСӘ ҠОЛАҒЫНА*

**Башҡорт әсәйҙәре-өләсәйҙәре баланың уйын үҫтереүгә, аңын-заңын тәрбиәләүгә, зиһенен яҡтыртыуға ныҡ иғтибар иткән. Өҫтәүенә, тәбиғәт балаһы булған башҡорт халҡында шиғри күңеллелек мөлдөрәмә ташып торған. Шуның өсөн дә телмәре бай, мәҡәлле-әйтемле, йырлы-ҡобайырлы, таҡмаҡлы-һамаҡлы булған улар. Бала тәрбиәләүҙә һәр хәрәкәт тиерлек һамаҡлауҙар менән ҡуша башҡарылған.**

# ТӘНӘЙҘӘРГӘ ТӘҒӘЙЕН ТӘРБИӘ




## Өсөнсө һабаҡ: "Баланың буйын да, уйын да тәрбиәлә"

Сабыйҙы бик оҙаҡ ваҡыт имеүҙән айырмағандар, шулай булһа ла ашатыуҙы ла иртә башлағандар. Уның өсөн махсус аҙыҡ әҙерләнмәһә лә, әсә үҙе ашаған ризыҡтың бала ашҡаҙаны эшкәртерлеген йомшартып, аҙ ғына булһа ла /күгәрсен күҙендәй генә, тигәндәр/ ҡаптырғандар. Баланы ашатҡан саҡта төрлө һамаҡлауҙар әйтелгән:

Талымһыҙ бул, әрһеҙ бул,
Тамағың гел туҡ булһын,
Тамағы туҡтың күңеле киң,
Күңеле киңдең донъяһы киң.
Ҡарға килде - ҡаҙан аҫты,
Һайыҫҡан килде - һалма һалды,
Беснәк килде - бешерҙе,
Бүҙәнә килде - бүлеп бирҙе,
Турғай килде - төшөрҙө.
Балам килде лә
Ашаны ла бөтөрҙө.
Беренсе ҡабым - тәм өсөн,
Икенсеһе - им өсөн,
Өсөнсөһө - көс өсөн,
Дүртенсеһе - йән өсөн,
Бишенсеһе - беләккә,
Алтынсыһы - быуынға,
Етенсеһе - елеккә,
Ете ҡабым туйымлыҡ,
Бына хәҙер туҡ булдыҡ.

Бала тел аңламаһа ла уның зиһененә тел моңо һеңә. Шуның менән бергә ҡайһы бер һүҙҙәр ятҡа бикләнә бара һәм тирә-яҡ мөхит уға башҡортса өндәшә.

Ошо мәҡәләгә өҫтәп, Зимфира Аҡбутинаның тәнәйҙәр өсөн тип яҙып ебәргән һамаҡлауҙарын тәҡдим итәбеҙ.

**Бала һикертеү**

- Балам, балам, бал ғынам,
Балам, күҙ алмам ғынам,
Үҫеп кенә китер ул,
Үҫеп буйға етер ул,
Ҙур бер кеше булыр ул,
Затлы кеше булыр ул,
Балам, балам, бал ғынам,
Балам, күҙ алмам ғына.

**Йоҡлатҡанда**

Аллаһыу, аллаһыу,
Ҡәҙәләрҙе тауға ҡыу, тауға ҡыу.
Тауҙа бесән ашаһын, ашаһын,
Минең балам йоҡлаһын, йоҡлаһын.

**Бармаҡтарҙы уйнатыу**

Башбармаҡ башты һыйпай,
Һуҡ бармаҡ алға ҡарай.
Урта бармаҡ уртала,
Сығанаҡ бармаҡ сиратта,
Ә сәтәкәй - бәләкәй,
Уға сират кәрәкмәй.

**Ашатҡанда**

- Әп-әп, әпәкәй,
Мин бит әле бәләкәй.
Әпәкәйҙе әп итһәм,
Тәмләп кенә сәйнәһәм,
Мин дә үҫеп китермен,
Атайыма етермен.
Ҡап-ҡап тәмлекәйҙе,
Бер ҡабымлыҡ тәмлекәй.
Ҡабымлап сәйнәп ашаһаң,
Һиңә булыр йәмлекәй.

**Йыуындырыу**

- Сәп-сәп, сәп-сәп итәбеҙ,
Һыуҙы сәпелдәтәбеҙ,
Тәүҙә ҡулды йыуабыҙ,
Унан битте йыуабыҙ,
Унан тәнде ыуабыҙ,
Унан һыуға сумабыҙ.
Сәп-сәп, сәп-сәп итәбеҙ,
Һыуҙы сәпелдәтәбеҙ,
Көн дә шулай сәпелдәтеп,
Үҫәбеҙ ҙә китәбеҙ.

**Рубриканы Мәрйәм БУРАҠАЕВА алып бара.**

ШУЛАЙ ИТЕП...

**Мәрйәм апай Бураҡаева башлап ебәрҙе, шул көйө дауам да ителер мәктәпкәсә йәштәге балаларҙы тәрбиәләү әсбабыбыҙ. Был изге эшкә башҡа педагогтарҙың, өләсәй-олатайҙар, атай-әсәйҙәрҙең дә ҡушылыуын теләйбеҙ: үҙ һабаҡтарығыҙ, кәңәш-фекерҙәрегеҙ, тәжрибәгеҙ менән һеҙ ҙә уртаҡлаша алаһығыҙ. Милләт киләсәге - ошо тәнәйҙәр ҡулында һәм тәнәйҙәребеҙҙе дөрөҫ тәрбиәләүгә бөтөн көсөбөҙҙө һалырға тейешлегебеҙ хаҡында тағы бер тапҡыр уйланайыҡ әле, йәмәғәт. Хаттар-хәбәрҙәр көтәбеҙ.**

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*

# ҮГЕҘҘЕҢ ЕЛЕНЕ ҠАЙҘА БУЛҒАН?

**Үҙ уйҙарыма сумып, өй эштәре менән булышып йөрөгәндә, икенсе бүлмәнән бәләкәй һылыуым йүгереп килеп сыҡты. Ул күрше бүлмәлә телевизорҙан йәнһүрәттәр ҡарап ултыра ине. Ҡаштары төйөлгән, ҡараштарында һораумы, икеләнеүме сағыла. Әһә, тимәк, йәнһүрәттә ниҙәлер аңламай ҡалған. Яңылышмағанмын һылыуым ҡапыл: "Апай, ә беҙҙең үгеҙҙең елене ҡайҙа ул?" - тип һорамаһынмы!**

Көтөлмәгән һорауҙан мин аптырап та, ҡаушап та ҡалдым. Уның һорауының нимәгә бәйле булыуын асыҡларға иткәс, ул мине күрше бүлмәгә йәнһүрәт ҡарарға алып сыҡты. Бәктиһәң, һылыуым сит ил әкиәттәренән режиссер Дж. Салливандың "Рога и копыта" ("Мөгөҙҙәр һәм тояҡтар") исемле йәнһүрәтен ҡарап ултыра икән. Йәнһүрәттә мал аҙбарында барған ваҡиғалар һүрәтләнә. Төп ролдәрҙә эт, бесәй, сусҡа, ишәк, һарыҡ-кәзәләр, ҡош-ҡорт, аттар, һыйырҙар һәм... ысынлап та, елендәре тулышып, ҡабарып торған үгеҙҙәр! Әйе, әйе, һүрәтләнеше, һындары, холоҡ-фиғелдәре, тауыштарына ҡарағанда, уларҙың үгеҙ икәне ап-асыҡ аңлашыла, тик... Ниңә уларға елен "йәбештереп" ҡуйылыуын мин барыбер аңламаным. Һылыуымдың һораулы ҡарашына тап булып, ни тип яуап бирергә белмәй ултырғанда, ул үҙе: " Ә-ә, белдем, береһе апай һыйыр, ә икенсеһе ағай һыйыр!" - тип аңлата башланы.

Был ваҡиғанан һуң һылыуыма оҙаҡ ҡына йәнһүрәт төшөрөүселәрҙең хатаһын аңлатырға тура килде. Баланың был йәнһүрәтте ҡарап ултырыуына үҙемде ғәйепле тойҙом, сөнки йәнһүрәттең йөкмәткеһендә лә балаларға кире йоғонто яһарлыҡ "хаталар" күп ине. Кәйеф-сафа ҡороп йәшәргә яратҡан төп геройыбыҙ Отис, дуҫтары менән машиналарҙа елдерергә, дискотекаларға йөрөргә, эсеп тә алырға ярата булып сыҡты. Дөрөҫ, шешәләрҙең тышына milk, йәғни һөт тип яҙылған, әммә Отистың һөйләгәндәренә, үҙ-үҙен тотошона ҡарап, шешәләрҙә нимә булғанына икеләнергә урын ҡалмай.

Бына шулай йәнһүрәттәр аша "программалап" та ҡуя беҙҙең йәш быуынды сит ил ағайҙары! Ошонан һуң, "Эх, ҡасан ғына үҙебеҙҙең тормош күренештәрен сағылдырған, балаларыбыҙҙың күңелендә халҡыбыҙҙың рухи ҡиммәттәрен тәрбиәләрлек саф башҡорт йәнһүрәттәре сығыр икән?" тип уйлап ҡуяһың әсенеп. Дөрөҫ, балаларының нимә ҡарауын ата-әсәләр контролдә тоторға тейеш, тик хәҙерге заманда телевизор экрандарын төрлө аңлашылмаған йән эйәләре, "еленле үгеҙҙәр", Лунтиктар, телепузиктар, Дипсиҙар һәм Пупсиҙар баҫып алғанда, был мөмкинме икән?

**Гөлкәй СӘМЕРХАНОВА.**

*ҺҮҘ - УҠЫТЫУСЫҒА*

**Рәйлә Сәғит ҡыҙы ДӘҮЛӘТОВА 3-сө Дәүләкән башҡорт гимназияһында инде бишенсе йыл директор вазифаһын башҡара. Уҡыу йорттарындағы күп ҡатын-ҡыҙ директорҙар образына тап килә уның сифаттары ла - тынғыһыҙ, үҙенә лә, башҡаларға ла талапсан, өлгөр, иң мөһиме, битарафлыҡ хас түгел һәм үҙен ошо оло "ғаиләнең" әсәһе ролендә итеп хис итә белә. Шуға ла уның эше лә ырай, йәғни изге күңелле, белемле, аҡыллы, сәләмәт балалар тәрбиәләү өсөн һалған тырышлығы үҙен аҡлай. Тәжрибәле етәксе менән әңгәмәбеҙ теге заман һәм хәҙерге заман балалары, һәр замандың тәрбиә үҙенсәлектәре, ата-әсәләр менән мөнәсәбәт һәм башҡалар хаҡында булыр.**

# ЗАМАН ҺЫНАУҘАРЫ...

## уҡытыусыны һындыра алмай

**➔ Рәйлә Сәғит ҡыҙы, үҙегеҙ мәктәптә уҡыған осорҙағы йәки уҡытыусы булып эшләгән сағығыҙҙағы балалар менән бөгөнгө балалар араһында айырма бармы?**

- Әлбиттә, заман башҡа - заң башҡа, тигән кеүек, һәр замандың үҙенә хас үҙенсәлектәре бар. Хәҙерге заман балаларына шул тиклем күп мөмкинлектәр тыуҙырылған: яратҡан эше менән шөғөлләнә, үҙҙәрен төрлө яҡлап үҫтерә, камиллаша, донъя кимәленә сыға алалар. Тик улар, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, рухи яҡтан бик көсһөҙ, кире йоғонтоға тиҙ бирешеүсән. Хәҙерге балаларҙың һаулығы ла нык насар. Быны беҙ кәрәкмәгән мәғлүмәт күп булыуы менән аңлатабыҙ. Әбеҙ тыуған ауылыбыҙҙан да ситкә сыға алмай, үҙ ҡаҙаныбыҙҙа ҡайнап ҡына йәшәнек. Шулай ҙа тормошобоҙ тыныс булды, бала саҡта рәхәтләнеп уйнап үҫтек. Ҡыш көнө ҡарҙа аунап, сана шыуһаҡ, йәйҙәрен көндәр буйы һыу буйынан ҡайтмай торғайныҡ. Ошо матур бала сағымды һағынам. Ә хәҙер урамдарҙа сабыйҙар тауышы тынды...

**➔ Гимназияла үҙидара ойошмалар бармы? Уларҙың маҡсаты ниндәй?**

- Элек октябряттар, пионер, комсомол ойошмалары көслө тәрбиә үҙәге була торғайны. Мин мәктәптәрҙәге тәрбиә эштәрен шул ваҡыттарға кире ҡайтарырға кәрәк, тип әйтмәйем, әммә бөгөн дә мәктәптәрҙә пионерҙар һәм комсомолдар кеүек эшләгән үҙидара булырға тейеш, тип иҫәпләйем. Улар беҙҙә бар ҙа. Гимназиябыҙҙа башланғыс синыфтар өсөн "Башҡортостан пионерҙары" ойошмаһы эшләп килә. Былтыр 5-се "А" синыфына тантаналы рәүештә тик яҡшы уҡыған балаларҙы ғына йыйып алдыҡ. Улар муйындарына галстук бәйләп йөрөй. Ни өсөн пионерҙар сафына уҡыусыларҙы һайлап ҡына алдыҡ? Сөнки уларға ҡарап, насар уҡыған, тәртип боҙған балалар ҙа тартылырға, өлгө алырға тейеш. Ысынлап та, ниндәйҙер һөҙөмтәгә ирештек тә буғай. Минең дә пионер булғым килә, тип килгән балалар бар.

Ә өлкән синыф уҡыусылары өсөн бер нисә йыл инде беҙҙә "Министрлыҡ" тигән ойошма эшләй. Ойошманың президенты, ярҙамсылары бар. Улар мәктәп кимәлендә төрлө саралар уҙғаралар, тәртип, таҙалыҡ өсөн яуап тоталар, насар уҡыған балаларға "яза" бирәләр. Беҙ элек уҡытыусы нимә әйтһә, шуны эшләнек. Ниңәлер, үҙебеҙҙе бик ныҡ сикләгәнбеҙ: үҙебеҙҙең уйлағаныбыҙҙы әйтергә, ниндәйҙер эш өсөн яуаплылыҡ алырға ҡурҡа торғайныҡ. Бәлки, был уҡытыусыларҙың, ата-әсәләрҙең көслө тыйыуы арҡаһында шулай булғандыр... Хәҙерге балалар үҙ аллылыҡҡа ынтыла, уларҙың идеяһы, ынтылыштары, аныҡ маҡсаттары бар - шуныһы яҡшы. Үҙҙәренә яуаплылыҡ алырға һис ҡурҡмайҙар.

Балалар гимназиябыҙ радиоһында сығыш яһай, стена гәзите сығара. Стена гәзите балаларҙың ижади һәләтен дә үҫтерә, тим, улар текстарҙы компьютер менән түгел, үҙ ҡулдары менән һырлап яҙа, һүрәт төшөрә, фотолар йәбештерә. Мәктәптәге бөтә мәғлүмәттәр, уртаҡлашыр яңылыҡтар, уҡыусыларҙың уңыштары, ижади эштәре сағылыш таба унда. Икеле алыусыларҙы тәнҡитләп, көлкөлө һүрәт тә төшөрөп ҡуялар. Бөтә уҡыусыларға ла гәзит оҡшай, туҡтап тороп, ҡәнәғәтләнеп уҡыйҙар.

**➔ Яҡшы ата-әсәнең балаһы ла яҡшы була, тигән ҡалыплашҡан бер фекер бар. Яҡшы ата-әсәнең балаһы насар була аламы?**

- Төрлө ғаиләләр осрай. Һуңғы ваҡытта шундай бер социаль ҡатлам барлыҡҡа килде: тәү ҡарашҡа, ғаилә йәш, матур кеүек, матди яҡтан да етеш. Тик шуныһы үкенесле: донъя артынан ҡыуып, ата-әсә балаһына тейешле иғтибар бүлергә онота. Быңдай ғаиләләрҙә бала үҙен кәрәкһеҙ тип хис итә, уға ата-әсә наҙы, иркәләүе етмәй. Быңдай ата-әсәләр уҡытыусылар менән дә әллә ни аралашып бармай, йыш ҡына уларҙы мәктәпкә саҡыртып килтерергә, һөйләшергә тура килә. Тағы шундай ата-әсәләр бар: "Балама ғына" тип, йәшәй, унан бер ни ҙә йәлләмәй, ҡулына кәрәгенән артыҡ аҡса тоттора, ваҡытынан алда компьютер, телефон һәм башҡалар менән тәьмин итә. Ошондай иркенлек баланы аҡсаны наркотикка алыштырыу хәленә алып килә лә инде. Балаға аҡса тотторор алдынан башта уға яҡшы тәрбиә бирергә, аҡсаны һанай һәм тотона белергә өйрәтергә кәрәк. Заман шулай талап итә.

Тағы ла... Ата-әсәһе ситкә, мәҫәләң, Себергә эшкә сығып китеп, балалары өләсәй, олатай ҡарамағында ҡалған ғаиләләр ҙә бар. Өлкән кешеләр балаларҙы яҡшы ҡараһа ла, күбеһенсә уртаҡ тел таба алмай яфаланалар. Бөгөн байтаҡ атайҙар Себерҙә эшләй, улар ғаиләнән ситтә, балаларын тәрбиәләүҙә ҡатнашмай. Быныһы лә йәмғиәтебеҙҙең бер бәләһенә әүерелде. Йүнсел, тырыш, егәрле булһаң, эште үҙ ауылыңда ла табырға мөмкин дә бит. Оҙон аҡса юлынан йөрөгәнсе, ер алып, ишек алдында мал үҫтереп тә бынамын итеп йәшәргә мөмкин. Быңдай ғаиләләр ҙә бар, уларҙан өлгө алырға, тәжрибә уртаҡлашырға кәрәк. Балаларға үҫкән саҡтарында яндарында булып, матур тәрбиә биреп ҡалырға кәрәк, сөнки ҡарт көнөңдә балаңа кәрәк булмауың да бар бит.

**➔ Беҙҙең йәмғиәттә тәрбиәсе тигән ролде тик уҡытыусыға ғына ҡайтарып ҡалдырҙылар ҙа ҡуйҙылар. Шул мәсьәлә борсомаймы?**

- Ысынлап та, бөгөн бөтә тәрбиә эше мәктәпкә генә күсеп ҡалды. Был турала күп уйланғаным бар. Борсоулы күренеш, әлбиттә. Ата-әсәләрҙән: "Балағыҙҙы был яҡты донъяға кем өсөн тыуҙырҙығыҙ?" - тип һорағы килә. Бала бит ҡасан да булһа барыбер мәктәпте тамамлап, ата-әсә эргәһенән бөтөнләй сит мөхиткә сығып китәсәк. Ул сағында уны кем ҡарар, кем тәрбиәләр? Хәҙер былай ҙа балаларҙы интернет, телевизор "тәрбиәләй". Телевизорҙан ниндәй генә тапшырыуҙар күрһәтмәйҙәр ҙә, интернетта ниндәй генә мәғлүмәт юҡ. Бала күңеле - аҡ ҡағыҙ кеүек бит, бөтәһен дә үҙенә һеңдерә бара. Әгәр ҙә уҡытыусылар менән ата-әсәләр бергә эшләһә, ыңғай һөҙөмтәләргә өлгәшеп булыр ине. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, күп ата-әсә үҙе бөгөн тәрбиәгә мохтаж. Алама ғәҙәттәр менән мауыҡҡандары ғына түгел, башҡалары ла. Сөнки хәҙерге заман балаларының ата-әсәләре башҡа заманда йәшәне, ҡанына башҡа ҡоролоштағы көнитмеш ҡанундарын һеңдерҙе, шул ҡанундарҙан ары атлай алмай, үҙгәрештәр алдында баҙап ҡалдылар. Беҙ, уҡытыусылар, һәр үҙгәрешкә, һәр заманға тиҙерәк яраҡлашыусы кешеләр булараҡ, иңебеҙгә икеләтә йөк йөкмәргә мәжбүрбеҙ: балаһын ғына түгел, уларҙың ата-әсәһен дә тәрбиәләү бурысыбыҙ.

**➔ Был бурысты үтәүҙең тәүге шарты - ата-әсәләр менән уртаҡ тел табыу. Уныһы нисегерәк атҡарыла?**

- Хәҙерге ваҡытта йәш ата-әсәләр менән уртаҡ тел табыуы ауыр. Улар: "Баланы уҡытыусы тәрбиәләргә тейеш, шуның өсөн аҡса ала бит",- тигән насар фекер йөшәй. Ҡайны бер балалар, ата-әсәһенең аҡсаһына һәм абруйына һылтанып: "Барыбер уҡырға индерәләр, ниңә мин ыҙалап уҡырға тейешмен әле?" - тип, уҡыуҙа бөтөнләй тырышмай. Хәҙерге заманда аҡса күп нәмәне хәл итә, тип уйлай инде улар. Ләкин "Аҡса барыһын да хәл итмәй", тип әйтеп ҡара уларҙың ата-әсәһенә! Әлбиттә, мин ата-әсәләрҙең бөтәһен дә ғәйепләй алмайым, уларҙы бер епкә теҙеп булмай. Урта һәм өлкән быуын ата-әсәләр барыһын да аңлап тора, тәрбиә эшендә үҙҙәре үк ярҙамға килә. Әммә уҡытыусыға тәрбиә эше йылдан-йыл ауырлаша. Хәҙерге заманда уҡытыусы булыуы еңел түгел...

**Гөлнәзирә АЙЫТБАЕВА яҙып алды.**




# "ГАЗҒА" БАҪЫРҒА...
## кем ҡамасаулай?

**Донъяла уйлана белгән кешеләр күпме икән? Ғәҙәттә, ғалим булып тыумайҙар, ә ғалим булып китәләр, тиһәләр ҙә, бала саҡта алған тәрбиә, "уятылған" йәки ярал-ғы көйө генә ҡалған фекерләү ҡеүәһе, хыялланырға, ижад итергә, икеләнергә, йәшәйештең һәр аспекты менән ҡыҙыҡһынырға өйрәнеү кешенең артабанғы тормошона ғәйәт ҙур йоғонто яһай.**

Мин үҙем күп уйланырға, тормош юлында осраған теге йәки был хәл тураһында - кешеләр араһындағы мөнәсәбәттәрҙән алып, бөтә кешелекте борсоған проблемаларға тиклем - фекер йөрөтөргә, уны тыуҙырған сәбәптәрҙе асыҡларға тырышам. Кеше ни тиклем күберәк уйланһа, уның фекерләү ҡеүәһе шул тиклем тиҙерәк үҫешә, ул аҡыллыраҡ була бара. Шул уҡ ваҡытта хәҙерге заманда уйларға өйрәнеү ҙә ҡатмарлаша бара. Беренсенән, кеше организмы 10 км-ға йүгергән саҡта ниндәй көсөргәнеш кисерһә, уй ҙа мейегә шундай уҡ көсөргәнеш бирә. Шуға ла күптәр уйларға теләмәй. Икенсенән, күптәр үҙенә тиклем уйлап табылған әйберҙәр тураһында уйлауҙы кәрәк тип тапмай. Ысынлап та, ни өсөн мин был мәсьәләнең әҙер яуабы бар икәнен белә тороп, уның сиселеше тураһында баш ватырға тейеш? Әгәр ҙә махсус хеҙмәткәр машинамды сифатлы итеп төҙәтеп бирә икән, машина төҙөлөшөн өйрәнмәһәм дә була түгелме? Бик тәмле аҙыҡтар тәҡдим итеүсе кафелар бар саҡта, бешерергә өйрәнеүҙе мөһим тип тапҡандар ҙа күп түгелдер...

Ғөмүмән, кешеләрҙе шартлы рәүештә "фекерләй белгән" һәм "фекерләй белмәгән"дәргә бүлеп ҡарарға була. "Фекерләй белмәүселәр", башҡаларға эйәреп, ҡайны саҡта үҙ ихтыярынан тыш, рекламаланған фильмдар ҡарай, һуңғы мода буйынса кейенә, төнгө клубтарға күнел аса, кальян һура, абсент һәм хеннесси эсә. "Фекерләй белеүселәр"ҙең башында иһә яуаптарға ҡарағанда һорауҙар күберәк була. Быңдай кешеләр тәүҙә ниндәйҙер ябай ғына тойолған һорауға яуап тапҡандан һуң, икенсерәк кимәлдәге, ҡатмарлыраҡ хәлдәрҙән сығыу юлын эҙләй башлай. Йәйлап күңелдә ҡомар барлыҡҡа килә, белгән һайын күберәк белеү теләге уяна. "Фекерләй белеүселәр" башҡаларҙан айырылып тора, улар, ғәҙәттә, ваҡыт етмәүгә йышыраҡ зарлана, эш урынында үҙ бурысын яҡшы итеп башҡарыуҙан тыш, башҡа хеҙмәткәрҙәрҙең һөнәр үҙенсәлектәренә төшөнөргә тырыша, йәғни, улар көн һайын нимәләр өйрәнергә, күберәк белергә ынтыла. Тик фекерләргә ғәҙәтләнгән мейенең ихтыяжын ҡәнәғәтләндереү һәм үҙеңә асыштар яһау өсөн мөһим һәм файҙалы темаһы һайлай белергә тейешһең.

Бөгөнгө тормошта "фекерләй белгән"дәр һирәк осрай, сөнки MTV, Дом-2, мода, гламур һәм пафос үҙенекен эшләй. Ҡайны саҡта үҙеңде ҡыҙыҡһындырған өлкә тураһында һөйләшеү өсөн кеше табыуы ла ауырға төшә, һөҙөмтәлә, был юҫыкта үҙеңдең үҫешен дә артта ҡала бара. Яңы таныштарҙың ҙа йышыраҡ "фекерләй белмәүсе"ләр рәтенән булыуы хәүефкә һала.

Бының менән нимә әйтергә теләйемме? Бер ҡасан да уйларға, теге йәки был мәсьәлә буйынса фекер йөрөтөргә ҡурҡмағыҙ. Балаларығыҙ математика фәнен өйрәнһен, тик кәрәкле урынға тейешле формулалар ҡуйыу менән генә сикләнмәһен, ә был гәмәлде аңлап эш итһен. Математика, арифметика мейене эшләтә, ә логик һәм аналитик фекерләүгә эйә булған кеше техник фәндәрҙә яҡшы үҙләштереү менән бергә, башҡа өлкәлә лә һәләттәрен үҫтерә ала. Таныштарығыҙ һәм яҡындарығыҙ менән төрлө темаларға һөйләшергә ҡурҡмағыҙ. Аралашыуҙа хәҡиҡәт тыуа бит. Күберәк аралашҡан һайын донъяға ҡарашығыҙ киңәйә, шуға ярашлы, башҡа өлкәләр буйынса ла төрлө һорауҙар ябырыла башлай. Һәм һеҙ ул һорауҙарға яуап табырға тейешһегеҙ. Тәүҙә уйларға ғәҙәтләнеү ауыр буласаҡ, әммә бер өйрәнгәс, уйланмайынса тора алмаясағығыҙҙы аңлаясаҡһығыҙ. Тикшереүҙәр күрһәтеүенсә, беҙ мейенең фекерләү һәләтлегенең 2-3 процентын ғына ҡулланабыҙ икән. Был Формула-1 болиды артында ултырып, сәғәтенә 10 саҡрым тиҙлек менән йөрөүгә тиң. Ә шул тиклем газға баҫҡы килә...

**Артур БАТЫРША.**

✓ *Халыҡ йыры һәр йырсының визит карточкаһы булып торорға тейеш. Халыҡ йырын башҡармай йөрөгән йырсы үҙ талантын үҙе урлаған, үҙен ярлыландырған йырсы ул.*



**"Баш ҡала сәхнәләрендә һуңғы арала ғына байтаҡ концерттар булып үтте. Азамат Тимеров, Ғәзим Ильясов, Гөлсөм Бикбулатоваларҙың концерттарына ашҡынып барҙыҡ та… бер аҙ кәйеф ҡырылып ҡайттыҡ. Зал тултырып тамашасы йыя алған артистарыбыҙҙың репертуары, йәғни тик эстрада йырҙарына ғына өҫтөнлөк биреп, халыҡ йырҙарын һанламауы көйөндөрҙө. Ә бит был йырсыларҙың концертына тамашасы күберәк халҡыбыҙҙың мәңгелек моңон, тәрән мәғәнәле йырын, сал тарихыбыҙҙың ауазын ишетер өсөн йөрөй. Нисек кенә булмаһын, һәләтле йырсыларыбыҙҙың халыҡсанлыҡтан тайпылып, шоуға ҡоролған концерттар менән сығыш яһауы яуланған үрҙән түбән төшөү һымаҡ ҡабул ителде. Сөнки башҡорт халыҡ йырын башҡарыу - һәр йырсы өсөн иң мәртәбәле юғарылыҡ булып тора бит". Гәзит уҡыусыбыҙ Заһир Дәүләтшиндың ошо хаты сәбәпсе булды бөгөнгө ҡорҙо йыйыуға. Һуңғы осорҙа эстрада сәнғәтендә күҙәтелгән был еңел-елпе йырҙар менән мауығып, халыҡ йырҙарын ситкә тибәреү "сире" аҙып китмәҫ элек, ул хаҡта тамашасыларҙың да, сәнғәт өлкәһендә арымай-талмай эшләгән кешеләрҙең дә тауышын, көйөнөүен ишеттерәйек, тигән маҡсат ҡуйҙыҡ был ҡор алдына. Шулай итеп, был хаҡта ғүмерен һәм ижадын башҡорт йыр сәнғәтен үҫтереүгә бағышлаған сәнғәт әһелдәре - Башҡортостандың халыҡ артисы Флүрә НОҒОМАНОВА, Башҡортостандың халыҡ, Рәсәйҙең атҡаҙанған артисы Тәнзилә ҮҘӘНБАЕВА һәм Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Радик ВӘЛМӨХӘМӘТОВ үҙ фекере менән уртаҡлаша:**







**▶ Бөгөн сәнғәт донъяһында йырсылар һәм йырларға теләүселәр һаны артҡан һайын, тамашасы өсөн көрәш тә көсәйә. Йәғни кемде күберәк тыңлайҙар - шул популяр. Ә инде һан артынан ҡыуған ваҡытта сифаттың аҡһауын беҙ яҡшы беләбеҙ. Ошондай ярыш мәлендә, бәлки, халыҡсанлыҡ тигән төшөнсә лә артҡа күсәлер? Ғөмүмән, йырсы дәрәжәһе нисек баһалана, популярлыҡ менәнме, әллә халыҡсанлыҡ менәнме?**

**Ф.НОҒОМАНОВА:** Минең ҡартәсәйем ҡулына бәйләм тотһа ла, тегенһә лә, беҙгә йыр йырлай ултырыр ине. Йырҙы тыңламайынса, беҙҙе ашатмай торғайны. Минең күңелемә халыҡ йырҙарына ҡарата һөйөү орлоғон ана шул Шәрғиә ҡартәсәйем һалып ҡалдырғандыр, тим. Атайым да матур йырланы. Уның "Етеҙ бүртә" тигән йыры әле булһа ҡолағымда сыңлай.

Өфө сәнғәт училищеһын тамамлап, артабан уҡыуымды Ҡаҙан консерваторияһында дауам итергә булдым. Мин барып еткәндә, ҡабул итеү комиссияһы ултырышы тамамланып ҡына тора ине. Шулай ҙа ныҡышып тигәндәй комиссия ағзаларын йырлауымды тыңларға күндерҙем. "Ашҡаҙар"ҙы йырлап ебәрҙем. Тынһыҙ ҡалып тыңланылар. Ошондай хәл иткес мәлдә башҡорт халыҡ йырының уникаллеге миңә уҡыуға юл асты ла инде. Әгәр уның урынына романс, йә башҡа әҫәр йырлаған булһам, бәлки, мине ҡабул итмәгән дә булырҙар ине. Консерваторияла уҡығанда "Камерное пение" дәресендә йырсы-студенттар урыҫ халыҡ йырҙары, романстар йырлағанда, мин халыҡ йырҙарын башҡара торғайным. Мин йырлаған ваҡытта студенттар эркелешеп килеп тыңлай торғайны, сөнки мин башҡарған йырҙар улар өсөн таныш булмаған яңы донъя ине.

**Р. ВӘЛМӨХӘМӘТОВ:** Мин Мәүлетбай Ғәйнетдинов, Абдулла Солтанов, Сөләймән Абдуллиндарҙың башҡарыуҙарын тыңлап, халыҡ йырҙарына ғашиҡ булып, улар моңо аша һабаҡ алып килеп индем йыр сәнғәте донъяһына. Өфө сәнғәт училищеһын, унан Өфө дәүләт сәнғәт институтын тамамлағас, яңы асылған Учалы филармонияһында эшләй башланым. Ул йылдарҙа ла халыҡ йырҙарын йырлай белеүҙе талап иткән конкурста ҡатнашып, башҡарыу оҫталығы тупланды.

**Т.ҮҘӘНБАЕВА:** Халыҡ йырына булған һөйөү мине профессиональ йыр сәнғәтенә алып килде. Ғаиләбеҙҙә үҫкәндә (ә беҙ алты бала үҫтек) ҡайһыбыҙ йырлай, ҡайһыбыҙ музыка ҡоралында уйнай торғайны. Әсәйем бик матур йырланы, атайым яғынан да йырсылар бар. "Зөлхизә", "Сәлимәкәй", "Ҡарабай", "Таштуғай" йырҙарын беренсе уҡытыусым Маһрый апайҙан өйрәндем. Ә ул үҙ заманында Мәләүез районы Бүләк ауылында йәшәп, ижад иткән Мөхәмәтша Буранғоловтан өйрәнгән.

Минең уйымса, йырсы халыҡ йырын башҡарғанда ғына аяғында ныҡлы баҫып тора ала. Йырсы тыуған илен, туған телен ана шул халыҡ йырҙары аша күтәрә, үҙе лә үҫә. Башҡорт дәүләт филармонияһының "Йәдкәр" төркөмөндә эшләү дәүерендә йыр тарихының тәрәнлеген, бөтә нескәлектәрен аңланым. Ниндәй яуаплы, тәрбиәүи эш алып барғанбыҙ икән. Беҙ ансамбль төҙөлгәндән алып, 27 йыл буйы, был коллектив эсендә тоғро ижад иттек. Ғөмүмән, "Йәдкәр" ансамбле ижад лабораторияһына әүерелде. Беҙ эшләгән дәүерҙә Өфө дәүләт сәнғәт академияһын тамамлап, халыҡ йырҙарын оҫта башҡарған йырсылар - Венера Рәхмәтуллина, Римма Амангилдина, Сулпан Кейекбирҙина, Лилиә Ишемйәрова, Филүс Ҡалмурзин, Радик Вәлмөхәмәтов килде. Беҙ унда халҡыбыҙҙың боронғо йырҙарын башҡарып ҡына ҡалмай инек, үҙебеҙ уның тарихын да һөйләйбеҙ, үҙебеҙ бейейбеҙ ҙә. Шулай итеп, һәр яҡлап халҡыбыҙ ынйыларын тамашасы күңеленә алып барып еткерергә, уның күңелендә һөйөү уятырға тырыштыҡ. "Йәдкәр" ансамбленең тәүге йылдарында Ҡаҙанда үткән гастролдәр ваҡытында шағирә Гөлшат Зәйнәшева апайҙың сәхнәгә сығып әйткән һүҙҙәре әле булһа хәтерҙә. "Башҡортостанды данлаған был коллективты республикалар буйлап ҡына түгел, сит илдәр буйлап та йөрөтөргә кәрәк", - тигәйне. Уның был һүҙҙәре, Аллаға шөкөр, тормошҡа ашты, "Йәдкәр"ебеҙ республикабыҙҙың визит карточкаһына әүерелде.

**Ф.НОҒОМАНОВА:** Элек беҙ Татарстан сәнғәт оҫталары менән алмаш концерттар эшләй торғайныҡ. Ул концерттар һәр ваҡыт халыҡ йырынан башланыр ине. Бер саҡ шулай Ҡаҙандың опера театрында "Илсе Ғайса"ны йырлап торам, шул тиклем шәп килеп сыҡты, ахырыһы, халыҡ аяғүрә баҫып ҡул сапты. Шунда Мәғәфүр ағай Хисмәтуллин миңә: "Бына һин хәҙер йырсы булып танылдың. Халыҡ һинең сығышыңды баҫып алҡышланы.

# ХАЛЫҠ ЙЫРЫН

## үҙ талантын

Был йырсы өсөн иң ҙур баһа һәм бәхет", - тигәйне. Ә бөгөн күп башҡарыусылар өс ноталы эстрада йырын йырлайҙар ҙа, йондоҙ һымаҡ хис итәләр үҙҙәрен. Ә бит йырсы иң тәүҙә халыҡ йырын йырлай белергә тейеш. Халыҡ йыры һәр йырсының визит карточкаһы булып торорға тейеш. Халыҡ йырын башҡармай йөрөгән йырсы үҙ талантын үҙе урлаған, үҙен ярлыландырған йырсы ул. Башҡорт халыҡ йырҙарын ни өсөн арияға тиңләйҙәр? Сөнки һәр бер ария ҙур диапазонлы әҙер йырсыға тәғәйенләнә. Ә башҡорт халҡының мәшһүр оҙон көйөн башҡара алған йырсы классик операларҙағы ҙур диапазонлы арияларҙы ла башҡара ала. Беҙҙең халыҡтың бөтә моңдары, булмышы, тарихы ошо халыҡ йырында сағыла ла инде.

**Р.ВӘЛМӨХӘМӘТОВ:** Ысынлап та, халыҡсанлыҡ менән популярлыҡты бер ваҡытта ла сағыштырып булмай, һәм ул урынһыҙ ҙа. Минеңсә, бары тик халыҡ йырын йырлай алған йырсы ғына ысын йырсы тип аталырға хаҡлылыр. Беҙҙең башҡорт донъяһы, тарихы, булмышы шул халыҡ йырына бәйләнгән бит. Унан һуң, халыҡ йырын йырлау беҙҙең тынды аса, тауыш мөмкинлектәрен киңәйтә, көйләй.

**Т.ҮҘӘНБАЕВА:** Халыҡ йыры - ул халҡыбыҙҙың күңел хазинаһы. Быуаттарҙы быуаттарға ялғап, быуындарҙы быуындарға бәйләп, күңелдән күңелгә күсә килеп, бөгөнгә тиклем һаҡланып килгән йән аҙығыбыҙ, рухи хазинабыҙ. Ошо аманатҡа тоғро ҡалып, артабан да түкмәй-сәсмәй киләсәк быуынға тапшырыу - беҙҙең һәр кемебеҙҙең бурысы ул.

**▶ Халыҡ йырын башҡарыу дәрәжәһенә ҡарап, йырсының кимәле билдәләнә, тинек. Әммә бөгөн халыҡ йырҙарын йырлап сәхнәлә танылыу яулаған артистарыбыҙ ҙа еңел-елпе йырҙар менән мауыға башланы. Быға нимә сәбәпсе булды һуң? Был хәлде нимә менән аңлатырға мөмкин?**

**Ф.НОҒОМАНОВА:** Элек телевидениела "Йыр тарихы - халыҡ тарихы" тигән проект бар ине. Уны фольклорсы, танылған ғалимә Фәнүзә Нәҙершина алып барҙы. Ул йылдарҙа быға са ишетелмәгән әллә күпме халыҡ йырҙары яңғыраны. Бөгөн телевидениела ундай халыҡ йырҙарын популярлаштырған тапшырыуҙар юҡ. Халыҡ йырҙарын пропагандалауға республикабыҙҙың оло шәхестәр йәлеп ителә ине. Фән докторы Әхмәт Сөләйманов, шағирҙар Назар Нәжми, Рафаэль Сафин радио, телевидение аша, матбуғат биттәрендә халыҡ йыры тураһында үҙҙәренең фекерҙәре менән уртаҡлашалар ине. Бөгөн йырсыларыбыҙҙың халыҡ йырына битараф булыуында, бәлки, шундай сараларҙың һирәгәйеүе сәбәпселер. Башҡорт дәүләт филармонияһында Хөсәйен Әхмәтов художество етәксеһе булып эшләгән ваҡытта йырсылар репертуарында мотлаҡ рәүештә ике халыҡ йыры булыуы талап ителә ине. Программаға халыҡ йыры инмәйенсә, ул уны раҫламай ине. Бөгөн филармонияла ундай талап ҡуйылмай йырсылар алдында.

Халыҡ йырҙарын башҡарған йырсылар юҡ түгел, бар ул. Тик уларҙы өгөтләп, рухландырып тороусы бер үҙәкме, советмы, кәрәк. Уның штатында ҡурайсылар, консультанттар булырға тейеш. Был ндай үҙәк булмаһа, өлкән быуын йырсыларыбыҙ китеп бөтһә, йәштәребеҙ, шул ҡырағай көтөү шикелле йөрөп, тик таҡмаҡ йырлауға һалышмаҫ микән? Ошондай махсус үҙәк кенә халыҡ йырҙарыбыҙҙы сит-яттарҙан, юғалыуҙан һаҡлап ҡаласаҡ. Был үҙәк, моғайын, Өфө сәнғәт училищеһында ойошторолорға тейештер. Буласаҡ йырсы профессиональ кимәлдәге тәүге аҙымын ошонда яһай бит. Сәнғәт академияһында халыҡ йырҙарын өйрәнеү буйынса тағы бер үҙәк эшләргә тейеш, сөнки академик пландағы йырҙар башҡарған йырсы халыҡ йырҙарын да йырлай ала. Ни өсөн Мәғәфүр ағай Хисмәтуллин операны ла, халыҡ йырҙарын да йырланы? Шул уҡ Нажиә Аллаярова. Был бит бербереһенә ярҙам итә торған алым. Беҙҙекеләр иһә, академик әҫәрҙәр башҡарһа йә эстрада йырын йырлаһа, халыҡ йырына мөрәжәғәт итмәһә лә ярай, тип уйлай. Халыҡ йырын бына тигән итеп йырларҙай йырсылар тап ана шулай уйлап, хаталанып, эстрадаға китеп, үҙҙәрен әрәм иттеләр.

**Т.ҮҘӘНБАЕВА:** Беҙ уҡыған йылдарҙа институтта халыҡ йырын бик йырламай инеләр. БДУ-ла белем алып йөрөгән Юлай Ғәйнетдинов ҡурайы менән беҙгә килеп, халыҡ йырҙары буйынса түңәрәк ойошторҙо. Унда Флүрә Килдейәрова, Ғәли Хәмзин, Вәкил Йәләлетдинов, Раил Кучуков, Венер Мостафин йөрөнө. Юлай беҙгә байтаҡ йырҙар өйрәтте. Шул йылдарҙа радиоға барып, бик күп йырҙар яҙҙырҙыҡ. Шуға ла ниндәй генә заманда ла халыҡ йырын башҡарыу, уны камиллаштырыу теләге йырсының үҙенән торалыр, тим. Ул бит йырсының кимәлен генә күтәрә. Ошоно аңлаһын ине йырсыларыбыҙ. Юғиһә, ҡайһы бер артистар худсовет аша программаларын тикшертеп, гастролдәргә сығып китә лә, тейешле урынға барып етеү менән халыҡ йыры урынына еңел-елпе көйҙәр менән сығыш яһай, йәнәһе лә, популярлыҡ яулай. Был үҙ-үҙеңә, халҡыңа хыянат итеүгә тиң бит. Ундай йырсыларҙың артабан үҫеүе икеле.

**Р. ВӘЛМӨХӘМӘТОВ:** Мин үҙем һәр ваҡыт репертуарыма халыҡ йырын индерәм. Әммә гастролдәр ваҡытында шул күҙәтелә: халыҡ йырын йырлай башлаһаң, йәштәр тәмәке тартырғамы, йәки башҡа сәбәп менәнме, залдан сығып китә, ә дәртле йыр башландымы, гөрләшеп кире килеп инә. Ҡайһы бер ауылдарҙа халыҡ йырҙарын бирелеп тыңлаусылар ҙа бар, мин уларға һәр ваҡыт рәхмәт әйтеп үтәм. Тап шуға ла бөгөн күп йырсылар, эстрада йырҙары менән тиҙерәк үҫәбеҙ, тип уйлай. Ҡайһы бер йәш башҡарыусылар Көнбайыш мәҙәниәте артынан ҡыуа, кемеһелер рэп стилендә шиғыр уҡып йырлай. Тағы ла беҙҙең эстрадала һинд, төрөк мотивтары көсәйҙе. Ә беҙҙең тамашасы һәр ваҡыт ошондай мотивтарға әүрәй. Ғөмүмән, халыҡ йырының мәғәнәһенә ҡолаҡ һалып, төп асылына төшөнөп, уйланып, моңланып тыңларға өйрәнмәгән беҙҙең тамашасылар.

**▶ Башҡорт халыҡ йырҙарының һәр береһе арияға тиң, тинек. Опера театрына, ғәҙәттә, интеллектуаль яҡтан юғары булған, юғары сәнғәтте аңлаған тамашасы йыйыла. Ни өсөн беҙ юғары кимәлдәге йырҙарыбыҙ була тороп, ошондай уҡ кимәлдәге юғарылыҡты яулай алмайбыҙ?**

**Ф.НОҒОМАНОВА:** Халыҡ йырҙарынан ғына торған концерттарға зал тултырып тамашасы йыйыр өсөн уны ойоштороусылар үҙҙәре лә йөрәге менән халҡыбыҙ йырҙарына тоғро бу-

✓ *Италияның Италияһында консерваторияла йырсы-студенттарға беҙҙең "Буранбай", "Ғилмияза", "Аманат" кеүек йырҙарыбыҙҙы йырлатып, тауышын үҫтерәләр.*



# ЙЫРЛАМАҒАН ЙЫРСЫ...

## үҙе урлаған

лырға тейеш. Бөгөн филармонияларға художество етәксеһе итеп ҡуйырлыҡ та белемле кеше табыуы ҡыйын. Кадрҙарҙы әҙерләргә, үҫтерергә кәрәк бит. Башҡорт телен белмәгән кеше халыҡ йырын нисек өйрәтә алһын... Бөгөн беҙҙең халыҡ йырҙарын пропагандалаусы, рекламалаусы маркетинг белгестәре, продюсерҙар етешмәй. Миҫалға Светлана Арғынбаеваны алайыҡ. Башҡорт йырсыһы Италияла "Кармен"ды башҡарып, барыһын да хайран итте. Минең әллә күпме йырсының "Кармен"ды башҡарғанын тыңлағаным булды, әммә Арғынбаева башҡарыуындағы "Кармен"ды бары тик Образцованыҡы менән генә сағыштыра алам. Ләкин... Уның концерттарын үҙебеҙҙең Рәсәй ҡалаларында ойошторорлоҡ кеше юҡ! Шул уҡ Эльвира Фәтихова сит ил сәхнәләрен яулап йөрөй, ә үҙебеҙҙә уның исемен ишеткәндәре лә юҡ. Беҙҙең сәнғәт ойошмаларының үҙ "тауарын" тәҡдим итә, рекламалай белмәүе арҡаһында килеп сыға был. Халыҡ йырҙарына килгәндә лә, шул уҡ хәл. Халыҡ йырҙарынан ҡоролған концертты ойоштора, халыҡҡа "һата" белергә кәрәк.

80-се йылдарҙа Башҡорт дәүләт опера һәм балет театрында эшләп йөрөгәндә башҡорт халыҡ йырҙарынан торған концерт ойошторорға булдыҡ. Ҡулдан ғына өс белдереү яҙып, Башҡорт дәүләт университеты, Башҡорт дәүләт аграр университеты һәм опера театры янына элеп ҡуйҙыҡ. Зал халыҡ менән шығырым тулды ла ҡуйҙы. Иҫ киткес шәп концерт булды ул. Был башланғыстың уңышлы һөҙөмтәһен күреп, дәртләнеп китеп, икенсе концертты ойошторорға булдыҡ. Афишалар өсөн аҡсаһы ла табылды, программаны ла тулыраҡ, сағыуыраҡ итеп эшләнек. Был юлы залдың партер өлөшө генә түгел, балкондары ла тамашасы менән шығырым тулды. Был концерттарҙың күбеһен режиссер Фәтих Иҡсанов сәхнәләштерҙе. Бөгөнгө көндә танылыу алған "Йәдкәр" фольклор төркөмөнөң башланғысы фәҡәт шул халыҡ йырҙары концерттарының һөҙөмтәһе лә инде. Шул йылдарҙа халыҡ йырҙарынан ғына торған 16 концерт эшләнгән. Минең халыҡ йырына булған мөхәббәтем, уй-тойғоларым әйтеп тә, яҙып та бөтөрөрлөк түгел.

**Т. ҮҘӘНБАЕВА:** Әлеге ваҡытта мине "Йәдкәр" тарҡалды" тигән хәбәр таралыуы борсой. 30 йылға яҡын халыҡ гәүһәрҙәре һағында хеҙмәт иткән был коллектив шулай эҙһеҙ генә юғалырмы икән?..

**Р. ВӘЛМӨХӘМӘТОВ:** Халыҡ йырҙарын пропагандалау, уны тыңларға өйрәтеү өсөн радионан һәм телевидениенан аҙнаһына бер-ике тапҡыр тик халыҡ йырҙарынан торған программалар эшләү ҡамасауламаҫ ине. Беҙҙең тамашасыны тап шул радио менән телевизор тәрбиәләй бит. Телевидениела эстрада йырҙарын пропагандалауға ғәйәт ҙур өлөш индергән "Гәлсәр һандуғас" проекты нисек шәп эшләп килә, ошондай уҡ проект халыҡ йырҙарына ла арналһа, ҡалай шәп булыр ине. Быйыл беҙҙең филармония үҙенең ижад миҙгелен ҡурайға арналған программа менән асты. Халыҡ йырына ғына арналған яңы программа әҙерләргә лә булыр ине ул.

**Ф.НОҒОМАНОВА:** "Гәлсәр һандуғас"ҡа килгәндә, был проект йәш йырсыларға үҙҙәрен йыр сәнғәтендә һынап ҡарау ышаныҫы бирә. Тик үкенескә ҡаршы, уларҙың күптәре "йондоҙ" сиренә юлығып, уҡыуына һалҡын ҡарай башлай, йә бөтөнләй ташлап ҡуя. Был проектҡа тәҡдимем шундай: әйҙә, конкурста бер халыҡ йырын башҡарыу шарт итеп ҡуйылһын, икенсеһе эстрада йыры булһын. Шулай иткәндә, ике айыуҙы бергә атыр инек.

▸ **Беҙҙә башҡорт халыҡ йырҙарын йырларға өйрәтеү мәктәбе юҡ. Бындай мәктәп булдырыу мөмкинме? Әгәр мөмкин булһа, ул ниндәй булырға тейеш? Йырсыларҙы әҙерләү нисә йәштән башланырға тейеш?**

**Ф.НОҒОМАНОВА:** Халыҡ йыры беҙҙең ҡанға һеңгән. Бындай моң бер милләттә лә юҡ. Әммә халыҡ йырына ҡарата мөхәббәт, өмөт, ғорурлыҡ уятыу мәктәптән, бәләкәй уҡыу йорттарынан уҡ башланырға тейеш. Әйтәйек, "Башҡортостан мәҙәниәте" дәресенең бер өлөшө халыҡ йыр ижадын өйрәнеүгә бағышланырға тейеш, тип уйлайым Мәҫәлән, Ғ.Әлмөхәмәтов исемендәге гимназияла башҡорт халыҡ йырҙары буйынса уҡытыусы булмауы бик насар. Бында ла бер үҙәк булдырыу кәрәк. Халыҡ йырын тыңламай тороп, уны күңелгә һеңдереп булмай. Элек уҡыу йорттарында йыр түңәрәктәре эшләп килә ине. Мин үҙем Башҡорт дәүләт университетында өс йыл эшләнем. Студенттарҙы иң башта халыҡ йырына өйрәттем. Араларынан ике нота ла белмәгән йырсылар бөгөн әллә нисәмә конкурс лауреаты булыуға өлгәште. Бөгөн юғары уҡыу йорттарында ошондай түңәрәктәр юҡ. Әгәр бындай түңәрәктәрҙе яңынан тергеҙһәк, беҙ үҙебеҙҙең башҡорт халыҡ йырҙарын башҡарыу оҫталығын тағы ла байыта, моң шишмәһен тулыландыра алыр инек.

Тағы ла шул: буласаҡ йырсының ниндәй уҡытыусыға эләгеүе лә бик мөһим. Ни өсөн заманында Иншар Солтанбаевты, Альберт Шаһиевты, Ризуан Мөхәмәҙиевты, Гәзим Ильясовты, Венер Килмөхәмәтовты, Венер Абдуллинды уҡытмай, ҡайтарып ебәргәндәр? Тап ошо йырсыларҙы бөгөн халыҡ яратып тыңлай. Был үҙ заманында уҡытыусыларҙың уларҙың һәләтен күрә белмәүе арҡаһында килеп сыҡҡан эш. Педагог булыр өсөн аҡыллы баш, белем, рух, сабырлыҡ һәм уҡыусыңды үҙ баламдай яратыу кәрәк. Һиндә ошо биш әйбер булмай тороп, йырсы әҙерләүе мөмкин түгел. Ә халыҡ йырына килгәндә, уны нота буйынса ғына өйрәтеп булмай. Беҙҙең халыҡ йырҙарының үҙенә генә хас үҙенсәлектәре, нескәлектәре бар. Әйтәйек, Диана Нурмөхәмәтова "Ашҡаҙар"ҙы үҙенә генә хас көмөш тауыш менән бик оҫта башҡарһа, ошо уҡ вариантты мин үҙемдең тауыш мөмкинлектәренән сығып, бөтөнләй башҡаса яңғыраттым. Был йырсының үҙенең булмышына тауыш мөмкинлектәрен яраҡлаштырып йырлау тип атала.

**Т. ҮҘӘНБАЕВА:** Сәнғәт училищеһында 4 йыл эшләү дәүерендә мин шуны аңланым: һәр уҡытыусы уҡытҡан балаһының тәбиғи тауышын, тембрын һаҡлап ҡалып, шул тауышты көндәлек йыр күнегеүҙәре менән сарлап, уның күңеленә үтеп инеп, артабан уны камиллаштырырға, барлыҡ мөмкинлектәрен асырға, үҫтерергә тейеш. Балаларҙың да бит төрлөһө була һәм уларҙың һәр береһенә шәхси ҡараш талап ителә. Бындай хеҙмәтте мин ювелир оҫтаһы хеҙмәте менән тиңләр инем. Өфө сәнғәт училищеһында халҡыбыҙ йырҙарына ҙур иғтибар бирелә. Һәр уҡыусы академик зачеттарҙа, имтихандарҙа уҡыу программаһына ярашлы 3-4 халыҡ йыры йырлап сығырға тейеш. Абитуриенттарға ла шул уҡ талаптар ҡуйыла, сөнки халыҡ йырын башҡарғанда ғына йырсының бөтә тауыш мөмкинлектәре, дөрөҫ тын алышы, ижектәрҙе дөрөҫ ҡуйып йырлауы, ихласлығы, халыҡ йырына булған һөйөүе, мөнәсәбәте асыҡ сағыла. Донъяға бөйөк йырсылар биргән илдә лә - Италияның Италияһында консерваторияла йырсы-студенттарға беҙҙең "Буранбай", "Ғилмияза", "Аманат" кеүек йырҙарыбыҙҙы йырлатып, тауышын үҫтерәләр.

**Р. ВӘЛМӨХӘМӘТОВ:** Башҡорт халыҡ йырын йырлау өсөн уның тарихын яҡшы белергә һәм уның йөкмәткеһен, унда һалынған фекер, хис-тойғоно күҙ алдына килтереп, йөрәгең аша үткәреп, кисереп, йырларға кәрәк. Шунһыҙ халыҡ йырын нота буйынса формаль рәүештә генә башҡарып булмай. Беҙҙең халыҡ йырҙарын үҙенә тетрәнеп һәм тамашасыны тетрәндерерлек итеп башҡарырға кәрәк. Бындай сығыштарҙан һуң, гәзәттә, оҙаҡ ҡына тынысланып булмай, йөрәк дөпөлдәп тик тора.

Халыҡ йырын өйрәнеүе бик ауыр. Эстрада йырҙарын бер-ике тыңлап ҡына, йырлап ебәреп булһа, халыҡ йырын ҡайһы саҡта йылдар буйы күңелдә йәшәтеп, ҡаныңа һеңдереп йөрөргә кәрәк, шунһыҙ уны еренә еткереп башҡарыу мөмкин түгел.

▸ **Хәҙерге заман башҡорт һәм татар эстрада йырҙары шул тиклем буталды. "Юлдаш", "Шәреҡ" каналдарында көнө-төнө яңғыраған был йырҙарҙы көйө буйынса түгел, ә йырсы башҡарған тел буйынса ғына айырабыҙ. Хәҙерге заман башҡорт йырҙары моң йөкмәткеһе буйынса нимәһе менән айырылырға тейеш?**

**Р. ВӘЛМӨХӘМӘТОВ:** Беҙҙең йырҙарҙа моң, халыҡсанлыҡ һаҡланырға тейеш, ҡоро ритм менән генә алдырып булмай. Берәү "хәҙер шундай заман етте, сәхнә менән урам тоташты," тип әйткән бит. Сәхнәнең бәҫе китә башланы, теләгән бер кеше сәхнәлә йырлай башланы.

**Ф.НОҒОМАНОВА:** Әйтәйек, бер композитор күп итеп йырҙар яҙҙы, ти. Әммә ашлыҡ сүпһеҙ булмай бит. Йырҙы башҡарыусыға бирер алдынан ана шул сүпсәре менән бергә китмәһен өсөн, уны айырырға ярҙам итеүсе кәңәшсе кәрәк. Бының өсөн Композиторҙар союзында консультация бүлеге булдырырға кәрәк. Ана шул иләктән һөҙөү булмағанға күрә, бөгөн эстраданы сүпсәр баҫып бара, был халыҡ зауығын түбәнәйтеүгә алып килә.

Ғөмүмән, башҡорт халыҡ йырҙары тураһындағы был һөйләшеү дауам итергә тейеш, беҙ бәхәсте башлап ҡына ҡуйҙыҡ, тип уйлайым.

## ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...

**Азамат ТИМЕРОВ, Башҡортостандың халыҡ артисы:** Бөгөн башҡорт эстрадаһында сит ил музыкаһын ҡалыплаштырып йырлау китте бит. Йәш башҡарыусылар, ни өсөндөр, халыҡ йырын йырлауҙы өнәп етмәй, еңел-елпе менән мауыға. Радионан да бер мәғәнәһе булмаған йырҙар тапшыралар. Халыҡ йыры оноҡтанда бер яңғырай. Ә беҙ бала саҡта мәшһүр йырсыларыбыҙ башҡарыуында халыҡ йырҙарын ана шул радио аша тыңлап үҫтек тә инде.

Бөгөн халыҡ йырына тамашасы ла артыҡ ихласлыҡ күрһәтмәй, ә уны яратып, аңлап тыңлаған оло быуын тамашасыһы һирәгәйеп бара. Был концертта ла һиҙелә: таҡмаҡ йырлап сыҡһаң, тамашасы ҡул саба, ә халыҡ йырын, нисектер, һалҡын ҡабул итә. Әммә быны сәбәп итеп ҡуйырға ярамай. Беҙгә тамашасы зауығын тәрбиәләү яғын ҡайғыртырға кәрәк. Халыҡ йырына арналған конкурстарҙы күберәк һәм төрлө төбәктәрҙә, райондарҙа ойоштороу ҙа ыңғай һөҙөмтә бирмәй ҡалмаҫ ине. Мин Сибайҙа эшләгән саҡта Өфөлә ике тапҡыр халыҡ йырҙарынан ғына торған концерт бирҙем. Унда "Буранбай", "Эскадрон", "Колой кантон", "Әрме" кеүек беҙҙең рухлы йырҙарыбыҙҙы башҡарғайным. Эйе, күптән түгел филармонияла уҙған концертымда эстрада йырҙарына өҫтөнлөк бирелде һәм ул йәш режиссерҙың идеяһы менән шоуға тартымыраҡ эшләнде. Киләсәктә ҡуйыласаҡ концерттарымда үҙ булмышыма яҡын торған халыҡ йырҙарын күберәк башҡарырмын, тим.

**Вил КӘРИМОВ, Башҡортостандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре:** Халыҡ йырҙарына иғтибар аҙайыуына тотош илебеҙҙә барған үҙгәрештәр сәбәпсе булып торалыр. Беренсенән, халҡыбыҙ күпләп ҡалаға ынтыла, ауылда йәшәүселәр аҙая. Ә ҡалала оҙон көй яңғыраған урындар берәүикәү генә. Икенсенән, башҡорт йырҙарын, башҡорттоң моңон еренә еткереп башҡарыусылар кәмей бара. Ә беҙ ошо алтынға тиң аҫыл йырсыларыбыҙҙың ҡәҙерен белеп, баһалап еткермәйбеҙ. Премия, исем-дәрәжәләр биреп торола, әммә был улар лайыҡ булған баһаның бер өлөшө генә. Әле филармониялар фестивале булып үтте. Унда ла халыҡ йырын өсдүрт кешенән башҡа башҡарыусы булманы. Беҙҙең үҙебеҙҙең төп филармониябыҙҙа ла халыҡ йырын башҡарыусылар һанын арттырырға, репертуарҙарына халыҡ йырын индереүҙе талап итергә кәрәк. Өсөнсөнән, бөгөн радио-телевидениеның туҡтауһыҙ эстрада йырҙарын, бигерәк тә Көнбайыш стилендәге йырҙар яңғыратыуы ла тамашасы зауығын боҙоуға йоғонто яһай. Ҡайһы саҡта радионан яңғыраған бер сәғәтлек программала бер генә башҡорт көйө лә яңғырамаған саҡтар була. Башҡорт композиторҙарының әҫәрҙәре яңғырарға тейеш тәбаһа. Ни өсөн Композиторҙар союзы сит ил көйөнөң баҫа барыуына битараф ҡарай, бындай күренешкә сик ҡуйыу тураһында хәстәрлек күрмәй икән?

**Альберт ШАҺИЕВ, Башҡортостандың халыҡ артисы:** Йырсылар ни өсөн эстрадаға әүрәп китте? Сөнки унда артыҡ көс һалырға кәрәкмәй, йыр яҙҙырып ал да, әйҙә, йырла ла йөрө. Ә радио, телевидение уларҙы рәхәтләндереп яңғырата, шулайтып популярлыҡ яулана. Уҡыу йортон тамамлаған өмөтлө йырсылар ҙа ижадын бынамын тигән итеп халыҡ йыры менән башлап ебәрә лә, билдәлелек артынан ҡыуып, эстрада менән мауыға башлай. Әммә халыҡ йырын башҡарған йырсы ғына йырсы исеменә лайыҡ булыуын аңлап етмәйҙәр шул. Минең Европала йөрөгәнем бар, унда фонограмма менән сәхнәгә бөтөнләй сығармайҙар, ә беҙҙә, киреһенсә, фонограмма талап ителә. Быны беҙ шул уҡ "Гәлсәр һандуғас" проектында күҙәтәбеҙ. Ә халыҡ йырын фонограммаға йырлап булмай, хәйер, хәҙер уныһын да фонограммаға яҙҙырып, боҙоп йырлап маташыусылар юҡ түгел. Былар барыһы ла ваҡытлыса күренештер, тип уйлайым.

Халыҡ йырын яратып башҡарған йырсылар, яратып тыңлаған тамашасылар бар ул һәм бындай концерттарға зал тултырып тамашасы йыйырға ла мөмкин, тик бының өсөн уны яҡшы итеп ойошторорға һәм реклама эшләргә кәрәк. Ә инде халыҡ йырын башҡарыусыларҙы арттырыр өсөн һәләтле йырсыларҙы ауылдарҙан эҙләргә кәрәк. Һәм был йырсыларҙы сәнғәт уҡыу йорттарында уҡытҡан саҡта уларҙың тәбиғәтенә һалынған моңон боҙорға юл ҡуйырға ярамай.

**Динара ЯҠШЫБАЕВА**
**әңгәмә ҡорҙо.**

**(Аҙағы. Башы 1-се биттә).**

Ҡаршылыҡтар аша Башҡортостан
Яңы уйҙар ҡора, юлдар яра,
Алға бара - иҫтәр китерлек!
Андып торған мәкер-хәйләләрҙе
Тик зирәклек менән еңерлек тә
Үткерлектәр менән үтерлек.

Ҡоторғанда заман,
Яҙмышты тик
Тырышлыҡтар менән тоторға.
Ситтән килеп, ярҙам итмәҫ бер кем,
Ситтәр килер талар-оторға,
Ситтәр килер һоғонор-йоторға.

Бер кем ситтән килеп төҙәтмәҫ тә
Ситтән килеп бер кем ҡотҡармаҫ.
Сит ярҙамдан донъя ҡотаймаҫ,
Булған ҡотондан да ҡот ҡалмаҫ.

Хәләл малды харап итә харам,
Милләт мөлкәтенә ҡул һуҙып.

Бурҙай эттәй бур - бай!
Урлап таптың
Йөҙ һумыңдың туҡһан туғыҙын.

Батша һарайындай был йортоңдоң
Нигеҙенән түбәһенә тиклем
Урланған мал -
Иҫтәр китерлек!
Урлап табылғанын һурып алһаң,
Йөҙ кирбестән ҡалмаҫ бер кирбес.

Байлыҡ сумырып,
Сымылдыҡҡа сумып,
Йәшәүҙәре һиңә бик шәптер -
Был бит тирен түккән, билен бөккән
Бер ҡарт ята торған түшәктер.
Тик хаҡ хөкөм телһеҙ нишләптер.

Инде нисәмә ҡат иномарка
Яңыртаһың һайлап иң шәптән.
Ғәйрәттәрен һәр бер машинаңдың
Ат көстәре менән һанама һин,
Кеше көсө менән иҫәплә:

Һөйрәп йөрөтә һинең лимузинды
Ыҙа сиккән күпме сабыйҙар.
Йыуа уны нахаҡ күҙ йәштәре,
Әллә ҡайҙан шуға таныйҙар.

Маһаяһың:
- Мин - хан, мин - солтан!- тип,
Лаф ораһың:
- Мин бит супермен.
Илдең ҡанын имгән имгәкһең бит,
Юлыбыҙҙа бер шеш - түмгәкһең бит,
Һай, супермен, имеш!
Күҙгә төшкән бер сүп,
Сүп ир һин!

Үкһеҙҙәрҙе был йән йәлләр тиеп,
Мәрхәмәттәр көтмә һис кенә.
Илде талағандың бәгере таш,
Уғры байҙан сыҡмаҫ меценат.

Йырып-йыртып ҡыра ҡырағайлыҡ,
Меңдәр - тибелә, берәү - типтерә.
Һаман егелә халыҡ, һаман бөгөлә,
Егелгәнгә еккән екерә.

Бур ҙа Аллаһ ҡоло!
Бер көн килеп,
Ғәҙел хөкөм менән күҙләшер.
Ҡомһоҙ күҙенә утлы ҡурғаш булып,
Үкһеҙҙәрҙең тамыр күҙ йәше.

Урамдарға һыймаҫ йылғыр байҙар
Әйләндермәк илде меҫкенгә.
Ҡасан ғына халыҡ трамвайҙа
Йөрөп ятыр ине өс тингә.

Һау бул, трамвай!
Юлың ҡутарылған,
Рельс-шпалдарың һүтелгән.
Тура килә бөгөн Юлдаш дуҫҡа
Хәтирәләр буйлап үтергә.

* * *

Ҡот өҫтәне өйгә улы менән -
Азаматы менән килене.
Ғәҙел ҡаҡҡан ҡотло дүңгәләккә
Бүләр сәңгелдәге эленеп,
Яңы быуын артты шәжәрәлә,
Һиҙмәне йорт тиҙҙән иларын...
Ниңә яҙмыш яңылыш хөкөм ҡылды -
Йәш ғаиләнең бәхетен урланы?
Ата-әсә юлда һәләк булды,
Иҫән ҡалды Азат улдары.

Юлдаш үҙе атай күрмәй үҫте,
Ейәне лә ҡалды атайһыҙ.
Яңы тәпәй баҫҡан сағы ине,
Алда күпме юлдар атлайһы...

Үҫте сабый.
Атай һәләк булһа,
Ҡартатайҙан күргән уҡ юнған.
Тамыр йәйҙе Азат күңелендә
Юлдаш әйткән, Юлдаш уҡыған.

Ғүмере буйы Юлдаш китап менән
Ҡанатланды. Янды. Шаңҡыны.
Был йорттағы тарих китаптары! -
Азатҡа ла тейҙе шауҡымы.

Йәшәмәне Юлдаш тарихтағы
Уйҙырмалар менән ярашып.
Һәр шәхескә үҙ баһаһы булды,
Ваҡиғаға - үҙенең ҡарашы.

Математик һанды боҙа алмай,
Ә тарихсы! -
Барыһын борғослай.
Мәҙхиәләр йырлай ҡәбәхәткә,
Ҡойороҡ болғай ахмаҡ бойороҡҡа.

Бармы икән фәндәр араһында
Тарихтан да нығыраҡ уйнаш иткән,
Уҙғандан да нығыраҡ боҙолған?!
Бөгөн барыһына ҡара яға,
Кисә буяй ине ҡыҙылға.

Нисә быуындарҙы һөрән һалып,
Ҡыҙыл байраҡ сөйөп атлатты.
ВКП(б), КПСС тарихын
Доға урынына ятлатты.

Алмашынды һөрән-цитаталар,
Алмашынған һайын юлбашсы.
Зиһене алышынған һәр юлбашсы
Бөйөктәрҙән бөйөк булмаҡсы.

Халыҡ ижад иткән ил тарихын
Үҙ яйына көйләй батшалар.
Әйтерһең дә бөтә бөйөк эштәр
Яңы даһи килгәс башлана.

* * *

Уйҙарынан арынып китте Юлдаш,
Ҡапыл кемдер еңдән тартҡанға.
Өйөрө менән көньяҡ сабыйҙары
Мөлдөрәшеп күҙгә баҡҡандар.

Әле ҡасан ғына күпме башҡорт
Олаҡҡайны йылы тарафтарға...
Эй, яҙмыштар!
Донъя - ҡуласа.
Хәҙер шул яҡтарҙан бисаралар,
Беҙгә килеп хәйер һораша.

Ҡара күҙле ҡара бала-саға
Ҡулын һона ҡарап мөлдөрәп.
Эй бисара йәндәр еңдән тарта,
Йылдан-йылға улар күберәк.

Ә һуң күпме башҡорт ситтә зарыға,
Башҡортостан - гөлбостанға
Ҡайтырмынмы тип бер көн.
Ҡайтыр башҡортҡа урын тар,
Ҡасаҡтарға юл иркен.

Ҡасаҡ битлеге ябынған
Ҡараҡтар ҡосаҡта.
Үҙ балаң ҡаңғыра
Сит яҡта.

Башҡортостан!
Ерен-иркен һаҡлап,
Күпме ғәййәр башҡорт башы осҡан.
Килмешәктәр - түрҙән,
Аҫабалар - остан.
Үрҙә - ҡуштан, кәштән,
Үҙеңдеке - тышта.

Төҙөк урамдарҙа
Емерек яҙмыштар.
Теләнселәр, хәйерселәр,
Хәсрәт - һағыштар.

Эй баш ҡала, эй бай ҡала,
Эй Өфө ҡалалары!
Байрамдарҙа ҡанат кирә,
Майҙандарҙа тирмә ҡора
Башҡорттоң ағалары.
Ҡурай тарта аҡ еләнле
Аҡһаҡал бабалары,
Сая бейеп, һоҡландыра
Йәштәре, балалары.

Эй илгәҙәк илкәйебеҙ,
Эй алсаҡ шул халҡыбыҙ.
Ҡунаҡтарын ҡаршы ала
Береһе тотоп икмәк, сәк-сәк,
Береһе һоноп бал-ҡымыҙ.

Күкрәк кереп, ҡурай тарта,
Бейей, йәйеп ҡоласын.
Моңланғанда һандуғас ул,
Кәрәк икән - ыласын.

Талпына ҡурай,
Моңлана ҡурай,
Алҡыштар яулап,
Донъяны урай.

Ил - йорт, тик тормай,
Алға ҡыбырлай.
Башҡорттар бейей,
Башҡорттар йырлай,
Ә донъя урлай.

Яңы урыҫ илде талай,
Аҡса һуға яңы татар.
Иҫке башҡорт ҡурай тарта,
Йырлай, бейей, моң тарата.
Иҫке башҡорт иҫереп ята,
Яңы башҡорт ерен һата.

Ҡатлы-ҡатлы йорттар,
Ҡатлам-ҡатлам тормош.
Ең һыҙғанып Башҡортостан
Яңы тормош ҡормош.
Башҡортостандың был тиклем дә
Ҡанатланғаны юҡ ине.
Тормоштарҙың был тиклем дә
Ҡатламланғаны юҡ ине.
Яҙмыштарҙың был тиклем дә
Һынғаны, ҡатҡаны юҡ ине.

Күптән инде Өфө буйлап
Юлдаштың ошолай йөрөгәне,
Рухы берсә ҡанатланып,
Күңеле берсә таланып
Ҡайтҡаны юҡ ине.

* * *

Ҡайтып етһә, тағы шул күренеш:
Шул Күренгес янда урала.
Һынауҙы ил еңеп үтерлек.

Эй был заман!
Хәләл закондарҙы
Харам яҡҡа бороп ебәрә.
Төп Законды борғоларға була,
Тарихтарҙы боҙоп яҙып була,
Борғоланмай бары шәжәрә.

Шәжәрә шау тарих ҡына түгел,
Шәжәрә гел алға саҡыра.
Атай булыр күпме ир йөраты
Аяғында баҫып саҡ тора.

Шешәһенә йәбешеп ауғандарҙы
Тиҙ ҡаптырыр әжәл ҡармағы.
Үрелеп үҫкән бөйөк шәжәрәнең
Өҙөлә, ҡорой күпме тармағы.

**Ейән:**

Тарих һөйләр ағастар ҙа һирәк,
Урмандарҙы, ҡырып һалғастын.
Аҫыл ағастарҙың араһында
Иң изгеһе - ырыу ағасы.

Салауатты күргән имәндәр бар,
Быуаттарға тамыр ебәргән.
Мөмкин түгел хатта уларҙы ла
Ырыу ағасына тиңләргә.

Иң олоһо - илдең шәжәрәһе,
Шәжәрәлә - халыҡ хәтере.

## Рауил БИКБАЕВ

# Хазина

**Поэманан өҙөк**

-Ҡурҡма, ҡурҡма, Юлдаш ағаҡайым,
Һинән бөгөн бер тин һорамам.
Мин бай бөгөн! Кеҫәм тулы аҡса,
Үҙем ҡунаҡ итәм, теләһәң.

Ауыҙынан аға шеләгәйе,
Ҡулы ҡутыр, бите төләгән.

Заманында ниндәй егет ине,
Ниндәй ярһыу, ниндәй ҡанатлы!
Әйләнде лә бөттө Күренгескә,
Ҡалды Шәүлә, ҡалды Ҡараҫҡы.

Азаматтар менән бергә үҫте,
Афғандарға яҙмыш ташланы,
Ут эсенән иҫән йөрөп ҡайтты,
Йәне генә иҫән ҡайтманы.

Йәне һынып, рухы һүнеп ҡайтты,
Төштәренә инә мәхшәрҙәр.
Ул уттарҙан ҡайҙа йәшенергә,
Ни мәғәнә табып йәшәргә?

Ата-әсәһенең бөгөлгәне,
Үҙенең ҡара янып көйгәне...

Ҡартатайҙың исеме - таҡтаташта,
Нисек ҡараймайҙыр ул аҡ таш та,
Күреп ошо хәлдә ейәнен...

* * *

Өс йыл инде Юлдаш менән Азат
Икәүләшеп кенә йәшәйҙәр.
Белгәненән Азат өсөн Гөлнур
Оләсәй ҙә булды, әсәй ҙә.

Ҡырҡ йыл ғүмерен мәктәп өсөн
биреп,
Китеп барҙы яҡты донъянан.
Нур - яҡтылыҡ бөркөп йәшәне ул,
Исемен әйтһәң, һаман нур яуа.

* * *

Тарих тураһында хәбәр сыҡһа,
Икеһе лә ҡолағын ҡарпайта.
Ҡартатаһы һөйләй. Ейән тыңлай.
Ейән һөйләй, тыңлай ҡартатай.

**Ҡартатай:**

Шәжәрәнең һәр быуыны ғәзиз,
Ҡайырылмаҫлыҡ булып үрелһен.
Тарихтарҙа быуылып ҡалған уйҙар
Яңы быуындарҙа терелһен.

Ниндәй өмөт менән барғайным бит!
Уңманы шул бөгөн сәфәрем.
Шәжәрәм тип һаман сабасаҡмын,
Күпме ҡалған булһа йәшәрем.

Ғәмһеҙ йәндәр шулай күпме йөҡлар,
Иҫәпкә бар улар, һанға юҡтар,
Иҫһеҙлеккә иҫең китерлек.
Ырыуың һиндә туҡталмаһа ғына
Аңы барҙың ғына атыр таңы,
Хәтере булһа ғына ил тере.

Шәжәрә шау тарих ҡына түгел,
Киләсәккә нығыраҡ ҡан тарта.
Дөрөҫ булыр микән тик уҙғанға
Ҡайырылып китеү, ҡарататай?

Тарихыбыҙ меңәр йыллыҡ тиеп,
Бәгзе берәү күңелен йыуатмаҡ.
Ни мәғәнә уҙған мең йыллыҡҡа
Ялғанмаһа яңы быуаттар?

Боронғо моң менән бергә үрелеп,
Тулһын йортҡа яңы шатлыҡтар.
Тәүге башҡорттарҙы юллау кәрәк -
Тик булмаһын һуңғы башҡорттар!

Ҡарайым да күпме милләттәшкә,
Күҙем түгел, күңелем шәмәрә.
Һөйләшәләр йәштәр гибрид телдә,
Күпме ырыуҙың зат ағасына
Ялғана бит гибрид шәжәрә.

**Ҡартатай:**

Һине тыңлап ҡыуанам да, улым,
Борсолам да. Бындай дәүерҙә
Иң ауыры - һеҙгә.
Күпме йәштәр
Үҙен-үҙе һала ҡәбергә.

Йәштәр менән эшләү, һай, ҡатмарлы,
Ошо эшкә ихлас тотондоң.
Бик йыш ҡына ялдар итер мәлдәр
Онотолһа, әйҙә, онотолһон.

Тик онотма:
Тиҫтерҙәрең менән
Һеҙгә ил тип янып йәшәргә.
Юлда әле әңгәмә күп булыр,
Иртә таңдан алыҫ сәфәргә.

* * *

Ҡартатай менән ейәндең
Имен үтһен сәфәрҙәре.
Мине һаман нығыраҡ арбай
Тарихтың тылсым-серҙәре.

Тәүге башҡорт йәшәгән саҡ,
Халҡыбыҙҙың сал дәүере.
Табынғаны - сыңрау торна,
Инанғаны - изге бүре.

Күңелемә тынғы бирмәй,
Ҡаҙалғандай йәнгә бер сөй:
Мине тәүге башҡорттан да
Һуңғы башҡорт нығыраҡ борсой.
Шәжәрәбеҙ тамыры тәрән,
Шыйығаймаһын тармаҡтары.
Ботаҡтарын ботарларға
Әҙер залим бармаҡтары.

Иле өсөн баш күтәреп,
Баш һалмаған ситтә кемдәр?
Ер сигенәсә киңәйгән
Башҡорт һөрөләр һөргөндәр.

Ҡыҫҡарғандай хоҡуғыбыҙ,
Тарайғандан тарая ер.
Илдең тотҡаһы булырлыҡ
Аҙайғандан аҙая ир.

Тыуған ерем, берҙән-берем,
Ҡәғбәм дә һин,
Ҡәлғәм дә һин,
Сәждәм дә һин, сәм, ғәм дә һин,
Тәғәм дә һин, йәм, тәм дә һин -
Башҡортостан!

Тарихыбыҙ ғорур, бөйөк,
Күпме яҙма, күпме әйтмә -
Башҡортостан!
Һин - Ҡәғбәмде,
Һин - ҡәлғәмде ҡаҡшатмаһын
Ил тарҡатыр сәйәсәттәр.

Һанға һуҡмау милләттәрҙе
Ниндәй илде итте һәләк!
Ниңә шундай ҡыйралыштан
Юлбашсылар алмай һабаҡ?

Низағлашыр саҡмы ни һуң?
Бергә күпме яуҙар сапҡан,
Рәсәй халҡы туғанлашҡан.
Ағай-эне талашһа ла,
Атҡа менһә, ил ярашҡан.

Яу сапҡанда берҙәм бул да
Еңеү яулап, тарҡал, имеш.
Ҡалманы ил берҙәм булып
Эйәрҙән дә төшкән килеш.

Ҡайҙа булды бөйөк дәүләт?
Китаптарҙа ҡалды бары.
Ҡаҙалды бит йөрәгемә
Ватанымдың ярсыҡтары.

* * *

Был яҡтарҙы Юлдаш сабый саҡта
Тыуған төйәк күреп йәшәне.
Атаһының тамыры - Бошман
ҡыпсаҡ,
Тамъян ырыуынан әсәһе.

Әбйәлилдә йәйҙәр бигерәк йәмле,
Был йәннәткә тиңдәш ер ҡайҙа?
Ҡасан ғына Азат килтергәйне,
Алырға тип килде бер айҙан.

Был бер айҙа күпме кисерештәр,
Түҙһен генә инде, эй, йөрәк.
Яҡтыкүлгә ялға килгәйне лә,
Ауылдарҙа булды күберәк.

Ял йортонан артыҡ дуҫ-иш менән
Тирмәләрҙә йәйрәп ултырыу.
Ер сигенән ҡайта ауылдаштар,
Шәжәрәһен төпсөй һәр ырыу.

Һауыҡтыра күңел яраларын
Ҡурай моңо, тылсым көй-йырҙар.
Бынау кейеҙҙәрҙе баҫҡан ҡулдар
Шул тиклем дә оҫта булырҙар.

Сәсәндәрҙе тыңла!
Осҡон сәскән
Һәр һүҙендә ҡөҙрәт табаһың.
Айырылмаһын халыҡ был илһамдан -
Ҡаты булды тарих һабағы.

Ил яңыра.
Яңы көс ярала.
Яҡыная алыҫ аралар.
Яңы мәктәп, яңы мәсет ҡалҡа.
Ҡара!
Илаһи бер манзара:
Күтәрелә күккә Юлдаш күңеле,
Күтәрелгән саҡта манара.

Һәр кем үҫтергәндә тик бер ағас,
Хәстәрләһәк йорттоң нигеҙен,
Баҡса булыр барса төйәгебеҙ,
Ҡаплай алмаҫ хафа ил йөҙөн.

Күпме күрҙе халыҡ.
Ауырҙа ла
Ауманы ил.
Булды гел татыу.

Йәннәт еребеҙгә ябырыла.
Ҡайҙан яңы афәт -
Ер һатыу?

Аҡылы алмашынған юлбашсылар
Береһен береһе алмаштырып торҙо...
Фармандары яңы имгәктең
Башҡа күсәк булды.
Тотош илде
Иҫһеҙ итте, аңын имгәтте.
Иплә́п-иплә́п инде ипкә килә

✓*Күк йөҙө асылғандай булып, көмбәҙ ут-ялҡынға сорналды. Теге ике һыҙыҡ ике ҡулсаға әүерелеп, ҡап уртаһында матур бер һын хасил булды. Мин иҫем китеп шул ут-ялҡын һынына төбәлгәйнем.*



ХОҘАЙ МӨҒЖИЗӘЛӘРЕ

# АХЫРАЗАМАН ЕТТЕ НИҺӘ...

**Бер кис өҫтәлдәге ҡағыҙҙар араһында ҡаҙынып ултыра торғас, бер-ике йыл элек өләсәйем Фәүзиә Мөхәмәтйәрованан яҙып алған ҡыҙыҡлы яҙмаларға тап булдым. Унда Әбйәлил районы Байым ауылынан Һитаулла олатайҙың 1935-1936 йылдарҙа өләсәйемә һөйләгәндәре теркәлгәйне:**

"Ахырзаман етте ниһә, мөйөштән Мәскәүҙе күреп ултырырһығыҙ. Кешеләр сәскә төҫлө кейенер. Донъяны ҡара кешеләр баҫып алыр, ти. Атһыҙ арба күбәйер. Һауаны үрмәксе ауы баҫыр".

"Урамдан дәжжәл (ғәскәр) үтер. Улар гармун уйнап, төрлө көйҙәр яңғыратыр. Уның артынан бөтә әҙәм эйәрер һәм ҡырҡ тау аша үтеп, үлеп бөтөрҙәр. Еткәне етә, етмәгәне... Баҙ аҫтына төшөп, тирмән тартҡаны ғына ултырып ҡалыр. Шул арала тәҙрәгә ҡараған кешегә мөгөҙ сығып, шунда ултырып үлер, ти. Дәжжәлдән ҡалған кеше ҡырҡ йыл донъяла ҡалып рәхәтләнеп йәшәйәсәк. Ул йылдар ҡырҡ көн кеүек тә һиҙелмәҫ".

Аҙағынан мөнәжәт уҡый:

Ахыразаман етте ниһә, нейҙәр болғай,
Ғалимдар сәхәр эсеп, зина ҡылғай.
Донъяға төрлө-төрлө бәлә тулғай,
Унан артыҡ, тәки ғәжәп, тыңлар илар.

Ахыразамандың етеүен дәлилләүсе был ваҡ билдәләрҙең күптәрен беҙ бөгөнгө тормошта күҙәтәбеҙ. Тимәк, ҡалғандары ла тормошҡа ашыуы ихтимал. Ә был хаҡта хәҙистә ошолай тип әйтелә: "Ҙур билдәләр бер епкә теҙелгән сәйлән кеүек булыр, әгәр был еп өҙөлһә, улар бер-бер артлы килеп кенә торор".

**Ейән.**

# КҮК ҠАБАҒЫ АСЫЛДЫМЫ?

**2008 йылдың 16 ноябре. Киске сәғәт 11.00. Йоҡоға әҙерләнгән мәл. Күккә бағып, Аллаһы Тәғәләнән ҡыҙымдың туйын (5 декабрь булырға тейеш ине) имен-аман үткәреп ебәреүҙе һорайым. Шул саҡ Етегән йондоҙонан төньяҡтараҡ ике параллель юл хасил булды. Аралары ла алыҫ түгел, минең үлсәүем буйынса 1 сантиметр тирәһе. Халыҡта ундайҙы "ҡылдан нәҙек, ҡылыстан үткер", тиҙәр.**

Мин йөҙөм менән көнбайышҡа ҡарай боролоп торам. Был юл тап мин ҡараған көмбәҙҙең уртаһынан көньяҡҡа табан килә. Минең ҡаршыма килеп кенә еткәйне, һин дә мин торған күк йөҙө асылғандай булып, көмбәҙ ут-ялҡынға сорналды. Теге ике һыҙыҡ ике ҡулсаға әүерелеп, ҡап уртаһында матур бер һын хасил булды. Мин күк йөҙөнөң ниндәйлеген тойомлай алманым, сөнки иҫем китеп, бар булмышым, күңелем менән шул ут-ялҡын һынына төбәлгәйнем. Бер нисә секунд! Ул - тере! Күк ҡабағы ябылды, юл ике һыҙыҡ булып бер аҙ барҙы ла, кинәт кенә юғалды. Мин өйгә инеп, сәғәткә күҙ һалдым: ун икенсе ун минут ине.

"Кеше ышанмаҫтайҙы дөрөҫ булһа ла һөйләмә", - тиҙәр. Әлбиттә, был хәлгә күптәр ышанмай. Мин һәр ваҡыт ана шундай кеше күрмәгәнде күреп, кеше ишетмәгәнде ишетәм дә йөрөйөм бит. Быйыл тағы ла бер сәйер хәлгә шаһит булдым. Верандала йоҡлағанлыҡтан, эттәрҙең шомло итеп олоуына уянып киттем. 11 майҙан 12 майға ҡарай таңғы сәғәт 4 менән 5 араһы ине. Үҙебеҙҙең "Мәктәп" урамынан енпәрейҙәрҙең мал-тыуар ҡыуып, арбаларын шығырлатып, ҡатын-ҡыҙ, ир-аттың үҙ-ара мөңгөрләшеп (мин уларҙы аңламаным), көнсығыштан көнбайышҡа табан күсенеүҙәрен ишеттем. Эштең ниҙә икәнлеген белгәнгә, ен һуғыр, тип тороп ҡарарға ҡурҡтым. Был турала оло әбейҙәргә һөйләгәйнем, улар араһынан Зәкиә инәй Сәскәбүләк яланында уларҙы күреүсе булыуын әйтте.

Ә теге мөғжизәнең ҡабатланыуын мин көн дә көтәм. Мин ысынлап та ул һынға ғашиҡ булдым.

**Зилә ХОҘАЙБИРҘИНА.**
**Ҡырмыҫҡалы районы.**



# ИМАНҒА КИЛГӘС,

## күңелеңде изгелек менән тултыр

**Тәбиғәткә иғтибар итһәң, уның кеше менән бергә ҡыуанғанын, йә ҡайғырғанын күреп, иҫең китә. Тик теле генә юҡ уның. Ә шулай ҙа уны аңлап була.**

Яҡындарым менән машинаға тейәлеп, Мөжәүир хәҙрәттең ҡәбере урынлашҡан изге ергә зыярат ҡылырға барҙыҡ. Унда барып төшкәс тә елфәлән булмаһа ла шул тиклем ныҡ итеп урман шаулауына иғтибар иттек. Аллаһы Тәғәлә ризалығы өсөн Ҡөрьән аяттары уҡып, зыяратҡа инергә юл алғайныҡ, урман шаулауҙан туҡтаны, әммә зыярат эсендә бары бер ағас ҡына япраҡтарын һелкетеп, шауларға тотондо. "Әссәләмәғәләйкүм!" - тип өндәшеп, был, моғайын, Мөжәүир олатай ҡәберендәге ағастыр, тип, шул яҡҡа атланыҡ. Ысынлап та, шулай булып сыҡты. Ҡәбер янында аяттар уҡылды. Доға ҡылған саҡта шундай тынлыҡ урынлашты, бер япраҡ ҡыштырҙауы ла ишетелмәне. Хушлашып, ҡайтырға сыҡҡас, ҡәберлектәге ағас тағы ла яңғыҙы шаулай башланы. Тәбиғәттең был үҙгәрешен барыһына ла ҡысҡырып әйтеп торҙом. Барыһына ла был сәйер хәл ныҡ тәьҫир итте.

"Был ни хикмәт?" - тип мин был хәлде онота алмай, оҙаҡ уйланып йөрөнөм. Шунан күңелемә уны аңлау килде. Әүлиәләр, ҡөҙрәтле хәҙрәттәр, ишандар үҙҙәре йәшәгән ерҙе тере саҡтарында уҡ изге фәрештәләр төбәгенә әүерелдереп ҡалдырған. Улар рухы шулай тәбиғәт күренеше аша кешеләрҙең ҡылғандарына яуап бирә. Изгелек ҡылғандарға - изгелек менән яуап бирә, яманлыҡ ҡылғандарға ла ниндәйҙер һабаҡ бирелә, тип уйлайым.

Беҙҙең күҙгә күренмәгән йәнәш донъябыҙҙа фәрештәләргә лә, шайтандарға ла урын бар. Раббыбыҙ тарафынан кешегә хеҙмәт итергә тәғәйенләнгән фәрештәләр уны дөрөҫ тура юлдан алып барһа, шайтандар уны аҙаштыра, түбәнселеккә илтә. Аллаһы Тәғәлә әҙәм балаһына ирек биргән: йә ул яҙмышын фәрештәләр менән бәйләй, йә Иблес ҡоло була. Бер яҡшы ғәмәл ҡылһаң - ун фәрештә, ун яҡшылыҡҡа йөҙ фәрештә килер, намаҙ уҡып, Ҡөрьән аяттары уҡылған ергә - мең фәрештә, ата-әсәңде, туғандарыңды ҡәҙер итһәң, етемдәргә, ярлыларға ярҙам итһәң, меңәр фәрештә килер. Ҡөрьән Кәримдә (3:125) әйтелә: "Әгәр һеҙ сабырлы һәм тәҡүәле булһағыҙ, ул ваҡытта Раббығыҙ һеҙгә биш мең билдәләнгән фәрештәләр менән ярҙам итер".

Изгелек эшләүҙән туҡтамай, Аллаһтың барлығына, берлегенә ышанып, яҡшы уй-ниәттәр менән йәшәгән халыҡтар төйәк иткән ер айҙар-йылдар уҙған һайын, фәрештәләр менән тулылана барыр. Изге төбәккә әүерелгән ерҙәргә ауырыуҙар килһә, сәләмәтлек табыр, ҡайғыларын таратыр. Сөнки ауырыуҙар, бәлә-ҡазалар кешеләрҙең үҙҙәренең уйҙарынан барлыҡҡа килә бит. Насар, ҡара уйҙар - улар шайтандар, Иблес ҡолдары, Аллаһы Тәғәләнең дошмандары. Шайтандар үҙ ҡолдарына һәр ваҡыт үҙен йәлләтергә, байлыҡ туплау менән мауығырға, көнләшергә, ҡайғырырға, ҡыҙғанырға, күрә алмаҫҡа бышылдап ҡына тора. Ҡайҙа бысраҡ, ғәйбәт, эскелек, Ҡөрьән аяттары уҡылмай - шул ергә ен-шайтандар оялай. Ундай урындар әллә ҡайҙан күңелгә шом һала. Ул йорттан тиҙерәк сығып китке килә, йәшәгән кешеләре менән һөйләшке килмәй, ризыҡтарына үрелергә ҡул бармай.

Ен-шайтандарҙы ҡыуырлыҡ көскә эйә булған ҡөҙрәтле дин әһелдәребеҙ бар. Ләкин шулай ҙа була: дин яғынан аҙ белемле кешеләр дин әһелдәре, муллалар ярҙамында иман юлына баҫып, шайтандарҙан ҡотолғас, артабан ни эшләргә белмәй, аптырап ҡала, бер аҙҙан элекке ғәҙәтенә ингән йәшәү рәүешен дауам итә һәм яңынан бысрана. Тәүратта әйтелә бит: "Когда нечистый дух выйдет из человека, то ходит, ходит по безводным местам, ища покоя, но не находит, и говорит: "Возвращусь-ка я в свой дом, откуда вышел", и придя, находит его выметанным, убранным, не занятым. И берет с собою 7 других духов, злейших себя, и вернувшись, для человека того последнее бывает хуже первого".

Тимәк, кеше шайтандарҙан ҡотолғас, сафланғас, барыһын да ғәфү иткәс, тик изгелек менән күңелен тултырып, үҙен һәм тирә-яғын изге аура менән уратып алырға тейеш. Шунда ғына яҙмышың аҡ тулҡындарға төрөлөп, ғүмерең бәхет менән үтер. Ғайса бәйғәмбәр: "Камил булығыҙ!" - тигән. Эйе, камил булайыҡ. Иртән ҡыҙарып ҡалҡҡан ҡояшҡа ҡарап ҡыуанайыҡ, бар доньяға сәләм бирәйек, төнгә изге уйҙар менән инәйек. Һәр ағас, тупраҡ, үлән, сәскә, таш, һулаған һауабыҙ, эскән һыуыбыҙ өсөн Раббыбыҙға рәхмәттәр әйтеп, шөкрана ҡылайыҡ. Ҡылған ғибәҙәттәребеҙ әхирәт донъяһында беҙҙең изгелектең шаһиттары булыр. Аллаһтың һөйөклө бәндәһенә биргән һанап бөткөһөҙ мөғжизәле тәбиғәте менән бергә йәшәү генә кеше өсөн иң ҙур бәхеттер.

Йәшәгән еребеҙҙе изге аура менән уратыу үҙебеҙҙән тора. Бер кешенең изгелектәре генә лә йөҙәрләгән-меңәрләгән кеше йәшәгән ерҙе таҙарта ала. Ундай ерҙә ямғырҙар ваҡытында яуыр, елдәр ҡотормаҫ, һыуҙар ташмаҫ. Бөтә нәмә күпереп үҫер, сәскә атыр, ризыҡтарыбыҙға бәрәкәт, донъяға ҡот, халҡыбыҙға иман нуры килер. Был донъяла йәшәү үҙе бер ожмах икәнен күрербеҙ, иншалла.

**Зәлифә ШАКИРОВА.**

ТӘҮБӘ

# ЭСЕҮҘӘН ҠОТОЛОП БУЛА



### 24-се һабаҡ: "Ишек тотҡаһы". Уны сайып эсергәндән һуң организмға ингән миллионлаған вирус-бактериялар ни эш башҡара?

Элекке замандарҙа ҡаты ауырыған кешегә ишек тотҡаһын сайып эсергәндәр. Дауалауҙың был ысулы күптән онотолған һәм ул кешенең һаулығына тик зыян килтереүсе кире күренеш, иҫкелек ҡалдығы булараҡ ҡына атеистик күҙлектән тәнҡитләп иҫкә алынды. Уға башҡа төрлө аңлатмалар булманы ла шикелле. Йәнәһе, дин менән аңы томаланған шыр наҙандар ана ниндәй юлдар менән кешене ағыуларға тырышҡан!

Быңдай ысулдың асылын аңлар өсөн бик күп тапҡыр медиктарға, тарихсыларға, халыҡ табиптарына мөрәжәғәт итеп ҡараным, был хаҡта белеүсе, анығ яуап биреүсе булманы. Ысулдың серен төрлө диндәрҙәге дауалау ысулдары араһынан да эҙләп ҡараным, шулай уҡ яуап таба алманым.

Бары тик Владимир Мэгренең "Анастасия" китабында таптым мин ишек тотҡаһын сайып эсереүҙең серен асырлыҡ асҡыс. Ул китапта әйтелеүенсә, кеше үҙ баҡсаһында үҫкән йәшелсә-емеш менән туҡланып, тәнендәге барлыҡ ауырыу-сирҙәренән ҡотола ала. Тик быңдай туҡланыуҙың шундай шарты ла бар: ул йәшелсә-емештәрҙе кеше көн һайын үҙенең аяғын йыуған һыу менән һуғарырға тейеш. Был осраҡта уның ауырыу-сирҙәре тир аша тышҡа токсик матдә булып сығып, аяғына йыйылған тупланма ризыҡ аша кире организмға инә лә, шундай уҡ ауырыу-сирҙәргә ҡаршы иммунитетты нығыта. Ябайлаштырып әйткәндә, "шынаны шына менән һуғып сығаралар", йә булмаһа, "йылан сағыуына ҡаршы дарыуҙы йылан ағыуынан яһайҙар", һ.б. Тәһәрәт алғанда мотлаҡ рәүештә аяҡтарҙың да йыуылырға тейешлеген иҫебеҙгә төшөрһәк, дини яҡтан да уйланырлыҡ урын бар бында.

Ә инде ишек тотҡаһын сайып эсереүгә килгәндә, мәсьәлә ябай ғына кеүек. Ишек тотҡаһы ул шундай урын, унда бик күп кешеләрҙең ҡулы ҡағылғанлыҡтан, йыйылған микроб-вирус-бактериялар һаны ла бихисап. Улар миллионлаған төрлө. Тимәк, логика буйынса фекер йөрөткәндә, ишек тотҡаһына йәбешкән микроб-вирус-бактериялар берләшмәһен һыу менән бергә үҙенә ҡабул иткән кеше, "Анастасия" китабы осрағындағы кеүек үк, үҙ организмының ауырыу-сирҙәргә ҡаршы тора алыу көсөн нығыта булып сыға.

Бына бит нисек! Тик ниндәй ауырыу-сирҙәр менән яфаланғанда кешегә ишек тотҡаһын сайып эсергәндәр һуң? Әлбиттә, эс ҡатыулағанда... Яһалма шарттарҙа үрсетелгән бактериялар менән эс ҡатыуын бөтөрөү практикаһы хәҙерге медицинала ла бар. Әммә бынан тыш, тағы ла ниндәй осраҡта кешегә ишек тотҡаһының сайынты һыуын эсергәндәр һуң? Был турала тарихи сығанаҡтарҙа мәғлүмәт юҡ, фән өнһөҙ, ололар белмәй. Шуға күрә ҡайһы бер аңлашылып бөтмәгән нәмәләрҙе ихтималлап уйлау, фаразлау юлы менән генә аңларға һәм аңлатырға булалыр.

Фекерҙе ошо йүнәлештә артабан үҫтереү өсөн үҙемдең эсеүемде ташлауым тәжрибәһенән ҡыҙыҡ ҡына күҙәтеүҙәремде килтерәм. Кемгәлер файҙаһы ла тейер, бәлки. Мин был хаҡта "Мин эсеүемде ташланым" тигән һабаҡтарымдың тәүге өлөштәрендә үк яҙҙым инде. Унда эсеүҙән ҡотолоуымдың тәүге көнөнән башлап артабанғылары хаҡында, үҙемдең хәл-торошом тураһында һүҙ бара. Хәҙер шундағы бер хәл-күренеш тураһында ентекләберәк һөйләмәксемен.

Мин эсеүемде ташларға бер нисә тапҡыр ынтылып-ынтылып ҡарап, йөҙ тапҡыр ташлап, шунсама мәртәбә киренән башлаған кеше булараҡ, тик бер осраҡта ғына туҡтала алдым. Йәғни, һуңғы тапҡыр эскәнемдә иртәнсәк һыранан башлап китеп, төшкә ҡарай шарапҡа күсеп, төштән һуң бальзам ҡатышҡан араҡы менән дауам итеп, аҙаҡ коньяк һәм виски һәм (иҫләмәйем) тағы нимә менәндер бутап, кискә инде барыһын тағы бер тапҡыр бутап туҡталғанмын... Туҡталмаһам, йөрәгем туҡталыр ине. Һәм ошо эсеүем, 1997 йылдың 18 июль көнө, һуңғы тапҡыр эскән көнөм булып, теге быуатта, теге мең йыллыҡта тороп ҡалды. Хәҙер инде мин инде үткән быуатта ғына түгел, үткән мең йыллыҡта эсеүҙән ҡотолған кеше! Шуныһына ҡыуанам: минең кеүектәр бихисап икән! Ә һеҙ "Халҡыбыҙ эсә!" тигән булаһығыҙ. Дошман һүҙе ул. Ышанмағыҙ, әйткәнемсә, башҡорттар түгел, маңҡорттар эсә...

Ә ни өсөн мин быға гел бер төрлө спиртлы эсемлекте бик күп итеп ҡабул иткәнемдән һуң эсеүемде ташлай алманым һуң? Ниңә был тырышлыҡтарымдан бер нәмә лә килеп сыҡманы? Тәүбәгә килер өсөн кеше критик ситуацияла - йәшәү менән үлем араһында тороп ҡалырға тейеш (был хаҡта ла алдараҡ яҙҙым) һәм төрлө-төрлө сортлы спиртлы шыйыҡсаларҙы бутап эсеү шундай ситуацияны тыуҙыра ла инде. Тимәк, эсеүеңдән үҙ ихтыярың менән ҡотолғоң килһә һәм бер нисек тә килеп сыҡмаһа, барыһын да бутап эсеп ҡара икән! Хәҙерге супермаркет магазиндары 1997 йылдағы ише генә түгел. Унда мин 6-7 төрлө спиртлы шыйыҡсаны бутағанмын, ә хәҙер был һанды 60-70 төрлөгә еткерергә була.

Бына беҙҙең алда, бер шағир әйтмешләй, "өс ыштанһыҙ факт". Аяғыңды йыуған һыу менән һуғарыуҙан үҫкән йәшелсә-емеште ашап, ишек тотҡаһы сайып эсеп, ауырыу-сирҙәрҙән ҡотолоу, эсеүҙе ташлар өсөн, йәғни үҙеңдә спиртлы эсемлектәргә ҡарата ытырғаныу тойғоһон уятыр өсөн уларҙың һәр төрлөһөн бутап эсеү. Өс осраҡта ла кеше организмының үҙен емертеүгә ҡаршы йүнәлтелгән көстәргә ҡаршы тора алыусанлығы нығый, иммунитеты арта. Өс осраҡта ла кеше организмына бер юлы бер нисә төрлө емерткес көс, шөҡәтһеҙ армада ташлана.

Минеңсә (башҡалар нисек уйлайҙыр), кеше организмының теләһә ниндәй ауырыу-сиргә, вирус һөжүменә, башҡа төрлө һәләкәттәргә ҡаршы көрәшеүсе **төп көсө - иммунитеты** тик организмдың критик ситуацияға барып еткәненән һуң ғына ҡуҙғала. Баҡтиһәң, шуның өсөн кәрәк икән дә бер юлы бер нисә миллион төрлө микроб-вирус-бактерияларҙы организмға индереү. Шуның өсөн кәрәк икән дә бер юлы күп төрлө градустағы һәм сорттағы спиртлы эсемлектәрҙе ҡабул итеү. Былар барыһы ла яһалма рәүештә организмда критик ситуация тыуҙырып, ундағы барлыҡ көстәрҙе **"ватанды һаҡлау өсөн изге яуға күтәреү"** өсөн кәрәк икән дә. Бына һиңә - мә!

Сағыштырыу өсөн ябай ғына миҫал-ситуация. Һеҙҙең алда биш кеше тора икән, ти. Уларҙың тәүгеһе алдаҡсы, икенсеһе - бур, өсөнсөһө - үсексән, дүртенсеһе - һуғыш суҡмары, ә бына бишенсеһе - алдаҡсы ла, бур ҙа, үсексән дә, һуғыш суҡмары ла. Һеҙ ошо биш кешенең ҡайһыһынан нығыраҡ һаҡланыр инегеҙ? Әлбиттә, бишенсеһенән. Сөнки ул бер юлы алдай ҙа, урлаша ла, үсегә лә, етмәһә, һуғышырға ла күп һорамай. Һеҙ ошо биш кешенең ҡайһыһы менән көрәшеп йәшәһәгеҙ, тиҙерәк сынығаһығыҙ, тормош ауырлыҡтарына бирешмәҫкә өйрәнәһегеҙ? Әлбиттә, бишенсеһе менән. Ә бына тап шул "бишенсе" тигәнебеҙ һеҙҙең организмға үтеп инеүсе иҫәпһеҙ-һанһыҙ вирус-микроб-бактерия, шәхесте эске һәм тышҡы яҡтан тарҡатыусы бихисап төрлө "шайтан һыуы"...

**Әхмәр ҮТӘБАЙ.**
**(Дауамы бар).**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ТОРМОШ ҠАНУНДАРЫ

## Иғтибарҙы нимәгә йүнәлтһәк, алдыбыҙға шул килер

Беҙ ниндәйҙер билдәле бер уйға иғтибарыбыҙҙы йүнәлтәбеҙ икән, аңыбыҙ тиҙ арала хәтер йомғағынан был өлкәгә ҡағылышлы уйҙар ебен тағата башлай. Ыңғай һәм яҡты уй-тойғолар беҙҙе рухландырып ебәрә. Йәки, киреһенсә, әгәр беҙ ҡурҡыу ҡатыш кире уй-тойғоларға биреләбеҙ икән, тағы ла күберәк негативлыҡ йәлеп итәбеҙ. Ниндәй ҙә булһа эш башҡарғандағы уңышыбыҙ беҙҙең ни тиклем ыңғай йәки кире уйҙарға бирелеү-бирелмәүгә ҡайтып ҡала. Әгәр беҙ үҙебеҙҙә булмаған әйбер тураһында ғына уйлаһаҡ (кире яҡ), үҙебеҙ эйә булғанын да (ыңғай яҡ) күрә алыуға һәләтлеген юғалтасаҡбыҙ.

Бер минутҡа ғына туҡтап, уйыңды "күк" тигән һүҙгә тупла. Моғайын да, һин шундуҡ күк йөҙөн йәки океанды күҙ алдына килтерерһең. Ошо уҡ һөҙөмтәне беҙ абстракт мәғәнәләге һүҙгә ҡарата ла күҙәтә алабыҙ. Әйҙә, "бәхетле" тигән һүҙҙе ҡарап үтәйек. Бөтә иғтибарыбыҙҙы был һүҙгә йүнәлтһәк, яҡшы итеп үткәрелгән ял, уйнап йөрөүсе көләс йөҙлө бала, йә иһә йәш саҡта ҡараған берәй шәп фильм күҙ алдына баҫасаҡ. Иғтибарҙы йүнәлтеү өсөн ниндәй генә объектты һайлаһаҡ та, беҙҙең аңыбыҙ уны автоматик рәүештә һиҙелерлек асыҡ сағылышлы итеп күрһәтә.

Әгәр ҙә шулай икән, ниңә беҙгә кире образдарға ҡарағанда, ыңғай образдарға фекер тупламаҫҡа? Әйтәйек, һин ҡатмарлы һынау алдында тораһың, ти, ә аңыңа "уңышһыҙлыҡ" тигән һүҙ оялаған да сыҡмай ҙа ҡуя. Хәҙер шул һынау менән мәшғүл булғанда һин "уңыш" тигән һүҙгә төп иғтибарыңды йүнәлт. Шундуҡ һинең аңыңа уңышлы башҡарылған эштең ыңғай өлгөләре килеп тула башлай: кешеләр һинең уңышыңды баһалап, ҡулыңдан ҡыҫа, һинең менән һоҡланып, шат йылмая. Күҙ алдына килтергән был уңыш үҫә барыусы характер алып, һин үҙеңде тағы ла ҡатмарлыраҡ мәсьәләләрҙә лә уңыш ҡаҙанған итеп күҙ алдына килтерә аласаҡһың.

Әммә был уйҙар һинең ысынбарлыҡтағы эш һәләтлегеңә ниндәй йоғонто яһай һуң? Һин ниндәйҙер образға иғтибарыңды туплаған ваҡытта, аңыңды биләгән әйбер хаҡында һөйләй башлайһың. Шулай итеп, әгәр ҙә һин ыңғай образдарға иғтибарыңды туплайһың икән, моғайын да, кешеләр менән һөйләшкән ваҡытта ла ул турала һүҙ ыңғайы иҫкә алып китерһең. Яҡшы тыңлаусы һинең ыңғай һүҙҙәреңде үҙенә һеңдереп бара һәм һөҙөмтәлә уның башына был һорауға ҡағылышлы әллә күпме ыңғай идеялар тыуыуы мөмкин. Осҡондан нисек ялҡын тоҡанһа, ул да был ыңғай идеяларын бүтәндәр менән уртаҡлаша ала, ә улар үҙ сиратында тағы ла кемдәрҙер менән бүлешә. Уйҙар беҙҙең аңда ғына түгел, бүтәндәрҙең дә аңында киңәйеү һәләтенә эйә.

Ыңғай уйҙарға иғтибар туплау тағы ла күберәк ыңғай уйҙар тыуҙыра, ә был беҙҙең эштәрҙең уңышын дәртләндереп тороуы мөмкин. Һәр ваҡыт ошо тормош ҡанунын иҫеңдә тот: беҙ нимәгә иғтибар йүнәлтһәк тә, ул киңәйә бара. Үҙең эйә булған яҡшы әйберҙәрҙе ыңғай һәм ҡыуаныс менән ҡабул итергә өйрәнеп, һин киләсәктә юлыңда осраған көтөлмәгән һәр ҡыуаныслы осраҡтан ҡәнәғәтлек алырға ла өйрәнәсәкһең.

**Джон Макс ТЕМПЛТОН.**

СӘЛӘМӘТ БУЛ!

**Балағыҙ сей картуф ашаһа, стенаның штукатуркаһын ялаһа, ҡурҡмағыҙ, был психик тайпылыш түгел, ә организмда тимер етешмәүҙән барлыҡҡа килгән аҙ ҡанлылыҡ билдәләре. Ни өсөн был ауырыу йышыраҡ балаларҙа күҙәтелә һәм унан нисек ҡотолорға?**

# БАЛАҢ АҘ ҠАНЛЫМЫ?



## Ит һәм ҡарабойҙай ашат!

**Анемия - аҙ ҡанлылыҡ тип тәржемә ителә.**

Ҡан әҙәйә икән, тип аңлап ҡуймағыҙ. Аҙ ҡанлылыҡ ваҡытында ҡанды ҡыҙыл төҫкә буяусы гемоглобин һәм ағза, туҡымаларҙы кислород менән туҡландырыусы эритроциттар етешмәй, шуға ла сирлеңен йөҙө гел аҡһыл була. Ғәҙәттә 3 йәшкә тиклемге сабыйҙарҙа аҙ ҡанлылыҡ йышыраҡ күҙәтелә. Әммә бала дөрөҫ туҡланмаһа, аҙ хәрәкәтләнһә, саф һауала һирәк булһа, анализдар ҙурыраҡ балаларҙа ла аҙ ҡанлылыҡ булыуын күрһәтәсәк. Ҡайһы саҡта һау балаға ла анемия тигән диагноз ҡуйыуҙары ихтимал, йышыраҡ быңдай осраҡта уның сәбәптәре асыҡланмай.

**Табиптар анемияны ике осорға айырып йөрөтә.**

Әгәр гемоглобин 100-80 г/л тиклем төшһә - 1,5-2 йәштәге балалар өсөн анемияның беренсе осоро тип иҫәпләнә. Был осраҡта табиптар дөрөҫ туҡланыу менән бер рәттән, составында тимер булған препараттар ҙа тәғәйенләй. Контроль анализдар өсөн йүнәлтмә бирелә, 2-3 ай бала даими күҙәтеү аҫтында була.

Гемоглобин кимәле 80-дән түбән төшһә (ҡайһы саҡта 40 һәм унан да түбән), икенсе осор тип йөрөтөлә. Был осраҡта бала аҡыл һәм физик үҫеш буйынса тиҫтерҙәренән артта ҡалыуы ихтимал. Шуға ла мөмкин булһа, стационарҙа тикшерелеп, табиптар күҙәтеүе аҫтында дауаланырға кәңәш ителә.

**Анемия билдәләре:**

-Тире аҡһыл төҫтә, ҡытыршыланып тора.

-Лайлалы тиресәләр, ирендәр, күҙ ҡабағы аҡһыл.

-Баланың хәле юҡ, йыш илай, уйынға, уҡыуға ҡыҙыҡһыныу кәмей.

-Тырнаҡтар үтә күренмәле түгел, тиҙ һына, ҡайһы саҡта горизонталь һыҙыҡтар барлыҡҡа килә.

-Бала йыш ауырый, сөнки иммунитет түбәнәйә.

-Аҡбур, стена штукатуркаһын ашай, ер, балсыҡ, күмер, сей картуф, ҡамыр, бешмәгән ит, ярмаларҙы тәмләп ҡарай.

-Балаға лак, буяу, ирегән асфальт һәм башҡа ҡырҡыу "сәнәғәт еҫтәре" оҡшай.

**Анемия ваҡытында нимә ашатырға?**

Педиатрҙар балаға күберәк ит, ҡарабойҙай бирергә, һөттә аҙыраҡ эсергә кәңәш итә. Диетологтар әйтеүенсә, һыйыр йәки кәзә һөтө менән яһалған сәй тимер үҙләштерелеүгә ҡамасаулай, ә әскелтем морс, әфлисун һуты кеүек составында аскорбин булған эсемлектәр, киреһенсә, тимер үҙләштереүгә ярҙам итә.

Һыйыр, ҡуян итендә, хөрмәлә, алмала, айвала, киптерелгән емештәрҙә, тауыҡ һәм бөҙәнә йомортҡаһында, балыҡтың аҡ һәм ҡыҙыл сорттарында тимер күп. Ҙурыраҡ балаларға аҙнаһына бер тапҡыр бер ҡалаҡ ҡыҙыл уылдырыҡ бирергә ярай.

Тимер һәм аҡһымдан тыш, балаға составында В6 һәм В12 витаминдары һәм фолий кислотаһы булған аҙыҡтар, мәсәлән, йәшел төҫтәге йәшелсәләр, сәтләүектәр, ит, балыҡ, ҡуҙаҡлылар, ҡара икмәк, ҡарабойҙай ашатыу мөһим.

Педиатрҙар фекеренсә, диета менән генә аҙ ҡанлылыҡты еңеп булмай һәм улар шуға ла тимер препараттары һәм мультивитамин комплекстары тәғәйенләй ҙә инде.

**Күкрәк һөтө имгән сабыйға тимер препараттары бирергәме?**

артабан 6 айға тиклем уҙа әсә һөтө аша ингән микроэлементтар етә. Әгәр ҙә гемоглобин һәм эритроцит кимәле түбән икән, табип менән кәңәшләшергә кәрәк. Баланы оҙағыраҡ имеҙеү яҡшы, был осраҡта микроэлементтар һәйбәт үҙләштерелә.

ӘЙТКӘНДӘЙ...

**Балалар өсөн көнөнә күпме кальций кәрәк икәнен беләһегеҙме? Кальций һөйәктәрҙә йыйылһа ла, ул организмдан көн һайын йыуылып сығыу һәләтенә лә эйә. Шуға ла көн һайын кальцийлы аҙыҡтар ашарға кәрәк. 3-9 йәштәге бала өсөн кальцийҙың тәүлек нормаһын (900 мг) бер литр һөт тулыландыра ала. Әгәр балағыҙ һөт эсмәй икән, уны 250 г йогурт, 60 г ҡаймаҡлы эремсек, 50 г сыр менән алыштыра алаһығыҙ. Был продукттарҙың береһен көнөнә 2-3 өлөш ашау етә. Кальций D витаминынан тыш үҙләштерелмәй икәнен дә онотмағыҙ. Бының өсөн көн һайын 30 минут тирәһе ҡояшта йөрөгөҙ, 20 тамсы балыҡ майы эсергә лә була.**

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

### Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**13 декабрҙә** М.Буранғоловтың **"Шәүрәкәй"** романтик-музыкаль драмаһы.

**16 декабрҙә** Т.Дәүләтбирҙинаның **"Минең ғаиләм"** мелодрамаһы.

**17 декабрҙә** Нурия Ирсаева һәм Фидан Ғафаров ҡатнашлығында **"Йәшлектәргә ҡайтайыҡ әле..."** театрлаштырылған концерт.

**18 декабрҙә** Н.Ғәйетбаевтың **"Аты барҙың - дәрте бар"** комедияһы.

**19 декабрҙә** Башҡортостандың һәм Рәсәйҙең халыҡ артисы, С.Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты **Хөрмәтулла Үтәшевтың юбилей кисәһе.**

**КЕМ АЛЫҠ?**

Театрҙың баш режиссеры Айрат Абушахманов ҡуйған "Шәүрәкәй" музыкаль драмаһын халыҡ айырыуса һөйөү менән ҡабул итә. Спектаклдең ҡатмарлы сюжеты, йыр-моңға, фольклорға ҡоролоуы, бигерәк тә актерҙарҙың дәртле итеп уйнауҙары - барыһы ла тамашасының күңелен яулай.

Хөрмәтле гәзит уҡыусылар һәм театр тамашасылары! Түбәндәге һорауҙарға дөрөҫ яуап ҡайтарыусылар театр тамашаларына саҡырыу ҡағыҙы менән бүләкләнәсәк. Йәгеҙ, кем алыҡ?

**1.** "Шәүрәкәй" спектаклендә Сураҡай ролен кем башҡара?

а) Руслан Хайсаров

б) Руслан Хәсәнов

в) Руслан Ғәлимов

**2.** Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры нисәнсе йылда ойошторолған?

а) 1909 б) 1919 в) 1929

### Хөсәйен Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**14-18 декабрҙә** Ғәзиз Әлмөхәмәтов исемендәге Республика вокалистар конкурсы үтә. Конкурстың беренсе туры 14 декабрҙә, икенсе туры 15 декабрҙә, өсөнсө туры 16 декабрҙә 11.00 сәғәттә үтә. Республика вокалистар конкурсы 18 декабрҙә 17.00 сәғәттә Орган залында Гала концерт менән тамамлана.

**16 декабрҙә** тәүге тапҡыр башҡорт эстрадаһы ветерандары ҡатнашлығында **"Һағынам һине, сәхнә"** тигән ҙур концерт көтөлә. Бына улар - Фәриҙә Ҡудашева, Мәғфирә Ғәлиева, Рәшиҙә Туйсина, Рамаҙан Йәнбәков, Редик Фәсхетдинов, Минләхмәт Ғәйнетдинов, Фән Вәлиәхмәтов, Рәйлә Аҙнаҡаева, Мәүләтбай Ғәйнетдинов, Фәнүнә Сиражетдинова, Гөлсөм Хәбибуллина, ФлүрәНоғоманова, Ғүмәр Әбделмәнов, Нәзирә Закирова, Лина Гәрәева, Рәис Вәғизов, Шамил Хәмәҙинуров, Лина Зарипова, Марат Әсәҙуллин, Тәнзилә Үҙәнбаева, Зөлфиә Ҡудашева, Римма Дашкина, Миңнур Килмөхәмәтова, Гөлнур Әйүпова, Мәғариф Әхмәҙиев, Мәүсилә Ғәйнетдинова.

### Мостай Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**18 декабрҙә** балалар өсөн 11.00 һәм 14.00 сәғәттә **"Әминбәк"** әкиәте премьераһы.

**19 декабрҙә** киске 18.00 сәғәттә **"Эх, егеттәр, егеттәр"** комедия-фарсы.

Камера сәхнәһендә **22 декабрҙән 30 декабргә** тиклем 10.30 һәм 12.00 сәғәттә **"Тылсымлы ҡурай"** әкиәте.

Театр 22 декабрҙән 11 ғинуарға тиклем балаларға шыршы байрамдары үткәреү өсөн коллектив заявкалар ҡабул итә.

ҺҮҘ АРАҺЫНДА...

# ҺЫУЫТҠЫСТЫ...

## кем уйлап сығарған?

◆ 1903 йылдың 17 декабрендә Орвилл Райт тәүге тапҡыр самолетта ерҙән 3 метрға күтәрелә, 30 м тирәһе оса һәм ергә төшә. Һауыҡландырғыс 12 секунд! Ағаһы Уилбер менән ул самолеттың конструкцияһын ябай велосипедтар сығарылған оҫтаханала төҙөй. Улар ҡоштарҙы күҙәтеп, аппарат һауала тотоноп торһон өсөн, пилотаж менән ҡоралландырыу идеяһына килгәләр.

◆ 1905 йылда Альберт Эйнштейн 26 йәшендә үҙенең билдәле "сағыштырмалыҡ теория"һын яҙа.

◆ 1908 йылда Джеймс М.Спенглер электр саң һурҙырғысы уйлап таба. Был электе саң һурҙырғыс арбаға ҡарағанда өйҙә йыйыштырыуға унайлыраҡ була.

◆ 1913 йылдың 21 декабрендә New York World уҡыусылары иғтибарына тәүге кроссворд тәҡдим ителә.

◆ 1914 йылда Кливленда ҡыҙыл һәм йәшел төҫлә светофор эшләй башлай. Һары төҫ бер аҙ һуңыраҡ Нью-Йорк урамдарында күренә башлай.

◆ 1920 йылда беләҙекле сәғәттәр һатыуға сығарыла. Ә һалдаттар уны 1914 йылғы һуғыш ваҡытында уҡ уйлап сығарған була.

◆ 1922 йылда американлылар һыуытҡыс уйлап сығара. Биш йылдан һуң ул Европала күренә башлай.

◆ 1930 йылда американлылар өйҙәрендә автоматик кер йыуыу машинаһы менән ҡуллана башлайҙар.

◆ 1931 йылда Якоб Шик электр ҡырынғысы уйлап таба.

◆ Ошо уҡ йылда һуҡырҙар өсөн ҡул таяғы уйлап сығаралар. Уны тәүге тапҡыр Парижда ҡулланып ҡарайҙар, һуңынан ул бөтә донъя һуҡырҙары тарафынан ҡабул ителә.

◆ 1936 йылдың 22 ноябрендә телевидениела Би-Би-Си компанияһы тантаналы рәүештә беренсе дауамлы тапшырыуын күрһәтә башлай. Джон Ложье Байрд быны 1925 йылда уҡ эшләп ҡараған була.

◆ 1937 йылда хирург Владимир Петрович Демихов беренсе тапҡыр яһалма йөрәк эшләй һәм һынап ҡарай.

◆ 1940 йылда Германияла тәүге магнитофон һатыуға сығарыла.

◆ 1941 йылда А.Флеминг 1928 йылда асҡан пенициллинды ауырыуҙарҙа һынап ҡарайҙар һәм барыһы ла уңышлы уҙа.

◆ 1945 йылдың 15 июлендә Нью-Мексико штатының Аламогордо сүллегендә атом бомбаһы һынала. 1945 йылдың 6 августында иртәнге 7.30 сәғәттә 250 000 халҡы булған Японияның ҙурлығы буйынса етенсе ҡалаһы Хиросима йәшәйештән туҡтай. 9 августа Нагасаки ҡалаһы ер йөҙөнән юҡҡа сығарыла.

◆ 1948 йылда микротулҡынлы мейес уйлап табалар.

◆ 1953 йылда музыкаль сентизатор уйлап сығаралар һәм унда тәүге тапҡыр 5 октябрҙә АҠШ-тың Колумбия университетында уйнап ҡарайҙар.

◆ 1954 йылда тәүге тапҡыр ағзаны трансплантациялау (ағзаның бер урынын киҫеп, икенсе урынға күсереп ултыртыу) ысулын ҡуллана башлайҙар. Бостонда Жосеф Мюрей етәкселегендә врачтар төркөмө бөйөрҙө күсереп ултырта. 1967 йылда Көньяҡ Африкала Кристиан Бернард исемле доктор йөрәкте күсереп ултырта, әммә пациент операциянан һуң ун көн генә йәшәй.

ӨФӨ ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ...

# БУРЫСЫҢДЫ ОНОТМА,

## ул - шәжәрәңдең дауамы

**Күптән түгел Совет районының белем биреү, мәҙәниәт, йәштәр сәйәсәте учреждениеларында йыл дауамында барған ижади эшкә йомғаҡ яһалды - Комаров исемендәге Балалар ижады йортонда Шәжәрә байрамы үтте. Унда бөгөн баш ҡаланың Совет районында йәшәгән йәки эшләгән ғаиләләрҙең шәжәрәһе менән танышырға мөмкин ине.**









Егерме быуын вәкилдәренә тиклем күрһәтелгән шәжәрә ағастары эргәһенән вайымһыҙ ғына үтеп киткән кеше булмағандыр был көндө. Мәҫәлән, Өмөтбаевтар нәҫеленең башы 1730 йылға тоташа һәм үҙ эсенә өс быуатты ала. Нәҫеленең данлы улдары: билдәле дәүләт һәм йәмәғәт эшмәкәре, яҙыусы һәм публицист Рамазан Өмөтбаев, башҡорт әҙәбиәтсеһе һәм тәнҡитсеһе, С. Юлаев исемендәге премия лауреаты Ким Әхмәтйәнов һәм башҡалар тураһында "Геофизика" йәмғиәтенең фәнни хеҙмәткәре, техник фәндәр докторы, профессор Вил Өмөтбаев һөйләне. Ул "Иң тәрән тамырлы шәжәрә өсөн" дипломына лайыҡ булды.

Хәсәновтар ғаиләһе йыр-моңға маһир, уларҙың күптәре уҡытыусы һөнәрен һайлап, ғүмерҙәрен балалар уҡытыуға бағышлаған. Шәжәрә байрамында Хәсәновтарҙы лайыҡлы күрһәткән 7-се мәктәп уҡытыусыһы Рәмилә Бәхтиева "Ғаилә ҡомартҡыларын ҡулланған өсөн" дипломы менән бүләкләнде.

БАССР-ҙың атҡаҙанған уҡытыусыһы, оҙаҡ йылдар республиканың Мәғариф министрлығын етәкләгән Фатима Мостафинаның шәжәрәһе лә күптәрҙең иғтибарын йәлеп итте. Был данлы уҡытыусының исемен йөрөтөүсе 20-се ҡала башҡорт гимназияһы уҡыусылары билдәле дәүләт эшмәкәренең шәжәрәһен өйрәнеп кенә ҡалмай, ә театрлаштырылған тамаша аша Фатима Мостафинаның ихтыяр көсөн, күңел йомартлығын һәм аҡыл зирәклеген күрһәтә алды. Тап уларға "Шәжәрә өйрәнеү һәм төҙөүҙәге фәнни табыш өсөн" дипломы тапшырылды.

БР-ҙың атҡаҙанған артисы, әлеге мәлдә 20-се ҡала башҡорт гимназияһында уҡытыусы булып эшләүсе Фәниә Сәйфуллина ғаиләһенең сығышы ла бик бай йөкмәткеле һәм сағыу булды һәм "Шәжәрәне ентекле өйрәнеү өсөн" дипломы менән бүләкләнде. Бынан тыш, Өфө китапхана колледжы, Өфө педагогия колледжы студенттары, башҡа ҡатнашыусыларға рәхмәт хаттары тапшырылды.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Байрамдың тағы бер хәтерҙә ҡалған мәле - 13-сө балалар баҡсаһы тәрбиәләнеүсеһе Батырхан Шәйхетдиновты байрамдың иң йәш ҡатнашыусыһы тип иғлан итеү булды. Шәйхетдиновтарҙың шәжәрә ағасы үҫеүен дауам итә - был баланы билдәләп үтеү шуға ишара ине. Ысынлап та, беҙ бит үҙ халҡыбыҙға туған телен һәм илен ҡәҙерләгән матур балалар ҡалдырыу өсөн йәшәргә бурыслыбыҙ. Ошондай шәжәрә байрамдары күптәргә ерҙәге ошо бурысын иҫкә төшөрөү өсөн дә бик шәп сара ул.**

ХОККЕЙ

# ОҪТАРАҠ УЙНАНЫЛАР

**Силәбе ҡалаһының "Трактор" командаһы юлаевсыларға яҡшы таныш. "Трактор" һәр ваҡыт иң-иң көслөләр иҫәбендә булды. Әммә һуңғы йылдарҙа ул уртаса уйнаусы командалар араһында ҡалды. Быйыл иһә "Трактор" айырыуса ныҡ аҡһай. Һуңғы уйындарҙа бер ыңғайҙан ете тапҡыр отолоуы әлегәсә бер ваҡытта ла булманы.**

"Салауат Юлаев" хоккейсылары Силәбеләге һуңғы матчта ошо күптәнге таныштары менән көс һынашты. Хәйер, көс һынашты, тип әйтеү дөрөҫлөккә бик үк тап килмәй. Юлаевсылар "Трактор" хоккейсыларына ҡарағанда байтаҡ оҫтараҡ, көслөрәк уйнай. "Салауат Юлаев" беренсе осорҙа уҡ 2:1 иҫәбе менән өҫтөнлөк алды. Тәүҙә Илья Борохов, унан Патрик Торесен ҡаршы яҡ ҡапҡаһына берәр шайба индерҙе. Майҙан хужалары бер шайба менән генә яуап ҡайтара алды. Антон Раенко юлаевсылар ҡапҡаһына индергән был шайба беренсе һәм һуңғыһы булды. Юлаевсыларҙан Владимир Антипов, икенсе һәм өсөнсө осорҙа берәр шайба индереп, иҫәпте дүрткә еткерҙе.

"Салауат Юлаев" командаһы 4:1 иҫәбе менән еңеп, 73 мәрәй йыйҙы һәм беренсе урынға дәғүә итте.

**Юныс ӘХМӘҘИЕВ.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә әйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ТЕЛӘКТӘРЕБЕҘ...

## төпһөҙ ҡапсыҡ

**Бер батша үҙенең баҡсалары буйлап йөрөп килергә ниәтләп, һарайынан сыҡһа, ҡапҡа алдында бер хәйерсене тап итә. Хәйерсе унан хәйер һораясаҡ, тип уйлап, батша уға: "Ни теләйһең?"- тип мөрәжәғәт итә. Ерҙә ултырған хәйерсе батшаға аҫтан өҫкә табан ҡарап, былай ти: "Һин минең теләгемде ҡәнәғәтләндерә алған кеше кеүек һорау бирҙең бит әле..." "Әлбиттә, мин һинең теләгеңде ҡәнәғәтләндерә алам, әйт!"- ти батша. Әммә хәйерсе үҙенекен ныҡый: "Ниҙер вәғәҙә итер алдынан ике тапҡыр уйларға кәрәк, батшам..." Батша ҡыҙа башлай: "Мин һин һорағандың барыһын да бирәм. Мин бик баймын һәм ҡеүәтлемен. Мин бирә алмаған нимә һорайһың һуң һин?" "Минең һорауым бик ябай. Бына минең ҡулымдағы ҡапсыҡты күрәһеңме? Мин уны һәр ваҡыт үҙем менән алып йөрөйөм. Шуны ниндәйҙер ҡиммәтле берәй нәмә менән тултыра алырһыңмы икән?" - тигән хәйерсе. "Әлбиттә!" - тигән батша һәм үҙенең ҡаҙнасыһын саҡырып алып, хәйерсенең ҡапсығын аҡса менән тултырырға бойорған. Тик ни ғәжәп: ҡаҙнасы ҡапсыҡҡа аҡса төшөрөп тора, аҡсалар ҡайҙалыр юҡҡа сығып тора, ти. Был хәл бик оҙаҡ дауам иткән, әммә ҡапсыҡ буш ҡалған. Был бәхәс тураһында ишетеп, тирә-яҡтан халыҡ йыйылып киткән: барыһының да батшаның үҙ вәғәҙәһендә тороу-тормауын күргеһе килгән. Батшаның намыҫы һынау алдында ҡалған. Быны аңлап торған батша барлыҡ ҡаҙнасыларын саҡырып алып, батшалыҡта булған бар аҡсаны хәйерсенең ҡапсығына һалырға бойорған. Аҡса ғына түгел, барлыҡ алтын, көмөш, ынйылар ҙа хәйерсенең ҡапсығына киткән. Ә ҡапсыҡ барыбер буш ҡалған. Сират батшаның үҙе менән йөрөткән алтын-көмөштәренә барып еткән. Шунда батша барлыҡ аҫыл әйберҙәрен сисеп, хәйерсенең аяҡ аҫтына ташлаған һәм былай тигән: "Һин еңдең. Ләкин бынан китер алдынан ҡапсығыңдың серен ас, зинһар". Хәйерсе былай тигән: "Сереме? Уның сере ябай: миндәге ҡапсыҡ кешенең теләктәренән яһалған..."**

**Эйе, беҙҙең теләктәр ошо ҡапсыҡ кеүек. Ул теләктәрҙең механизмы шулай: тәүҙә ниндәйҙер яңы мажара көҫәйһең. Шунан һиндә көслө хыял-теләк барлыҡҡа килә. Ул хыялды тормошҡа ашырһаң, бына-бына ниҙер булыр кеүек тойола. Һәм бына һин яңы машина, яхта, фатир һатып алаһың, матур ҡатынға өйләнәһең... Әммә ваҡыт үтеү менән, уларҙың барыһы ла беҙҙең тормошта әһәмиәтле булыуҙан туҡтай. Ниңә? Хыял матдиләшә: машинаң гаражда тора, һарай кеүек йортоң бар - улар һинең мөлкәтеңә әйләнде һәм хыял булыуҙан туҡтаны. Улар ысынбарлыҡҡа әүерелде. Һинең көслө теләгең, ынтылышың юҡҡа сыҡты. Күңелгә тағы бушлыҡ инеп урынлашты...**

**Бына шулай, беҙ йыш ҡына бер теләктән икенсеһенә күсәбеҙ, шул уҡ ваҡытта һәр теләкте ҡандырған һайын, бер ваҡытта ла тултыра алмай торған буш ҡапсыҡҡа әйләнгәнебеҙҙе лә һиҙмәйбеҙ...**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:**
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ,
Ләйсән НАФИҠОВА,
Динара ЯҠШЫБАЕВА,
Таһир ИШКИНИН.

**Беҙҙең адрес:**
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru
E-mail: info@kiskeufa.ru
kiskeufa@ufacom.ru

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| Баш мөхәррир | 253-25-44 |
| Баш мөхәррир урынбаҫары | 246-03-24 |
| Бухгалтерия | 246-03-23 |
| Хәбәрселәр | 252-39-99 |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – 50665, 50673 (льготалы)

Тиражы - 5615
Заказ 5294